ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

14-20 ғинуар (һыуығай) 2017

№2 (732)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Ҡарға батҡан ҡалабыҙ...



4

## Атамаларҙа - хаҡ тамырҙарыбыҙ



7

## Хыялың тормошҡа ашһын, тиһәң...




11

## Унын дауаһы - бәйғәмбәр дауаһы



12

Сканворд 14

***Улың менән биш йәшенә саҡлы батша һымаҡ, ун биш йәшкә саҡлы - хеҙмәтсе һымаҡ, ун биш йәштән һуң дуҫ һымаҡ күреп аралаш.***

***(Боронғо һинд аҡылы).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Матурлыҡ - морат түгел, фәҡирлек - оят түгел, тиһәләр ҙә, бөгөнгө заманда бөтә әҙҙалары теүәл әҙәм өсөн фәҡирлектә йәшәү оят түгелме?

***Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ, педагог-ветеран, Рәсәй Федерацияһы мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы, имам-хатиб:*** Оят инде, хатта тел тартмай улай әйтергә. Үҙегеҙ әйтмешләй, һауһаҡ кеше фәҡирмен тип әйтә алмай, хаҡы юҡ. Колхоздар бөтөрөлгәс, күптәр эшһеҙ тороп ҡалды, тик беҙҙең Ғафури районы Сәйетбаба ауылында халыҡ тырыш, егәрле: пай ерҙәрендә мал аҙығы, бесән үҫтереп сабалар, баҡсаларында картуф, кәбеҫтә, сөгөлдөр, башҡа йәшелсәһен сәсәләр, мал аҫрайҙар - шөкөр, берәү ҙә ас-яланғас түгел. Эйе, күреп ҡалғайным календарҙа: 19 декабрь - фәҡирҙәргә ярҙам көнө, тип. Ул да булһа, халыҡ-ара кимәлдәге ярҙам һәм Ер шарының ысынлап та ас-яланғас хәлдәге асарбаҡтарына ярҙам тураһында һүҙ баралыр, тип уйлайым. Беҙҙең илдә лә күп ярлы халыҡ, тик беҙҙә байҙар фәҡирҙәргә ярҙам итеп өйрәнмәгән: зәкәт, хәйер тигән нәмәне лә белмәй улар. Ундайҙарҙың байлығы рәхәт тормош килтермәйәсәк барыбер эйәләренә. Рәсәйҙә фәҡирҙәр күп, тинем, ләкин милләттәштәремә ҡарата бындай һүҙҙе ҡулланғы килмәй бер ҙә. Халҡыбыҙ беҙҙең ғорур һәм бай рухлы, шуға ла ярлы ғына йәшәгәне лә туҡтауһыҙ зарланып, бахыр хәленә төшмәҫкә тырыша. Өфөгә барһаң, ситтән килгән мигранттарҙың әрһеҙлегенә аптырап ҡайтаһың: ҡул һоноу ғына түгел, юлыңа арҡыры төшөп, кейемдән тартып, баласағаһына тиклем әрһеҙләшеп өйрәнгән, оят тигән нәмәне белмәй ҙә улар. Ҡулын һоноп, хәйер һорауҙың иң ҙур хурлыҡ икәнен белә беҙҙең халыҡ, шуға ла үҙ көнөн үҙе күреп, үҙ көсөнә генә ышанып, ғаиләһен аҫрарға, йүнен табырға ғәҙәтләнгән.

***Илсур БӘХТИЙӘРОВ, эшҡыуар, Ҡариҙел районы:*** Мин йәш кеше, бәлки, икенсерәк төрлө уйлаһам, ғәйеп итмәҫһегеҙ. Фәҡирлектә көн күргән кешегә оят түгелме, тип әйтеү, нисектер, бигүк яҡшы түгел һымаҡ, сөнки фәҡирҙе шундай хәлгә төшөргә мәжбүр иткән дәүләткә оят булырға тейештер бит иң тәүҙә? Әлбиттә, һаулығы бар кеше ҡулынан килгәнен эшләмәйенсә, хәйергә генә өмөт итеп ултыра алмай. Ләкин ауылда һаулығы булғандарға ла, йәштәргә лә хатта эш юҡ икәнен дә беләһегеҙ. Шуға ла күпселек ир-егеттәр хәйерселектән ҡасып, күрше төбәктәргә һәм ҙур ҡалаларға, ҡайһылары Себергә китеп эшләй. Мин үҙем мәктәптә һыҙма, рәсем, физкультура дәрестәренән уҡыта инем, оптималләштереү һөҙөмтәһендә башланғыс кластар ғына тороп ҡалғас, ҡыҫҡартыуға эләктем. Аптырап, ҡайғыға бирелеп, эсеп ятһаң, тап ана шул хәйерсе көнөнә ҡалаһың да инде. Унан бит ғаиләң, ике балаң күҙгә ҡарап тора. Юҡ, улар бер ҡасан да "хәйерсе балаһы" тигән исем күтәрмәйәсәк! Бына нимә сәмләндерҙе мине. Тотҡоҡ та элек урман хужалығында эшләп, предприятие ябылыу сәбәпле эшһеҙ йонсоған ағайым менән мебель оҫтаханаһы асып ебәрҙек. Улыма ултырғыс яһап, уйнап ҡына башланған эш күңелемә ятты. Унан өҫтәл, өйҙә дәрес әҙерләргә балалар партаһы, балалар карауаты, хатта диван, комод, һандыҡ, ишек-тәҙрә яҡтары, рамдар һәм башҡа шундай нәмәләр ҙә яһай башланыҡ. Күрше ауылдарҙан килеп заказ биреп китәләр - эшһеҙ, аҡсаһыҙ ултырмайбыҙ. Ауылда үткәрелеп торған дини-мәҙәни сараларҙа ярҙам да күрһәткеләйбеҙ.

Фәҡир, тигәндән, ауылдағы яңғыҙаҡ ҡына әбей-бабайҙар ҙа үҙҙәренсә ҡош-ҡорт, кәзә тотоп булһа ла донъя көтөргә тырыша, ә бына ҡырҡҡа етеп барған өс-дүрт уҫлаптай ир ғәләмәте ас ултыра, шунлыҡтан, күбеһенсә уғрылыҡ менән көн күрәләр. Береһе төрмәнән ҡайтҡан, икенсеһе эсә барып аҡылын юйған, башҡалары ла эскегә һалышҡан, кешегә яллатып тамаҡ туйҙырырға ла хатта ҡулдарынан килмәй. Асыҡтан-асыҡ кеше таламаһалар ҙа, төнгө кәсептәре бик таҙанан түгел: кемдеңдер картуфын ҡаҙып ашайҙар, икенселәренең ҡаҙ-тауығын ҡулға төшөрәләр. Бына шундай "фәҡирҙәр" бар беҙҙә, уларға оялырға кәрәк тә бит, тик ундайҙар ояттың ни икәнен дә белмәй. Ваҡытында уларҙы бәпләп-иркәләп үҫтергән ата-әсәһе оялһа оялып яталыр гүрҙәрендә... Был хәйерсе-әрәмтамаҡтар менән хәҙер хатта полиция ла бәйләнергә теләмәй, ә ауыл кешеһе түҙә. Тик минең уйымса, был түҙемлек оҙаҡҡа бармаҫ, "ауылдан һөрөргә кәрәк уларҙы" тигән асыулы хәбәр йөрөй халыҡ телендә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЗАМАН БАШҠОРТО



## ДЕНИС ӨМӨТБАЕВ:

*Умартасылыҡ менән бәйле бар кәсептәрҙе тергеҙергә кәрәк беҙгә. Шулай уҡ йылҡысылыҡ, таш, ағас эше, балаҫ һуғыу менән шөғөлләнеүселәр араһында ла уңышлы кешеләр бар, тип әйтә алам. Кәсептәребеҙ бик күп. Бөгөн берәү ҙә ошо шөғөлдәргә тотонмаған әле. Ғөмүмән, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү өсөн боронғо кәсептәрҙе тергеҙеп, лайыҡлы көн итә алабыҙ икәнде аңларға ваҡыт етте беҙгә. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәҫ икәненә иманым камил. Төп һөҙөмтәһе - күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек. Кеше күпме генә эшләмәһен, һирәк осраҡта ғына матди яҡтан тулыһынса ҡәнәғәт була. Ҡәнәғәтһеҙлек менән упҡынға батҡансы, ҡәнәғәтләнеү менән юғарыға артылыу кәрәк, тип уйлайым.*

**(Әңгәмәне 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр замандa ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңәлдергән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТИРӘ-ЯҒЫҢ ТАҘА БУЛҺА...

## күңелең дә тынысланыр!

*Вәзимә МӘЖИТОВА, Бөрйән районы Яңы Усман ауылынан ветеран-уҡытыусы:* Республиканың ҡайһы төбәгенә барһаң да дәртле һәм дарманлы милләттәштәр йәмле һәм ҡотло йорттар һалып, тырышып донъя көтөп йәшәй. Бөтәһе лә үҙенең кәртә-ҡураһын, урамын бөхтә тоторға, сүп-сарҙан таҙартып торорға тырыша. Әммә ауылдарҙан ситкә сыҡһаң, юлдар ситендә тәгәрәп ятҡан ҡалайҙарҙы, пластик шешәләрҙе күреп, иҫең китә. Ейәндәр менән урманға еләк йыйырға барып та, шул уҡ хәлгә тарып, аптырап ҡайтаһың. Шундай күркәм тәбиғәтебеҙҙе ниндәй намыҫ менән шулай ҡыйларға, бысратырға булалыр, быға төшөнөүе ысынлап та ауыр. Урман-ҡырҙарҙы ҡайҙандыр ситтән килгән кеше бысратмай бит ул, ошонда йәшәгән халыҡ үҙе шулай һаҡһыҙ ҡылана. Үҙенең йорт-ҡура тирәһен, ауыл урамдарын таҙартып, ҡыйҙы махсус тәғәйенләнгән сүплеккә алып барып ташламай, ауыл ситендә берәй урынға ауҙарып китеүселәр ҙә бар. Хәҙер инде йылға тиклем түгел, шишмә һыуына бит-ҡулды сайҡап алырға ла ҡурҡаһың. Ҡасандыр шул һыуҙарҙы эсергә тотоноуҙарын күҙ алдына ла килтереп булмай.

Был хәл, әлбиттә, бер беҙҙә генә күҙәтелмәй, бөтә кешелек хәҙер тәбиғәткә шулай иғтибарһыҙ. Бөгөн бар, иртәгә юҡ - уға барыбер. Ҡыш көнө ер өҫтөндәге сүп-сар артыҡ күренеп бармай әле, ҡар аҫтында ҡалған бөтә бысраҡ яҙ етеү менән ҡалҡып сыға. Элек күҙҙен яуын алып яҙҙың тәүге сәскәләре - умырзаялар баш ҡалҡытһа, хәҙер ялтыр-йолтор ҡағыҙҙар, шешәләр, полиэтилен пакеттар башлап күренә. Былдай күңелһеҙ күренеш нисек итеп яңы һулыш, йәшәргә көс, дәрт бирһен! Хәҙер яҙ айҙарын беҙ тәбиғәттен уяныуы, янынан тормош гөрләй башлауы тип тә ҡабул итмәйбеҙ шуға. Кеше авитаминоздан яфаланған осор, ҡар иреп, бөтә ер батҡаҡ, бысраҡҡа күмелгән мәл итеп кенә беләбеҙ. Тирә-яғындағы сүп-сар күңел торошона ла һис шикһеҙ тәьҫир итә. Ә күңеле тыныс булмаған әҙәм тормоштоң йәмен белеп, рәхәтләнеп йәшәй алмай, һәр ваҡыт нимәгәлер көйә, борсола. Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына нәмәнән, ярамаған урында ҡый ташлап китеүҙән башланған был бөтә кешелек проблемаһы үҙебеҙҙе үҙгәртмәйенсә бер ҡасан да хәл ителмәйәсәк. Шуға, быйылдан алып милләттәштәр хозур тәбиғәтебеҙгә күпкә иғтибарлыраҡ булһын, уны таҙартырға һәм бүтән бер ҡасан да бысратмаҫҡа тырышһын ине. Тәбиғәт таҙарыу менән һәр кемдең күңеле ауыр уйҙарҙан арынасаҡ, тормошобоҙ тағы ла йәмләнеп китәсәк икәненә иманым камил.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Матурлыҡ - морат түгел, фәҡирлек - оят түгел, тиһәләр ҙә, бөгөнгө заманда бөтә ағзалары теүәл әҙәм өсөн фәҡирлектә йәшәү оят түгелме?

**(Башы 1-се биттә).**

*Сәйҙә ФӘЙЗУЛЛИНА, уҡытыусы:* Халыҡ мәҡәлдәре - тарих төпкөлөнән килгән һабаҡ улар. Заманына күрә дөрөҫ тә әйтелгәндер инде "фәҡирлек оят түгел," тип, тик бөгөн бит әле замандар башҡасараҡ. Элек батша заманында халыҡ аяуһыҙ иҙелеп, бер ниндәй хоҡуҡһыҙ ауырлыҡта көн күргән, фәҡирлектә йәшәгән. Ә бөгөн рәхәт йәшәйме ни һуң халыҡ? Аяҡ-ҡулың һау, ағзаларың теүәл, бар, эшлә, юғиһә, оят, тип әйтеүе еңел дә ул, тик бына һау-сәләмәт кешегә лә, шулай уҡ дипломлы йәш белгестәргә лә хатта лайыҡлы эше бармы һуң әле? Рәсми статистикаға ҡарайыҡ, булмаһа: "Үткән йыл Рәсәйҙә фәҡир ғаиләләр һаны икеләтә артты, тип әйтелә унда. Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) мәғлүмәттәре буйынса, тамаҡ туйҙырыуға ла аҡсаһы етмәгән ғаиләләр һаны былтыр 39 процент тәшкил итте. Был 2014 йыл менән сағыштырғанда 17 процентҡа күберәк килеп сыға. Шуның менән бәйле, машина, йорт йыһаздары, көнкүреш техникаһы һатып алыусы уртасалыҡта йәшәгән синыф кимәле нығ ҡына кәмеүгә дусар ителде. Илдә фәҡирлек көсәйә бара: был хаҡта күҙгә күренеп айырыла барған килем буйынса тигеҙһеҙлек нисбәте бик асыҡ һөйләп тора, уны бер нисек тә йәшереп булмай. Бөгөнгө көндә Рәсәй халҡының 10 проценты хәйерселек сигендә көн күрһә, 15 проценты был сиктә үтеп киткән. Ағымдағы йыл башында ғына ла беҙҙә эшһеҙҙәр һаны 4,5 млн кеше булып, был эшкә һәләтле бөтөн халыҡтың 6 процентҡа яҡын өлөшөн тәшкил итә. Былары ла рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны, ә уларҙың теркәлмәгәндәре, айырыуса ауылдарҙа, күпмегә барып етә икән? Халыҡтың реаль килеме бик нығ кәмей. Был хаҡта әле генә "Комсомольская правда" (8.12. 2016) гәзитенән шундай мәғлүмат уҡыным: хаҡтар ҡимmәтләнеү сәбәпле, 50 процент халҡыбыҙҙың ғаилә бюджетының яртыһы фәҡәт аҙыҡ-түлеккә китеп тора икән, ә 15 процент кеше ашау мәсьәләһендә лә хатта экономияларға мәжбүр. Был, әлбиттә, һәйбәт тормоштан түгел. Рәсәйҙең яңы тәғәйенләнгән иҡтисад үҫеше министры М. Орешкин, халыҡтың фәҡирләнеүе илдең иҡтисад үҫешен тотҡарлай, тип танырға мәжбүр булды хатта. Шул уҡ ваҡытта ил хөкүмәте һаман да элекке курстан арына алмай һәм халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыу буйынса бер ниндәй эшлекле сара күрелмәй. Минеңсә, бөгөнгө фәҡирҙәргә генә түгел, ә уларҙы шундай хәлгә төшөргән дәүләтебеҙгә лә оят булырға тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

О, СПОРТ!

# ӨФӨБӨҘГӘ ХОККЕЙ ЙОНДОҘҘАРЫ КИЛӘ




**5-22 ғинуарҙа Өфөлә Континенталь, Йәштәр һәм Ҡатын-ҡыҙҙар лигалары миҙгелендәге төп ваҡиғаларҙы берләштергән өр-яңы юҫыҡта "Хоккей йондоҙҙары аҙналығы" үткәрелә. Ул Башҡортостанда балалар спортын һәм адаптив спортты үҫтереүгә этәргес бирәсәк.**

Баш ҡалабыҙ ҡунаҡтарҙы 13 ғинуарҙа уҡ ҡаршылай башлаясаҡ. Беренсе булып боҙға иң йәш спортсылар - Анатолий Тарасов исемендәге "Алтын шайба-2017" турнирында ҡатнашыусылар сыға. 15 ғинуарҙа буласаҡ хоккей трилогияһының төп ваҡиғаһы - "Йәштәр хоккей лигаһы саҡырыуы кубогы"на тиклем Владимир Юрзиновтың оҫталыҡ дәрестәре, танылған "Молодежка" сериалында ҡатнашыусылар менән әңгәмәләр планлаштырыла. 16 ғинуарҙа иһә Башҡортостандың Балалар хоккей лигаһы, Өфө хоккей лигаһы уйындары үтәсәк, "Алтын шайба" дауам итәсәк.

17 - 19 ғинуарҙа Өфөлә Рәсәй, Италия, Ҡытай һәм Чехия командалары ҡатнашлығында слейдж-хоккей буйынса Халыҡ-ара континент кубогы ойоштоҙола. Әйткәндәй, Башҡортостан спортсылары быңдай турнирҙа тәүге тапҡыр ҡатнаша.

19 ғинуарҙа баш ҡала тарихында тәүге тапҡыр "Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы йондоҙҙары матчы" үтәсәк. "Көнбайыш" "Көнсығышҡа" ҡаршы форматында ойошторолған уйында Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһындағы иң оҫта һәм иң сағыу 17 хоккейсы ҡатнаша. "Ағиҙел" клубының баш тренеры Денис Афиногенов Көнсығыш йыйылма командаһына етәкселек итәсәк.

21 ғинуарҙа "Оҫталыҡ-шоу" үткәрелә, ә 22 ғинуарҙа иһә аҙналыҡтың төп ваҡиғаһы - "Континенталь хоккей лигаһы йондоҙҙары матчы" көтә. Ул Мәскәү ваҡыты буйынса көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана.

# ШАШКАСЫЛАР ДОНЪЯ ЯУЛАЙ



**Ғинуар башында сираттағы Бөтә донъя шашка федерацияһы рейтингы баҫылып сыҡты. Унда юғары баҫҡыстарҙы тағы ла "Башнефть" профессиональ шашка клубынан Башҡортостан спортсылары биләй.**

Асыҡ рейтингта Александр Георгиев - икенсе урында. Тәүге 100 шашкасы исемлегендә - Муродулло Амриллаев (26-сы), Айнур Шәйбәков (27-се), Владимир Мильшин (71-се). Ҡатын-ҡыҙҙар араһында Халыҡ-ара мастер Тамара Танһыҡҡужина - 119-сы, Айгөл Иҙрисова - 140-сы баҫҡыста. "Йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса иң яҡшы спортсы" номинацияһында иң яҡшылар иҫәбендә Тамара Танһыҡҡужина - икенсе, ә блиц буйынса ике тапҡыр чемпион Айгөл Иҙрисова - өсөнсө. Иң яҡшы йөҙ шашкасы иҫәбендә: Елена Мильшина - 24-се, Гүзәл Георгиева - 39-сы, Әлиә Әминова - 44-се (+16 урын), Регина Әйүпова - 60-сы, Кристина Осипова - 64-се (+27 урын), Руфина Әйүпова - 72-се, Агата Парахина - 94-се. Ишембай ҡыҙы, хәҙер Рига өсөн уйнай, Олеся Абдуллина - 30-сы.

Юниорҙар араһындағы рейтингта: 26 йәшкә тиклем Айнур Шәйбәков - бишенсе, Айгөл Иҙрисова - 11-се; 20 йәшкә тиклем Марсель Шәрәфетдинов - алтынсы; 17 йәшкә тиклем Даниил Ильин - өсөнсө, 14 йәшкә тиклемгеләрҙә икенсе булып Тамерлан Әхмәров килә. Бөтә юниорҙар ҙа Өфөнөң 23-сө спорт шахмат-шашка мәктәбенән.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов етәкселегендәге делегация Вьетнам Социалистик Республикаһында булып ҡайтты. Сәфәрҙең маҡсатын республика Башлыҡы Рөстәм Хәмитов шулай тип билдәләне: "Вьетнам эшҡыуарлыҡы менән мөнәсәбәттәребеҙ әүҙемләштереүҙе талап итә. Бөгөн тауар әйләнеше ҙур түгел - 15 миллион доллар. Вьетнамдан бер нәмә лә һатып алмайбыҙ тиерлек. Тәьминәт күләмен арттырыу зарур. Быңың өсөн мөмкинлектәр бар. Беҙгә берлектәге производстволар, инвестициялар кәрәк".

✓Күмертау һәм Бәләбәй ҡалаларында Йылдам үҫешеүсе биләмәләр исеме бирелде. Рәсәй Премьер-министры Дмитрий Медведев ярашлы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. 2017 йылда республиканың тағы дүрт моноҡалаһы: Белорет, Нефтекама, Благовещен һәм Учалы "ТОР" исемлегенә индереүгә ғариза тапшырырға ниәтләнә. Белорет һәм Нефтекама социаль-иҡтисади хәле насарайыу хәүефенә эйә булған ҡалалар, Благовещен менән Учалы - социаль-иҡтисади торошо тотороҡло монопрофилле биләмәләр категорияһына индерелгән, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәте.

✓Башҡортостанда яҙғы ташҡындың кимәлен авиация гамма-төшөрөү алымы менән фаразлаясаҡтар. Быйыл ул Ағиҙел һәм Урал йылға бассейндарында үткәреләсәк. Элек республикала ҡар япмаһындағы һыуҙың запасын Башгидромет станцияларында ҡул менән ҡар үлсәгес ярҙамында билдәләгән булғандар. Башҡортостан - илдә ошо фаразлау ысулын ҡулланыуҙы тергеҙгән берҙән-бер төбәк.

✓2016 йылдың 30 декабре менән сағыштырғанда Өфөлә дизель яғыулығы ҡиммәтләнде. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, әле дизель яғыулығының бер литры 38,13 һум тора. Уҙған йылдың аҙағы менән сағыштырғанда баш ҡалала бензиндың хаҡы үҙгәрмәгән. Хәҙер А-76 (АИ-80) маркалы бензиндың бер литрын 33,60 һумға һатып алырға мөмкин. АИ-92 (АИ-93) - 34,81, АИ-95 һәм юғарыраҡ 38,47 һумға тиң.

✓2017 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу өсөн ғариза 1 февралгә тиклем ҡабул ителә. Унда һынау биреү өсөн предметтар күрһәтелергә тейеш. Рус теле һәм математика - сығарылыш класы уҡыусылары өсөн мотлаҡ. Ҡалған предметтар - һайлау буйынса. Быйыл белем усағын тамамлаясаҡ уҡыусылар ғаризаны уҡыған урыны буйынса яҙа.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**Тел - тере шишмә, йылдар үтеү менән үҙгәрә, яңы һүҙҙәр менән тулыланып байый бара. Әммә ҡайһы бер үҙгәрештәр телгә зыян килтерә, ул ярлылана, ябайлаша йәки бөтөнләй сит телдәрҙән ингән һүҙҙәр тулып, үҙенсәлектәрен юғалта. Бындай үҙгәрештәргә тәү сиратта туған теленә иғтибарлы булмаған халыҡ үҙе сәбәпсе.**



Башҡорт телендә лә ундай үҙгәрештәр бар: телмәребеҙгә заманса һүҙҙәр килеп инә, ҡайһылары дөрөҫ тәржемә лә ителмәй. Әммә мине күберәк ата-бабаларыбыҙ борон ҡулланған һүҙҙәрҙең ҡулланылыштан төшөп ҡалып, онотола барыуы борсой. Мәҫәлән, күпме йылдар "Сыбай ҡашҡа" тигән башҡорт халыҡ йырын "Һыбай ҡашҡа" тип йырланылар. "Сыбай" тип яҙылған, "сывай" тип әйтелгән был һүҙ ҡашҡаның бер төрөн белдерә. "Һыбай ҡашҡа" тиһәң һыбай ат йәки һыбайлы кеше тигән мәғәнә килеп сыға бит. Ә "сыбай" һүҙе аттың маңлайынан алып, морон осона тиклем төшкән аҡ һыҙатты аңлата. "Сыбай", "сыбата" тигән һүҙ "оҙон" тигәнде аңлата. Борон тау юлдары буйлап аттарҙы парлап, тройка егеп йөрөп булмаған. Ғәҙәттә, тар юлдарҙа аттарҙы бер-бер артлы итеп еккәндәр. Урыҫтар быны "гуськом" ти, ә башҡортса "сыбата егеү" тип атала.

Тәүсығанаҡтан йырҙы яңылыш ишетеп, һүҙҙәрен дөрөҫ аңламай яҙып алып, артабан хаталы итеп йырлау уғата күңелһеҙ күренеш. Бына башҡорт халыҡ йыры "Сибай"-ҙың да тәүге юлдары бик ҡыҙыҡ итеп үҙгәртелгән. Инде бер 50-60 йыл тирәһе "Йәшел генә сана, зәңгәр дуға ектерһәнә, Фатимам, тураҡка", тип йырлайҙар. Моғайын, борон йырсылар улайтып йырламағандыр, сөнки кантон башлығының санаһы йәшел, дуғаһы зәңгәр, тәртәһе ҡара булыуы мөмкин түгел. Ғиллә йәшел менән зәңгәр һүҙҙәренең алмашыуында. Бер ҙә "йәшел сана" түгел, ә "йәшәнкә сана". Йәшәнкә сана - ул урыҫтарҙың "кашауай" тип йөрөтөлгән саналарының бер төрө, киң, уңайлы итеп эшләнә. Сибай яҡтарындағы халыҡ һаман да йәшәнкә сана тип һөйләй, һәр хәлдә, ул кантон башлығы ултырып йөрөргә бик ҡулайлы булған. Ә "зәңгәр" тигәне "зеңгер" тигәнде үҙгәртеүҙән килеп сыҡҡан. Хәҙер беҙ "ҡыңғыраулы мәктәп йылдары" тип әйтәбеҙ, ә беҙ уҡыған заманда мәктәбебеҙ зеңгерле ине. Зеңгер бирә торғайныҡ, тик һуңынан звонокка күстек. Зеңгер - ул бәләкәй генә еҙ ҡыңғырау, уны кантон башлыҡтарына ғына аттарына ҡуйырға рөхсәт иткәндәр, теләһә кем ҡуйып йөрөй алмаған. Шулай итеп, "Йәшәнкә лә сана, зеңгер дуға ектерһәнә, Фатимам, тураҡка" тигән йыр һүҙҙәре бөтөнләй икенсе мәғәнә бирә.

Кантон башлығы бик ҙур түрә, уның үҙенең тыуған яғына, Атайсалына ҡайтып түрә булғыһы килә. Был йырҙа телгә алынған Атайсал тыуған ил мәғәнәһендә түгел, ә аныҡ ауыл атамаһы. Әлбиттә, шағирҙарыбыҙҙың "Атайсал" һүҙенә тыуған ил мәғәнәһе һалып ижад итеүе бер ҙә зыян түгел, булһын. Ләкин "Сибай" йырында Атайсал Иҫке Сибай ауылының боронғо атамаһы. Йырҙа шул ваҡыттағы түрәләрҙең атрибуттары күренеп ята: йәшәнкә сана, зеңгер дуға, турат (ҡара ат). Бөгөн ҡара джиптарҙа, яҡтыртҡыстар ҡуйып елдереп йөрөгән түрәләрҙән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Был электән килгән йола, тимәк.

Шунан, йырсыларға әйтә торған тағы бер дәғүәм бар: башҡорт телендә киләсәкте белдергән ҡылым формаһы *-ар, -әр* ялғауы менән генә барлыҡҡа килмәй, *-ыр, -ер, -ор, -өр* ялғауҙары ла шул мәғәнәне бирә. Мәҫәлән, киләр түгел, ә килер, сығар түгел - сығыр. Беҙҙең йырсыларҙың "киләрһеңме", "сығарһыңмы" тип йырлауы дөрөҫ түгел. Икенсенән, йырсылар йыш ҡына баҫымды дөрөҫ ҡуймай йырлайҙар. Хатта радио, телевидение хеҙмәткәрҙәренең шул хаталарҙы тиражлап тороуына ҡарап, мәктәп уҡыусылары ла шулай һөйләшә башланы. Ҡылымдың *-маҫ, -мәҫ* ялғауҙары баҫымлы була, уның ҡыҫҡартылған формаһы - *мам, -мәм* дә баҫымлы. "Бармам", "арымаҫ", "талмаҫ" тигәндә баҫым - һуңғы ижеккә, "ҡарамаҫтан" тигәндә лә баҫым һуңғы ижеккә төшә. Баҫымды дөрөҫ ҡуймай һөйләү артыҡ әллә ниндәй ҙур бәлә түгел дә кеүек бер ҡарауға. Ләкин был башҡорт теленең үҙенсәлеген юҡҡа сығара. Мәҫәлән, башҡорт һәм татар телендә баҫымдар тап килә, ләкин бер урында ғына айырма бар. Татарса ҡылымдың хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заман өсөнсө зат ялғауы баҫымһыҙ. "Улар ни эшләй?" тигән һорауға татарса "баралар", "ҡайталар", "киләләр" тип яуап биргәндә баҫым икенсе ижеккә төшә, ялғау баҫымһыҙ. Ә башҡорт телендә, киреһенсә, баҫым һуңғы ижеккә, ялғауға төшә.

Бына ошондай айырмаларҙы, туған телебеҙҙең үҙенсәлектәрен, боронғо һүҙҙәрҙе һаҡларға кәрәк. Сөнки ике тел бер-береһенә игәлеп торғанда, береһе мотлаҡ үткерләнә төшөп, икенсеһенә оҡшап китә. Ҡайһы тел көслөрәк, ҡайһы халыҡ үҙенең әсә телендә дөрөҫ һөйләшеүгә юғары яуаплылыҡ менән ҡарай, шул үҙенекен таға башлай. Әйҙәгеҙ, башҡорт теленең киләсәге өсөн борсолған милләттәштәр, телмәребеҙгә иғтибарлыраҡ булып, дөрөҫ һөйләшәйек!

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



# ҮҘЕБЕҘҘЕ ЯҠЛАЙ БЕЛӘЙЕК!

**Һәр ваҡыт уйынлы-ысынлы итеп, беҙҙә һәр кемдең ғаиләһендә мотлаҡ юрист һәм табип булырға тейеш, тип әйтәм. Сөнки тап хоҡуҡ яҡлау һәм һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләүселәр, яуыз булған өсөн түгел, уйларға теләмәгән өсөн үҙ бурысын үтәмәй. Ә законды белмәгән кеше ҡайҙа мөрәжәғәт итергә, нимә эшләргә белмәй, йөрөй ҙә йөрөй. Урыҫтар әйтмешләй, беҙҙә законды ҡайһы яҡҡа бораһың, шул яҡҡа әйләнә лә китә. Ә ул ябай эшсе өсөн дә, түрәләр өсөн дә бер булырға тейеш.**

Үҙем прокурор булып эшләгән ваҡытта гәзиттә баҫылған бер яңылыҡты ғәжәпләнеп уҡып, ҡырҡып алып, өҫтәлемә һалып ҡуйғаным хәтерҙә. Унда Бельгияның полиция хеҙмәткәренең ил королен тиҙлекте арттырған өсөн бик ҙур суммаға штраф түләтеүе тураһында хәбәр ителә ине. Беҙҙә ул яҡҡа, был яҡҡа саптырып йөрөгән район түрәһен туҡтатыуы ла ҡурҡыныс хатта, ил башлығы тураһында әйтеп торорға ла түгел.

Тормошта бынан да ғәжәпһеҙерәк ваҡиғаларға шаһит булырға тура килә, әлбиттә. Кемдер торлаҡ йортонан ҡолаҡ ҡаға, йә эштән хаҡһыҙ рәүештә ҡыуыла, табип кәрәкле ярҙамды ваҡытында күрһәтмәй, шәхси милек буйынса йәки ер мәсьәләһен ыңғай хәл итеп булмай, ялған ғәйеп тағылған кешеләр ҙә байтаҡ. Ниндәй генә осраҡта ла үҙ хоҡуғыңды яҡларға әҙер булырға, ҡурҡып һәм шымып торорға ярамай. Хәҙер бөтә мәғлүмәт интернет селтәрендә бар, закондарҙы үҙаллы өйрәнергә лә була.

Йыш ҡына кешеләрҙең, ҡарға күҙен ҡарға суҡымай, тип, чиновниктарҙың ҡылығын тәнҡит иткәнен ишетергә тура килә. Суҡымаһа ла, һәр түрәнең өҫтөндә унан да юғары вазифа биләгән кеше бар, береһе ярҙам итеүҙән баш тарта икән, һинең ялыуыңа икенсеһе иғтибар итергә мөмкин. Үҙ хоҡуғын яҡлап сығырға дәрт итмәгән, "Әй, булһын әйҙә!" тип дөрөҫлөк өсөн көрәшергә теләмәй, битараф ҡалыуҙы хуп күргән кешеләр күп арабыҙҙа. Бөгөнгө көндә үҙ хоҡуғыңды үҙең яҡламаһаң, быны һинең өсөн береһе лә эшләмәй. Беҙгә күптән инде үҙ хоҡуғыбыҙҙы ғына түгел, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы ла яҡларға, башҡа төрлө бәхәсле мәсьәләләрҙә лә үҙ дөрөҫлөгөбөҙҙө өҫкә сығарып өйрәнергә ваҡыт. Әйҙәгеҙ, закондарҙы ла беләйек, хоҡуҡтарҙы ла яҡлап өйрәнәйек, йәмәғәт!

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**юрист, хоҡуҡ һаҡлау органдары ветераны.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө дәүләт авиация техник университеты һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты ғилми проекттар һайлап алыу конкурсы еңеүселәре иҫәбенә инде. 2017 йылда уларға ярҙам күрһәтеләсәк. Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы вуздарҙың 440-тан ашыу ғилми проектына булышлыҡ итәсәк. Ошо маҡсаттарға 2,9 миллиард һум аҡса бүленгән.

✓2018 йылдан йорт хайуандарына һәм ауыл хужалығы малдарына келәймә һуғыу мәжбүри буласаҡ, тип хәбәр итә "Известия" гәзите. 2018 йылдың 1 ғинуарынан аттарға, ишәктәргә, ҡасырҙарға, эре мөгөҙлө малдарға, боландарға, дөйәләргә, сусҡаларға, 2019 йылдан иһә һарыҡтарға, кәзәләргә, эттәргә, бесәйҙәргә, йорт ҡоштарына, затлы тиреле йәнлектәргә, йорт ҡуяндарына, бал ҡорттарына, балыҡтарға келәймә һуғылырға тейеш. Хайуандарға 15 һандан торған номер бирелә. Унда мал тураһында мәғлүмәт туплана.

✓Быйыл 1 февралдән Рәсәйҙә страховка пенсиялары 5,4 процентҡа, 2016 йылдағы инфляция кимәлендә индексациялана. Бынан тыш, 1 февралдән балалар пособиеһы, һуғыш ветерандарына һәм инвалидтарға түләүҙәр 5,4 процентҡа арта. 1 апрелдә пенсияларҙы икенсе тапҡыр индексациялау көтөлә. 2017 йылда дөйөм индексация 5,8 процент тәшкил итәсәк.

✓Быйыл ғинуарҙа Рәсәй Пенсия фонды пенсионерҙарға биш мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе тарата. Пенсионерҙар уны ала башлаған да инде. 11 ғинуарға ҡарата ул 4 миллион кешенең иҫәбенә күскән. Аҡса 44 миллионға яҡын пенсионерға тапшырылырға тейеш.

✓Ойошторолған балалар төркөмөн йөрөтөү өсөн 10 йылдан ашыу хеҙмәт иткән автобустарҙы ҡулланыуҙы тыйған ҡарарҙың үҙ көсөнә инеү ваҡыты ағымдағы йылдың 1 июленә күсерелә. Ҡабул ителгән ҡарар ойошторолған балалар төркөмөн йөрөтөүселәргә автобустар паркын билдәләнгән талаптарға ярашлы яңыртырға өҫтәмә ваҡыт бирәсәк. Закондың был өлөшө 2017 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инергә тейеш ине.

✓Башҡортостандан 11 КВН командаһы "КиВиН-2017" 28-се халыҡ-ара фестивалендә сығыш яһаясаҡ. Һайлап алыу турҙары ике аҙна дауамында уҙасаҡ. Уларҙың йомғаҡтары буйынса иң яҡшылары - Халыҡ-ара КВН союзы лигаһы ҡатнашыусыларын асыҡлаясаҡтар.

**"Башинформ"дан.**

МӨҺИМ ХӘБӘР

# БАЙРАМҒА...
## лайыҡлы әҙерлек

**БР Хөкүмәте Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына әҙерләнеү һәм байрам итеү буйынса саралар планын раҫланы. Тейешле бойороҡҡа төбәк Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйған.**

Документҡа ярашлы, 2017-2019 йылдар Башҡортостанда юбилей эгидаһы аҫтында уҙасаҡ. Республика Хөкүмәте бойороғо менән социаль сәйәсәт, мәҙәниәт, сәнғәт, фән, мәғариф, йәштәр сәйәсәте һәм спорт, төбәкте пропагандалау, нәшриәт эшмәкәрлеге, төҙөлөш һәм инфраструктура өлкәһендә төрлө саралар билдәләнгән. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналар, "Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына - 100 инвестиция проекты" эшҡыуарлыҡ сараһы, мәғариф учреждениеларында "Башҡортостан Республикаһының тарихы тураһында 100 лекция" акцияһы үткәреү планлаштырыла. Шулай уҡ исемлектә "Евразия йөрәге", "Берҙәмлек - Содружество" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале, "Урал ауазы" оркестрҙар һәм халыҡ музыка ҡоралдары ансамблдәренең халыҡ-ара конкурс-фестивале, "Өфөлә Шаляпин кисәләре" халыҡ-ара опера сәнғәте фестивале, "Туғанлыҡ" халыҡ-ара төркителле театрҙар фестивале кеүек республика өсөн ғәҙәти булған, шулай уҡ юбилейға махсус арналған саралар индерелгән. Евразия гуманистик форумы, "Башҡортостан - үҫеш территорияһы" республика йәштәр форумы, "Башҡорт йәштәре дуҫтарын йыя" Бөтә Рәсәй форумы, Башҡортостан Республикаһы ғаиләләр форумы, Рәсәй халыҡтары йәштәр ассамблеяһы ултырышы, "Изге күңелле республика" фестивале, Һөнәрселек һәм һынлы сәнғәт оҫталары аҙналығы, Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезы үткәреү күҙҙә тотола. Шулай уҡ планға Өфөлә республиканың район һәм ҡала көндәрен уҙғарыу ҙа индерелгән.

- Төбәк планы республика эшмәкәрлегенең стратегик йүнәлештәрен үҙ эсенә ала һәм бөтә йәштәге вәкилдәренең мәнфәғәттәренә ҡағыла. Маҡсат - варисһарлыбыҙға тапшырыу өсөн бөтә өлкәләрҙәге ҡаҙаныштарҙы йыйыу. Матбуғат баҫмалары сығарыуға ҙур иғтибар бүленәсәк. Рус һәм инглиз телдәрендә "Башҡортостан Республикаһы" энциклопедияһы донъя күрәсәк. Башҡортостан дәүләтселеген булдырыу тураһында документтар йыйынтығы һәм видеоверсия менән "Быуат оҙонлоғондай юл" исемле китап баҫыласаҡ, - тип аңлатма бирҙе Башҡортостан министры, ойоштороу комитетының яуаплы секретары Руслан Мирсаяпов.

Әйткәндәй, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ошо данлыҡлы юбилей айҡанлы "Башҡортостандың иң исеме" проектын иғлан иткәйне. Тауыш биреү мәғлүмәттәре буйынса беренсе баҫҡысты республиканың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов билә. Уның өсөн 428 кеше тауыш биргән. Телевидение конкурсында интернет-тауыш биреүҙә башҡа лидерҙар: төркиәтсе, ижтимағи-сәйәси эшмәкәр Әхмәт-Зәки Вәлиди (314 тауыш), билдәле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Динис Бүләков (323 тауыш). "Башҡортостандың иң исеме" күләмле проекты тормошо һәм эшмәкәрлеге республиканың барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше менән бәйле булған шәхестәрҙе һайлап алыуға йүнәлтелгән. Ғалимдар, яҙыусылар, артистар, спортсылар һәм йәмәғәтселектән торған махсус комиссия 150 дәғүәсене һайлап алған. Был исемлек tv-rb.ru сайтында урынлаштырылған, ошонда уҡ тауыш бирергә мөмкин.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Яңы йыл мөғжизәләргә бай түгел, тип әйтеп ҡара инде: ошо байрам ваҡытында ғына өс-дүрт айлыҡ яуым-төшөм нормаһы яуһын әле! Ауыл ерендә йәшәүселәр күктән төшкән һәр тамсыны, һәр бөртөктө бәрәкәт тип ҡабул итһә, хатта яҙын ер дымға туйынып ҡаласаҡ, тип ҡыуанһа, ҡала халҡы өсөн был күренеш апокалипсисҡа әйләнә: хәрәкәт туҡталмаһа ла, төрлө төр транспорт метрлап ҡына алға шыуыша, йорт ихаталарынан, тротуарҙарҙан бер кеше генә үтерлек һуҡмаҡ ярыла...**

# ҠАРҒА БАТҠАН ҠАЛАБЫҘ...



Тәбиғәттең кешелекте сираттағы һынауы булды шикелле был. Юҡҡа ғына, кеше - ул һауыт, уның эсендә нимә тулы, шул түгелә, тимәйҙәр. Был осраҡта бәҙгеләр ҡала округы хакимиәте башлығын, уның ҡул аҫтында эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙе, коммуналь хеҙмәттәрҙе һүкһә, социаль селтәрҙәрҙә халыҡтың үҙен әүҙемлеккә саҡырыусыларҙы бөтөнләй бөтөрөп ташланылар. Ә бит барыһы ла ябай һымаҡ: кешенең кемлеге ауыр ваҡытта һынала. Эйе, бөгөн бер кемгә лә еңел түгел, ололар, мохтаждар өйҙәренән дә сыға алмай ултыра, физик мөмкинлектәре сикләнгәндәр юлдарҙан үтә алмай һ.б. Хатта һау-сәләмәттәргә лә теләгән еренә барып етеүе еңелдән түгел. Ләкин кешелеклелектән, ярҙамсыллыҡтан, саҡ ҡына миһырбанлы булыуҙан әле бер кем дә тыймай. Мохтаждарға ярҙам итеү өсөн дә кемдеңдер күрһәтмәһе булырға тейешме йәки кешеләрҙә кешелеклек сифаты юғалыуға ла ҡала мэры һәм ил президенты ғәйеплеме?

"Беҙ дәүләткә һалым түләйбеҙ!" тигән дәлилде флаг итеп күтәрә ҡайһы берәүҙәр. Эйе, һалымды уны ҡала халҡы ғына түгел, ауыл халҡы ла түләй. Әммә ҡала халҡынан айырмалы, ауылда һәр кем үҙенең ихатаһын, ҡапҡа алдын, гөмүмән, оло урам юлына сыҡҡанға тиклемге территорияны үҙе таҙалай, сөнки ул уның хужаһы. Ә ҡаланың күп ҡатлы фатирҙарында йәшәүселәрҙең территорияһы подъезд ишеген ябыу менән сикләнә.

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Владимир Чернов белдереүенсә, 1-8 ғинуарҙа ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре тәүлек әйләнәһенә эшләгән. Төрлө ауырлыҡтағы йөк ташыуға махсуслашҡан 150 үҙбушатҡыс машина көнөнә 2,5 мең самаһы рейс яһап, ҡарҙы ҡаланан ситкә ташыған. Ошо осорҙа барлығы 15 мең самаһы рейс яһала, был былтырғы менән сағыштырғанда 2,5 тапҡырға күберәк. Тәүлегенә 25 мең кубометр ҡар сығарыла, был да былтырғы күләмдә 2,5 тапҡырға артып китә. Көҙгө-ҡышҡы осорҙа сығарылған ҡарҙың дөйөм күләме лә былтырғынан ике тапҡырға артыҡ. Байрам көндәрендә шулай уҡ инженер-техник хеҙмәткәрҙәр, ремонтсылар һәм урам таҙартыусылар тәүлек әйләнәһенә дежур иткән. Идара итеү ойошмалары составындағы авария-диспетчер хеҙмәттәренә 14 техника берәмеге һәм 158 кеше йәлеп ителгән. Экскаватор, автокран, автовышкалар водителдәре лә график буйынса эшләгән. Бынан тыш, "ЖЭУ" яуаплылығы сикләнгән ширкәттә ике сменала слесарь-сантехниктар, иретеп йәбештереүселәр, электриктарҙан торған 58 авария бригадаһы ойошторолған. Аномаль тәбиғәт күренеше шарттарына бәйле 1 ғинуарҙан алып һәр көн 950 урам таҙартыусы һәм 154 техника йорт ихаталарын таҙартырға сыҡҡан. Башҡа ойошмаларҙан, килешеү буйынса, 35-40 берәмек техника йәлеп ителгән. Урам таҙартыусыларға өҫтәмә рәүештә коммуналь хужалыҡтың 450 башҡа хеҙмәткәре ярҙамлашҡан. Шулай итеп, миҙгел башынан ғына миллион кубометрҙан ашыу ҡар сығарылған. Былтыр был күләмгә февраль башында ғына өлгәшенгән булған. Был үҙе үк миҙгелдең ғәҙәттән тыш икәнлеген дәлилләй. Ә ғәҙәттән тыш хәл ваҡытында халыҡ берҙәм булып ойошорға тейеш, берҙәмлектә - көс икәне һәр кемгә бала сағынан һеңдерелгән бит.

Бөгөн ҡалалағы 400-ҙән ашыу махсус машина туҡтауһыҙ эш менән мәшғүл. Өҫтәүенә, сәнәғәт һәм төҙөлөш предприятиелары өҫтәмә рәүештә 100 берәмек техника бүлгән. Шуға ҡарамаҫтан, ҡаланы ҡарҙан таҙартыу күҙ йомоп аҫкан арала ғына башҡарыла торған эш түгел: үҙәк урамдарҙан, төп магистралдән башҡа урамдар, тыҡрыҡтар, ихаталар ҙа бар, параллель рәүештә уларҙа ла эш алып барылырға тейеш.

Ҡабат ихаталарға урап ҡайтҡанда, уларҙың бик аҙ өлөшө генә ҡала ҡарамағында (30 процент), башҡаларын айырым хужалыҡ итеүсе субъекттар хеҙмәтләндерә. Шулай уҡ төрлө республика һәм федераль власть ҡарамағындағы предприятиелар ҙа, башҡа ойошмалар ҙа үҙҙәренең территорияһын таҙартырға, тәртиптә тоторға бурыслы. Был талап закон менән нығытылған, әгәр ул үтәлмәһә, 100 мең һум күләмендә штраф ҡаралған. Икенсе яҡтан, ихаталарҙы ҡарҙан таҙартҡанда уларҙа парковкаланған машиналарҙың ҡамасаулауы тураһында бер бөгөн генә һүҙ күтәрелмәй. Әгәр хужа аҙналар буйы машинаһы тирәһен көрттән таҙартмай, уны оҙайлы ваҡыт урынынан да ҡуҙғатмай икән, бында кемде ғәйепләргә?

Шул уҡ ваҡытта коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәренә ихаталарҙы ҡарҙан таҙартырға ярҙам иткән Дим, Совет райондарында, ҡайһы бер айырым урамдарҙа йәшәүселәрҙең инициативаһын хупларға, уларҙың өлгөһөнә эйәрергә генә ҡәрәктер, моғайын. Ҡала ғына түгел, тотош йәмғиәт бит һинең, минең, беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың ҡылған ғәмәлдәренән барлыҡҡа килә. Ә, бәлки, был тәбиғәттең халыҡтарға берләшергә кәрәклеге, уның кеше икәнлеген сираттағы иҫкәртеүе генәлер...

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләнә.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2016 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан юлдаш телевидениеһы МЕДИАТЭК Бөтә Рәсәй премияһының дипломына лайыҡ булды. Яғыулыҡ-энергетика комплексы тармағында яңы технологияләр индереү темаһын әүҙем һәм профессиональ яҡтыртҡаны өсөн Башҡортостан юлдаш телеканалы илдең төбәк телекомпаниялары араһында өсөнсө урын алды.

✓Башҡортостанда автомобиль йөртөүселәрҙе тикшереү бара. Авдон - Подымалово республика трассаһының 54-се километрында, Өфө - Мәскәү федераль автомобиль юлында, Өфө районы менән сиктә һәр водитель менән мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып барыла. Төбәктең баш дәүләт автоинспекторы Динар Ғилметдинов ошо тикшереүҙәрҙе аңлап ҡабул итеүҙәрен һораны, сөнки һәр туҡтатыуҙың маҡсаты - аварияларға юл ҡуймау, кешеләрҙең ғүмерен һәм сәләмәтлеген һаҡлап ҡалыу. Республика юлдарында тикшереүҙәр ай аҙағына тиклем дауам итә.

✓Ошо көндәрҙә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының 50 йыллыҡ юбилейы. Бөгөн уҡыу йорто - заманса мәғариф, фән һәм мәҙәниәт үҙәге, унда 670-ләгән уҡытыусы эшләй, 11 мендән ашыу студент, аспирант һәм докторант белем ала. Уҡыусылар билдәләүенсә, бында уларға универсаль белем бирәләр, шуға ла юғары уҡыу йортон тамамлаусылар бөтә ерҙә лә талап ителә. Юғары уҡыу йорто структураһында - биш институт, ете факультет, 47 кафедра.

✓Башҡорт дәүләт университеты абруйлы сит ил мәғлүмәт ресурстарына ҡулланыу рөхсәте алды. Хәҙер уҡыу йортоноң уҡытыусылары, студенттары һәм аспиранттарының "Wiley Online Library" һәм "American Physical Society (APS)" мәғлүмәттәре менән файҙаланыу мөмкинлеге бар. "Wiley Online Library" китапханаһы, беренсел тикшеренеүҙәрҙән торған юғары импакт-факторлы ғилми журналдарға өҙлөкһеҙ интеграцияны ҡулланыуҙы тәьмин итә.

✓Башҡортостандың милли музейында тантаналы рәүештә "Башҡортостандың тейелмәгән тәбиғәте" фотокүргәҙмәһе асылды. Ул республикала Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылына һәм Рәсәйҙә ҡурсаулыҡ системаһының 100 йыллығына арналған.

***✓ Бәйгенең төп еңеүсеһе - Азалия Ҡорбанова. Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауылы урта мәктәбе уҡыусыһы уҡыу алдынғыһы, бөтә предметтар буйынса ла тик бишлеләргә генә өлгәшеүсе ҡыҙ.***



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӘСӘ ТЕЛЕ БЕЛЕРМӘНДӘРЕ...

## бәйге тотто

**Ошо көндәрҙә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен яратып өйрәнгән балалар төбәк-ара олимпиадаға йыйылды. Ярышта туған теленә битараф булмағандар һәм республиканың дәүләт телен теләп өйрәнеүселәр ҡатнашты.**



Был олимпиада республиканың һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән килгән уҡыусылар өсөн күптән инде рухиәт байрамына әйләнгән сараларҙың береһе. Быйыл ошо күркәм ярышта бөтәһе 269 бала ҡатнашты, шулар араһынан 13 уҡыусы Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән килгәйне. Быйылғы төбәк-ара олимпиаданың шарттары Бөтә Рәсәй олимпиадаһына яраҡлаштырып үҙгәртелгән. Элек уҡыусылар инша яҙып, викторина һорауҙарына яуап биреп, шиғыр һөйләп һәм жюри ағзалары һорауҙарына яуап биреп ярышһа, хәҙер текстҡа тулы анализ яһарға, тест һорауҙарына яуап бирергә һәм инша яҙырға бурыслы булып сыкты. Яңы шарттар буйынса барлыҡ эштәр яҙма рәүештә башҡарылды. Уҡыусыларын ярышҡа алып килеүсе педагогтар был шарттарҙы ыңғай баһалап, төбәк-ара олимпиаданы яңы кимәлгә күтәреүсе факторҙарҙың береһе, тип билдәләне.

- Быйылғы олимпиаданың шарттары менән тулыһынса ризабыҙ, сөнки был башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһына ла тап килә. Әҙәбиәт буйынса әҫәрҙәргә тулыһынса анализ яһала, әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен, ижадын белеүгә, идея-йөкмәткеһен асыуға иғтибар бүленә. Башҡорт теле буйынса ла уҡыусының фонетик, морфологик, лексик анализдар эшләй белеүе тикшерелә. Инша темаларының да төплө уйланған һәм төрлө булыуын билдәләр инем. Бында белем, грамоталылыҡ талап итеүе күренеп торҙо, - тине тәьҫораттары менән бүлешеп Әбйәлил районы Асҡар ауылы 1-се мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зиниә Ғәләмова.

Олимпиадаға килгән уҡыусылар менән әңгәмәләшкәндә баш ҡаланы, Рәми Ғарипов уҡыған гимназия-интернатты күреүгә, яңы дуҫтар табыуына ҡыуаныусын белдермәй ҡалған кеше булманы. Ысынлап та, был ярыш бик күп аҡыллы, тырыш һәм белемле балалар өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Улар бында бер-береһенә ҡарап сәмләнеп, олимпиаданы ойоштороуҙа ярҙам иткән Башҡорт дәүләт университеты һәм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусылары менән аралашып, билдәле шәхестәр менән осрашып, Өфөнөң иҫтәлекле урындарына экскурсияларға йөрөп, рухланып ҡайта.

"Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының ятағында йәшәнек һәм бында беҙҙе бик йылы ҡабул иттеләр, тәмле итеп ашаттылар. Бик ҡыҙыҡлы кешеләр менән осраштыҡ, Салауат Юлаевтың һәйкәлен барып күрҙек, төрлө яҡтан килгән йәштәштәрем менән таныштым. Барыһы ла оҡшаны", - ти Баймаҡ районы Ниғәмәт мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Әлфиә Ильясова.

Ә бына Стәрлетамаҡ ҡалаһы 3-сө Башҡорт лицей-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы Илназ Әхмәтшин олимпиаданың баш ҡалала үткән этабында икенсе тапҡыр ҡатнаша һәм призлы урын яулай. Ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте менән башланғыс синыфтарҙан уҡ ҡыҙыҡһына башлауы, бик күп конкурстарҙа һәм фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашыуы тураһында һөйләне.

Ғәҙәттәгесә, милли мәктәптәрҙә белем алыусы уҡыусылар, рус мәктәптәрендә башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр, сит өлкәләрҙән килгән ҡатнашыусылар араһында еңеүселәр айырым билдәләнде. Милли мәктәптәрҙән туғыҙынсы синыф уҡыусылары араһында беренсе урын алыусы Күгәрсен районы Яңы Хвалын мәктәбе уҡыусыһы Гөлфиә Килсенбаева ярыштан алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты:

"Төбәк-ара олимпиадала беренсе тапҡыр ҡатнашам, ә район кимәлендә етенсе синыфтан алып беренселекте биргәнем юҡ әле. Бишенсе синыфта "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын ятлау буйынса республика кимәлендә ярыштым һәм шунда туған телемде нисек яратыуымды аңланым. Шуға башҡорт теле һәм әҙәбиәте, мәҙәниәтебеҙ менән бәйле ярыштарҙа гел ҡатнашып киләм. Был юлы олимпиаданың иң ауыр өлөшө минең өсөн текстҡа тулы анализ яһау булды, сөнки текстың мәғәнәһенә төшөнөп, уйлап эшләргә кәрәк ине. Бөтә эштәр ҙә беҙ мәктәп программаһы буйынса үткән темаларға ҡағылышлы төҙөлгән, уҡып килгән кеше йәтеш кенә итеп яуап бирә алырлыҡ ине. Билдәле шәхестәр менән осрашыу олимпиаданан ҡалған бик матур хәтирәләрҙең береһе буласаҡ, бер осрашыуҙа БДУ профессоры Мирас Иҙелбаев, һәр берегеҙ беҙҙең юғары уҡыу йортона уҡырға инерлек балалар, тип күңелебеҙҙе күтәреп ебәрҙе..."

Шулай итеп, бәйгенең төп еңеүсеһе - ун беренсе синыф уҡыусылары араһында беренселекте яулаусы Азалия Ҡорбанова. Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауылы урта мәктәбе уҡыусыһы уҡыу алдынғыһы, бөтә предметтар буйынса ла тик бишлеләргә генә өлгәшеүсе ҡыҙ. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала еңеү уярмын тип уйламаным, әммә йыл дауамында уҡытыусым Луиза Яфаева менән тырышып әҙерләндек. Бына тағы бер тапҡыр тырышлыҡ, эшеңде яратып башҡарыу һөҙөмтәле булыуына ышандым. Туған телемде белеүемә ҡыуанам, ул сит телдәрҙе өйрәнгәндә лә ярҙам итә: өндәрҙе дөрөҫ әйтә белмәү тигән төшөнсә миңә таныш түгел", - ти Азалия Ҡорбанова. Ул киләсәктә Башҡорт дәүләт университетының роман-герман филологияһы факультеты студенты булырға һәм журналист-тәржемәсе һөнәрен үҙләштерергә хыяллана.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АФАРИН!

# МӘРГӘНДӘР ЯРЫШЫ

**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" гәзите үҙенең 100 йыллыҡ юбилейы айҡанлы Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында "Мәргән уҡсы" беренселеген уҙғарҙы. Унда республикабыҙҙың төрлө район һәм ҡалаларынан, Силәбе өлкәһенән 40-ҡа яҡын кеше ҡатнашты. Бәйгенең иң мәргәндәре тип Бөрйән районынан ағалы-ҡустылы Салауат һәм Сынбулат Юлбирҙиндар, Учалы ҡалаһынан Руслан Әхмәҙиев танылды һәм "Башҡортостан" гәзитенең бүләктәренә лайыҡ булды.**









*Эдуард Дилмөхәмәтов фотолары.*

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Көнбағыш

❖ 50-60 грамм көнбағыш 20-30 грамм көнбағыш майын алыштыра һәм Е витаминына, майлы кислоталарға ихтыяжды тулыландыра. Ә Е витамины мускулдарҙың хәлһеҙлеген, арыуҙы булдырмай. Көнбағыш бигерәк тә физик эш, спорт менән шөғөлләнеүселәргә файҙалы. Ғөмүмән, көнбағышты ир-ат күберәк ашарға тейеш.

❖ Көнбағышта йөрәк һәм ҡан тамырҙарының нормаль эшләүен тәьмин итеүсе магний күп.

### Өлкәндәр өсөн

❖ 200 грамм май кесерткәнен быяла һауытҡа һалып, 500 мл араҡы ҡойорға, марля менән бәйләп, беренсе тәүлектә - тәҙрә төбөндә, һуңынан 8 тәүлек ҡараңғы урында тоторға. Һәҙергә, иртән ас ҡарынға һәм кисен йоҡлар алдынан 1-әр балғалаҡ эсергә. Тиҙҙән үҙегеҙҙе күпкә яҡшыраҡ тоя башлаясаҡһығыҙ, йөрәк мускулы нығынасаҡ, шулай уҡ склероз билдәләре юҡҡа сығасаҡ.

### Гөлйемеш

❖ Йөрәк, баш мейеһе, һиҙеү ағзаларының эшсәнлеген күтәреү өсөн гөлйемеш сәскәләрен еҫкәргә.

❖ Ашҡаҙан, үт ҡыуығы ауыртҡанда гөлйемеш сәскәләрен сәй кеүек бешереп, 15-30 минут төнәтеп, көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

❖ Иҙелгән гөлйемеште термосҡа һалып, өҫтөнә ҡайнап торған һыу ҡойорға, 20-30 минут төнәтергә һәм һәҙергә. Баш ауыртыуҙан, эшләү һәләтен күтәреү өсөн шәп дауа.

❖ Таштарҙы иретеү өсөн ваҡлап туралған 2 ҡалаҡ гөлйемеш тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, 1 аҙна көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

❖ Гөлйемештән яһалған препараттарҙы ҡулланыуҙы мотлаҡ табип күҙәтеүе аҫтында башҡарырға!

### Май ашағыҙ

❖ Май ашайһығыҙ икән, нервығыҙҙы нығытаһығыҙ. Ҡыҙыу кешеләр өсөн бигерәк тә шифалы аҡ май.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Минең Хәтмулла ҡартатайым да балта оҫтаһы булған, тиҙәр. Бына бит, оҫталыҡ нисек быуындан-быуынға тапшырыла! Ҡартатайымдың нисек итеп ат арбалары яһауын әле лә һөйләп ала атай.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Халыҡ сәнғәтенең һәр өлгөһөндә лә биҙәүҙәр киң ҡулланыла. Боронғо кешеләрҙең тормошонда биҙәктәр ҙур роль уйнаған, улар кешене яуыз көстәрҙән һәм күҙҙәрҙән һаҡлаған, ниндәйҙер йола үтәү өсөн кәрәк булған, хужаһының социаль статусын күрһәтеп торған.**

Биҙәктең һәр элементы һаҡлау ролен үтәгән. Хәҙерге заманда тәндә "яуыз көстәр"ҙән һаҡлау кәрәклеге юғалған, сөнки уларға ышаныу юҡ-ҡа сыҡҡан. Шулай ҙа бөгөнгө көндә һаҡлау төшөнсәһе әһәмиәтен юғалтҡан тип тә әйтеп булмай, ул икенсерәк кимәлгә күскән. Бөгөн "энергетик вампир", кешене һаҡлап тороусы ҡатламдар, мәҫәлән, аура тигән терминдар ҡулланыла. Йәғни, элек кешенең йәне һаҡлауға мохтаж булһа, бөгөн тәндең энергетик ҡатламы һаҡлау объекты булып тора. Шуға ла кейемдең "һаҡлаусы" өлөштәре лә үҙгәрҙе, заманса костюмда насар кешеләрҙең энергетикаһынан ауыраны һаҡлау өсөн ювелир биҙәүестәренә, бетеүҙәргә, төҫтәргә күберәк иғтибар бирелә. Әммә боронғолар ҡурҡыныс яныусы әйберҙәргә күберәк мистик төҫ биргән, улар кеше күҙенә күренмәй һәм хатта кейем аша ла кешенең йәненә үтеп инә ала, тип иҫәпләгән. Кейемдең иң "йомшаҡ" ере тип йырыҡтар, тегелгән урын иҫәпләнгән. Шуға ла бындай урындарҙы биҙәгәндәр ҙә. Милли кейемдә яға, түш киҫелеше, итәктең һәм еңдең осо биҙәлгән. Башҡорт ҡулдәгендә бигерәк тә уның өҫкө өлөшөнә иғтибар биргәндәр. Ошо маҡсатта түш уйымы тәүҙә сигелгән түшелдерәк менән ҡапланған. Һуңғараҡ түш уйымын сигеп биҙәгәндәр, ул иҙеү тип аталған.

Хәҙерге фәндә милли костюмды философтар ҙа өйрәнә. Мәҫәлән, Гүзәл Хәсән ҡыҙы Ҡазбулатова хеҙмәттәрендә биҙәү элементтарының барлыҡҡа килеүен һәм мәғәнәһен ентекләп өйрәнә. Кейем һаҡлаусы ролен үтәүҙән тыш, матур биҙәктәр кешелә тик ыңғай тойғолар ғына уятҡан. Матурлыҡты күрә белгән кеше иһә, яуызлыҡ ҡылмаясаҡ. Шуға ла биҙәктәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте лә юҡ түгел.

Донъя өс өлөштән тора, тип иҫәпләгән ата-бабаларыбыҙ. Иң юғары баҫҡыста - Һауа, унда Тәңре йәшәй. Көн (Ҡояш), Ай, уларҙың ире Самрау; Тимер Ҡаҙыҡҡа бәйләнгән Һарат менән Буҙат һәм уларҙың артынан ҡыуыусы алты ас бүре лә Һауала.

Уртансы ҡатлам - Ерҙә кеше, уның ярҙамсылары Толпар, йәнлектәр, ҡоштар (шоңҡар, торна, аҡҡош, күгәрсен), шулай уҡ өй, тау, урман, ут эйәләре йәшәй.

Ер йәки һыу аҫты - төрлө ғифриттәр, һыу эйәләре, Сәмреғош һәм башҡа йәндәр донъяһы. Улар, үҙ сиратында, изге (Аҡбуҙат, торна, балыҡ) һәм яуыз (дейеү, ауырыу эйәләре һ.б.) һәм бер кемгә лә зыян килтермәгән (тау, йылға эйәләре) көстәргә бүленә.

Донъяның ошондай бүленеше матди мәҙәниәт предметтарының барыһында ла, шул иҫәптән торлаҡта, көнкүреш әйберҙәрендә, кейемдә сағылыш тапҡан. Милли кейемдә өҫкө донъя баш кейеме һәм арҡаның өҫкө өлөшө кимәлендә сағыла. Баш кейемдәре ҡоштарҙы ла хәтерләтеп ҡуйған, ә ҡоштар иһә һауаның, яҡтылыҡтың, тормоштоң күҙалланышы. Ҡашмауҙы ғына алып ҡарайыҡ. Уның алғы өлөшө ҡоштоң суҡышы, арҡала ҡойроғо, алға төшөп торған биҙәүестәр ҡоштоң ҡанаты. Әйткәндәй, ҡолаҡ эргәһенән аҫҡа ҡарай төшөп торған сулпылар күп халыҡтарҙың баш кейеме өсөн хас.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ*

# АТАЙҘАН КҮРГӘН...



**Халҡыбыҙҙа аҡыллы, тапҡыр әйтемдәр бик күп. Теге йәки был хәл-ваҡиғаға ҡарап, уларҙы айырыуса ололар йыш ҡуллана. Минең өләсәйҙең дә үҙе генә әйтергә яратҡан әйтемдәре бар. Мәҫәлән, беҙ, уның ейән-ейәнсәрҙәре, яңылыштан ғына эш боҙһаҡ, ул: "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", - тип киҫәтергә ярата.**

Минең атай-әсәйем дә йор һүҙлеләр. Иглин районы Оло Ҡарамалы ауылында тыуып үҫкән атайым Илфат Хәтмулла улы үҙе бер хазина һандығы, тиерһең. Ул беҙгә - һеңлемә, ҡустыма һәм миңә - һәр яҡлап өлгө. Ысын ир, ысын атай өлгөһө. Әсәйебеҙ, Регина Рим ҡыҙы, өлгөлө хужабикә, атайыбыҙға - һөйөклө ҡатын. Ҡатын-ҡыҙ өсөн иң шәп һөнәргә - ашнаҡсы һөнәренә эйә көҙәрлебеҙ. Ҡустыбыҙ, кинйәбеҙ, гел атай янында. Атай уны үҙенә лайыҡлы алмаш итеп үҫтерергә тырыша. Мирад ҡустыбыҙ көслө булһын, тип, уға спорт ҡоралдары һатып ала, бокс серҙәренә өйрәтә, уны профессиональ спортҡа ылыҡтырыу уйы менән яна. Атайым үҙе төрлө штангалар күтәреү менән мауыға. Ауыр-ауыр тимерҙәрҙе күтәргәнен күргәнем бар. Һаулығы, физик торошо яҡшы булғанлыҡтан, ул элиталы һаналған диңгеҙ пехотаһында хәрби хеҙмәт үтәгән. Заманында Стәрлетамаҡ Физкультура техникумын тамамлаған. Атайҙы ысын-ысыны менән етмеш һөнәрле ир, тип атарға булалыр. Ни өсөн тигәндә, уның ҡулынан килмәгән эше юҡ. Ауылда тыуып үҫкән бөтөн ир-азаматтар ҙа тиерлек эшкә талымһыҙ, әрһеҙ булаларҙыр инде.

Атай ағас эшенә бигерәк оҫта. Уның оҫталығын бер генә дәлил ярҙамында белергә була. Өйҙә әсәйҙең бысағы һәр ваҡыт үткер була. Атай үҙе лә балтаһын үткер тота. Ағас эшенең рәтен белеп бөтмәгән өйрәнсектәр, бәлки, үтмәҫерәк ҡорал менән дә эшләйҙер, ә беҙҙең атай улай түгел - берәй сәғәтен сарыф итһә сарыф итә, әммә балтаһын үткерләп алмайынса, эшкә тотонмай. Әле яңыраҡ көнкүреш тауарҙары магазинынан "калун" тип аталған ҡалын балта алғайны. Уны һапланы ла, оҫкондар сәсрәтеп, үткерләй торған түңәрәк дискыға терәп, үткерләп алды. "Ҡорал эшләй, егет ҡыуана", тип ҡабатларға ярата үҙе. Минең Хәтмулла ҡартатайым да балта оҫтаһы булған, тиҙәр. Бына бит, оҫталыҡ нисек быуындан-быуынға тапшырыла! Ҡартатайымдың нисек итеп ат арбалары яһауын әле лә һөйләп ала атай. Әллә ниндәй алыҫ араларҙан килеп алыр булғандар, ти, уларҙы. Ат арбаһының тәгәрмәстәрен ифрат ҙур түҙемлек, үҙенә генә хас оҫталыҡ менән эшләгән бит ул. Хатта бының өсөн махсус ҡоролма ла уйлап сығарған. Ҡартатайҙың нисек тәгәрмәс эшләгәнен күрергә тип, райондың балта оҫталары йыйылып китер булған. Атайымдың ҡартатаһы Исләмғил ҡартатай иһә, тимерсе булған. Ҡарамалы йылғаһы буйында уның ҙур, тирмәнең яртыһы самаһы ҙурлыҡта, тирмә формаһындағы суйын мейесе ултырған. Ул был донъянан киткәс тә ауыл халҡы ул мейесте тимер сүкегән, тимер иреткән. Тик ниндәйҙер бер ауыл хакимиәте башлығы шул мейесте ҡара металл йыйыусыларға һатып ебәргән. Һәр заманда ла изгелек менән яуызлыҡ, оҫталыҡ менән белдекһеҙлек ҡапма-ҡаршылығы күҙәтелә инде ул, ҡыҙғаныска ҡаршы. Бәлки, кешелек үҫешһен өсөн ошондай ҡапма-ҡаршылыҡтар ҙа кәрәктер. Тимерҙе лә бит, уттан һыуға һалып, сыныҡтыралар. Тәбиғәт тә кешелек күңелендәге әхлаҡ, оҫталыҡ, тырышлыҡ, фиҙәкәрлек кеүек аҫыл сифаттарҙы төрлө замана сирҙәре, уғрылар, эшем эйәләре ярҙамында тәрбиәләйҙер. Беҙгә иһә, һәр заманда ла ата-бабалар өйрәткән һабаҡтарҙы оноторға ғына ярамай. Шул сағында тормош үрҙәренә еңелерәк артылырбыҙ, уның һынауҙарын еңелерәк сисербеҙ.

**Вероника ИСМӘҒИЛЕВА,**
**Өфөнөң 24-се мәктәбе 9-сы класс уҡыусыһы.**

*ФӘҺЕМ*

# БӘХЕТ ИСЕМЛЕ ФӘРЕШТӘ



**Бәләкәс ҡыҙымды коляскаға ултыртып, Өфө урамы буйлап китеп барам. Юлда әхирәтем тап булып, бер аҙ бергә барҙыҡ. Бәләкәсем коляскаһынан төшөп, уны үҙе этеп бара башланы. Көсө етеңкерәмәгәндә, боролоп, миңә ымлай, йәнәһе лә, ярҙам ит! Шунан йүгереп, күгәрсендәр баҫтырып китә, йә эттәрҙе күреп ҡалып, ауыҙын асып туктап ҡала. Осраған кешеләрҙе үҙ телендә сәләмләгән була, үтеп китһәләр, һаубуллашып ҡулын болғай.**

Әхирәтем бәләкәсемдең ошо ҡылыҡтарын күҙәтеп килде-килде лә, ихлас йылмайып: "Эй, бәхетлеһең дә инде һин!"- тип ҡуйҙы. "Аллаға шөкөр, бәхетлемен", - тинем мин. Шунда әллә ҡасан, бик бәләкәй саҡта өләсәйем һөйләгән бер ҡисса иҫкә төштө. Һеҙҙең менән дә уртаҡлашайым, тыңлағыҙ әле, зинһар...

Яҡты донъяға килгәндә һәр кешегә Бәхет фәрештәһе беркетеп ҡуйыла. Уның тап баш осонда, күҙгә күренмәй генә оса ул. Кеше яҡшы эштәр ҡылһа, ҡыуанһа, башҡаларҙы шатландырһа, фәрештә уға нығыраҡ яҡынлай икән. Әлбиттә, Бәхет фәрештәң эргәндә булғас, әҙәмгә лә йәшәүе рәхәтерәк, күңеллерәк, еңелерәк! Был фәрештәкәй ҡанаттарын ҡағып, үҙенең кешеһен изге кешеләргә юлыҡтыра, тормоштоң бөтә матурлығын аса, осраған ауырлыҡтарҙы еңергә көс һәм дәрт бирә, ти. Һәм тағы ла иң иҫтә ҡалғаны: Бәхет фәрештәһе рәхмәтлеләрҙе ярата икән! Ниҙәргә генә тарыһаң да, уға рәхмәт әйтеп барырға кәрәк, ти. Мәҫәлән, ҡолап киттең икән: "Уй, рәхмәт, фәрештәм, тубыҡ ҡына һыҙырылды, төҙәлә ул!"- тиеп кенә әйтеп ҡуйыу ҙа етә уға.

Ә Бәхет фәрештәһен иң ҡурҡытҡаны - кешеһенең төшөнкөлөккә бирелеүе икән. Ауыр, яман уйҙар, ҡурҡыныс әҙәпһеҙлек - уның өсөн сит нәмә. Кешеһенең ошондай хәлгә юлыҡҡанында ла ул ярҙамға ашыға, ҡанаттарын елпә-елпә, кешенең йөрәген, күңел күҙен асырға тырыша. Кеше һаман болоҡһоп, яманһыулап йөрөһә, үҙенең хәлһеҙлегәнән Бәхет фәрештәһе лә арый...

Кеше бер килеп: "Юҡ минең бәхетем!" - тиһә, фәрештәһе лә тертләп ҡала... Тырыша-тырыша кешегә уның бөгөнгө көндә шатланырға бик күп сәбәптәре бар икәнен күрһәтә: атай-әсәйең, дуҫтарың, йәшәр мөйөшөң, өҫтәл тулы ризығың...

Кеше инде икенсегә шул уҡ һүҙҙе ҡабатлай икән, Бәхет фәрештәһе алыҫлаша, сөнки уға ла ҡыйын була башлай икән. Шулай ҙа ул йыраҡтан булһа ла кешегә ярҙам итергә теләп: "Әйләнеп ҡара! Ошо көндә һинән дә ауырыраҡ хәлгә ҡалғандар бар! Улар бит тырышалар, еңәләр был хәлде, тик төшөнкөлөккә бирелеп, мине ситләтмәйҙәр! Зинһар, ҡутар башыңды!" - тип ҡабатлай икән.

Кеше инде өсөнсөгә лә шул һүҙҙәрҙе әйтһә, Бәхет фәрештәһе, үпкәләп, осоп китә икән...

Өләсәйем ошоларҙы һөйләгәнендә мин хатта Бәхет фәрештәһен йәлләп, илап алғайным. Минең шул тиклем Бәхет фәрештәле булғым килгәндер инде: ятһам да, торһам да, абынып ҡолаһам да, өҫлө алып илаһам да, әхирәттәрем менән үпкәләшеп китһәм дә, әсәйем әрләп ҡуйһа ла, гөмүмән, ниҙәр генә булһа ла - гел эстән генә фәрештәмә рәхмәт әйтә торғайным...

Үҫә килә иһә, өләсәйемдең кинәйәләп әйткән һүҙҙәренең бар асылы аңлашылды - кеше бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, тормошонан йәм һәм тәм таба белә икән, был үҙе бер бәхет! Ни булһа ла биреשмәскә, көслө рухлы, ихлас булырға, шатлыҡ-ҡыуаныстар менән уртаҡлаша белергә өндәгән ҡисса был, шулай бит? Ә һеҙҙең ниндәйерәк уй-фекерҙәр тыуҙы уҡып бөткәс? Минең һеҙгә теләктәрем шул: Бәхет менән бергә булығыҙ, балаҡайҙар.

**А. ИСХАҠОВА,**
**психолог.**

✓ *Ҫанай шары бөгөнгө кеүек шәрә булмаған, борон ҡара ҡайын тип аталған ағас менән ҡапланған булған. Был ағас Мең ырыуы халайыҡтарында шифалы ағас тип иҫәпләнгән, ырым-өшкөрөү, өтәҫләү ғәмәлдәрендә ҡулланылған.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# АТАМАЛАРҘА - ХАҠ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Тарихты архивтарҙағы документтарҙа, боронғо китаптарҙа, археологик ҡаҙылма материалдарында ғына түгел, ә ер-һыу, тау-ҡая, ауыл-ҡала атамаларында ла эҙләү фарыз. Оҙаҡ йылдар үҙебеҙҙең мең ырыуы башҡорттары йәшәгән Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә һәм башҡа төбәктәрҙең топонимик атамаларын өйрәнеү миңә халҡыбыҙҙың тарихына бәйле күп биттәрҙе асырға, асыҡларға ярҙам итте. Гәзит уҡыусыларға үҙемдең эҙләнеүҙәремдән ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе еткергем килә.**

Яйыҡ-ҫубыйҙар ҡәүеме, Иҙеүкәй илендәге Торонтайыш ауылы хәҙерге Әлшәй районында урынлашҡан. "Ыласын ҡош типмәгән, ҡош тырнағы теймәгән" торонтайғош исемен мәңгеләштергән ул. Халыҡ телендәге йәнә бер исеме - Мәҫәй, бәлки, Меҫәйҙер. Урыҫ телендәге башҡорт шәжәрәләрендә Меши исеме килтерелә (унда *ҫ* хәрефе юҡ), был исем Юрматы, Ҡыпсаҡ, Тамъян шәжәрәләрендә һәм бөгөнгө Әлшәй һәм Миәкә райондарында урынлашҡан боронғо башҡорт ауылдарының исемдәрендә мәңгеләшкән башҡорт бейҙәренең тармағында күренә. Торонтайғош был ҡәүемдең ырыу ҡошо булғандыр, тип фаразларға нигеҙ бар. Ошоға дәлилдә "Иҙеүкәй менән Мораҙым" иртәгенән табырға мөмкин. Ҡорайтмаҫ, Мәкәш, Ташлы ауылдары Мәҫәй ауылы менән борондан уҡ тығыҙ мөнәсәбәттә булған, бигерәк тә ҡыҙ биреү, ҡыҙ алыу кеүек мөһим бәйләнештәр, уртаҡ кәсеп, һунар шөғөлө был ауылдарҙың бәйләнешен һәр дайым нығытып торған. Мәҫәлән, ҡыпсаҡтарҙың ырыу тамғаларының береһе - ғәрәптең *"дәл"* хәрефе. Ошоға бәйләнгән бер матур ғәмәл әле лә бар беҙҙең ауылдарҙа, уларҙы беҙҙең ауылға килен булып төшкән Мәҫәй ҡыҙҙары алып килгән булғандыр: яңы теле сығып килгән балаға уң ҡулының шәһәҙәт бармағы менән һул ҡулының усына төртөп, ашап бөткәс дәл-дәл әйттереп, доға өйрәтеү ғәмәле ул. Тимәк, урындағы халыҡ үҙен бер ҡәүем итеп туплай алырлыҡ символдарын балаһына һөтимәр сағынан уҡ өйрәтә башлаған булған. Бына ошо мәғлүмәттәр, шулай уҡ Иҙеүкәй ғәскәрендә һуғышҡан ҡыпсаҡтарға бирелгән ерҙә урынлашҡан боронғо тамырлы Ҡыпсаҡ-Асҡар, Торонтайыш ауылдарының тарихы Иҙеүкәй әмир замандарына барып тоташа һәм ҡыпсаҡтар был тарафтарҙа урынлашҡан башҡа ҡәүемдәр менән ныҡлап ҡушылып киткән, тип етди фаразларға сәбәп булып тора. Әлшәй районында Дәүрә(н) тигән ауыл бар. "Атабаба бергәләп дәүрән ғүмер һөрөрбөҙ", тимәк, "дәүрән" һүҙе дауамлы, оҙаҡтарға (дәүерҙәргә) һуҙылған ғүмер һөрөрбөҙ, тигәнде аңлата булыр. Йәнә Иҙеүкәй эпосынан өҙөк: "Минән дәүрән үткәндә, һеҙгә дәүрән еткәндә, Ҡобағылдай ирҙе мин бер күрмәгән ҡартыңмын!" Ниндәй ҙур мәғәнәле атамалар биргән боронғо башҡорт үҙенең тыуған төйәгенә. Иҙеүкәй иле Дәүрә(н) ауылының бөгөнгө рәсми исеме Фән, русса Фань.



Ҡобау меңдәр ауылы Кәләтаяҡ хәҙерге Бүздәк районының иң көнбайыш тарафында урынлашҡан, уларҙың тамғаһы "Келә-таяҡ" (крестовина) ауыл исеменә күскән. "Келә" һүҙе тиҫкәре, көйһөҙ, арҡыры, һөйләшеүгә килмәгән кешегә һуҡраныу һүҙе лә булып ҡулланылған, Иҙеүкәй иртәгендә "келәбей, келәгә бей" һүҙе фәҡәт ошо мәғәнә йөрөтә.

Бишбүләк - был атама биш болаҡ һүҙенең боҙолған шәкеле. Болаҡ һүҙе менән борон йылға, инеш, һыу сығанағы аталған. Ун туғыҙынсы быуат баштарында Мең ырыуы биләмәләренә күпләп килеп ултырған башҡа милләт кешеләре башҡорт һүҙҙәренең әйтелешен боҙоп һөйләшкәндәр, күп атамаларҙың мәғәнәһен белмәгәндәр. Урындағы халыҡ нисбәте аҙ булғанлыҡтан, күп атамалар яңы әйтелештә яңғырай башлай һәм болаҡ һүҙе бүләк булып китә һәм Бишбүләк рәсми атамаға әйләнә. Ә бына хәҙерге Көйөргәҙе районында башҡорттар үҙ атамаларын һаҡлап килгән һәм бөгөн дә Ете Болаҡ ауылы йәшәп килә. Картала ул Етебулак булып билдәләнгән.

Ат етәр - Шишмә районындағы ауыл. Картала ул күренмәй. Был ауылдың атамаһы ифрат ныҡ боҙолған. Юл буйындағы боролошта ҡуйылған күрһәткестә (әгәр әле үҙгәртелмәгән булһа инде) Аджидарово булып яҙылғанын күреп, күңелем төшкәнен яҡшы хәтерләйем. Башҡорт халҡының ауыҙтел ижады "ат етәр", "ат етмәҫ" һүҙ бәйләнешен йыш ҡуллана. Борон ырыу-ара элемтәлә ат саптырыу ҡулланылғанын иҫәпләгәндә, был атаманың ниндәй мөһим мәғлүмәт йөрөткәнен аңлауы ҡыйын түгел. Иҙеүкәй эпосынан шундай юлдар бар: "Ат-хат еткән ерҙән ҡунаҡтар саҡырып, аймағын йыйып, мал һуйып, ҙур туй яһап, Иҙеүкәйҙе ҡунаҡ иткән". Ә ниндәй ерҙәргә ат еткән булған һуң? Бында төрлө фараздар булыуы мөмкин, шуларҙың иң дөрөҫө, әлбиттә, ат еткән ара - ырыу биләмәләренең иң алыҫтағы төбәге мәғәнәһендә булған. Оло туй-мәжлестәр үткәрелгәндә ырыу-тоҡомдоң бөтә тарафтарынан иң абруйлы кешеләр йыйылған. Унан ҡала, ат еткән урын килгән хәбәрҙе ары тапшырыр өсөн дә тәғәйенләнеп, бында махсус хәбәр йөрөтә торған ышаныслы кешеләр ҙә, саптар аттар ҙа булған, әлбиттә. Ошоға ярашлы, күрәһең, бындай хәбәрсе лә саптар, сапҡынсы тип аталған. Был һүҙ Иҙеүкәй эпосында күп осрай. Һуңғы Һартай ҙа был һүҙҙе ҡуллана: "...был меҫкен сапҡынсыға мин асыуланманым". Һыбай, һыбайлы һүҙенең йәнә бер шәкеле - атсабар. Тимәк, ат етәр һүҙе телмәр өлгөһө генә түгел, ә ырыу-ара, ырыу эсендәге бәйләнештәрҙә ҡулланылған ҡәҙимге һүҙ, башта, моғайын, төбәк атамаһы булып, һуңыраҡ ауыл исеменә әйләнеп киткәндер. Ошо Ат етәр атамаһын ҡеүәтләп, бөгөнгө Иглин районында урынлашҡан Мең етәр ауылы йәшәп ята. Ат етәр ауылы ла, Мең етәр ауылы ла боронғо Иҙеүкәй илендә, Иҙел-ҫубый меңдәр биләмәләрендә урынлашҡан.

Мәкәш һәм Ташлы ауылдары араһындағы айырым түбә Ҫанай шары тип йөрөтөлә. Яйыҡ-ҫубыйҙарҙың урындағы диалектында был атама Ҫанай ҫары булып йөрөтөлә. Ҫанай һүҙе менән йәйәнең бер төрө аталған. Иҙеүкәй эпосынан өҙөк: "Ун батырҙан иң батыр, ул да булһа Күк батыр. Ҫанайы - күк соландай, тартып атҫа ҫанайын, күктә йондоҙ юғалтҡан Күк батыры, тип аталған..." Ҫанай шары бөгөнгө кеүек шәрә булмаған, борон ҡара ҡайын тип аталған ағас менән ҡапланған булған. Был ағас Мең ырыуы халайыҡтарында шифалы ағас тип иҫәпләнгән, ырым-өшкөрөү, өтәҫләү ғәмәлдәрендә ҡулланылған. Был ағастың бер киҫәге лә әрәм ителмәгән, хатта тубалда сөрөк (серек) итеп бал ҡортон ҡарағанда файҙаланылған, был ағастың көлө менән йыуынғандар, әммә тере ағасты ҡырҡыу ҡәтғи тыйылған булған, уның тик ҡороған, серегән ҡалдыҡтарын ғына файҙаланғандар. Өшкөрөү ғәмәленә ҡулланғанда ағас япраҡтарын өшкөрөүсе фәҡәт махсус доға менән, ағастан рөхсәт һорап өҙөп ала торған булғандар. Ошондай ғәмәлде үҙ ваҡытында Фәрхизийән әбей ҡулланғанын күршем Ғәйнетдинова Зөһрә апайыбыҙ бик төгәл итеп һөйләй ине: "Сәғитйән улым Урта Азияла ныҡ сирләне, үҙ илебеҙгә ҡайтырға кәрәк, тинеләр, шул балаға була Мәкәшкә ҡайттыҡ, ҡәйнәм Фәрхизийән Ҫанайҙан ҡара ҡайын япрағы апҡайтып, баланы һыу керетте, өтәҫләне, һыуын эсерҙе, шул килеш сире ҡул менән һыпырып алған кеүек булды, ҡабат бер ҙә сирләмәне", - тиәр ине. Ошоға ярашлымы икән, Мәкәштең Шаҡа тауындағы ҡайын ағастарын киҫеү, һындырыу ҙа ҡәтғи тыйылған булған, һындырған кешенең йә ҡулы, йә аяғы һына тигән ырым йөрөгән. Был һүҙҙәрҙе мин Мөхәлләфә әбейҙән ишеткәнем булды. Ҫанай шарының ҡара ҡайыны үткән быуаттың илленсе йылдарында юғалып бөтә.

**Клара ХӘМИҘУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Урта быуаттарҙа төрлө илдәрҙең хандары юғары дәүләт вазифаларын биләр алдынан Башҡортостанда идаралыҡ мәктәбен үткән, "хакимлыҡ һәләттәрен үҙләштергән, Башҡортостан улар өсөн тәжрибә ролен башҡарған". Себер ханлығы хакимы Күсем (1537-1597) шундай мәктәп үткән.

Бахши Иман башҡорт ханлыҡтарының, батшалыҡтарының юғары дәүләт структуралары хаҡында һүҙ алып барғанда "ил" йәки "эль" тигән төшөнсә ҡуллана. "Ил" һәм "эль" атамалары буйынса төрлө фекерҙәр йәшәй. С.Е. Малов "ил" һүҙен "ҡәбиләләр союзы" тип тәржемә итә, шул уҡ ваҡытта был һүҙҙең "дәүләт, халыҡ"ты аңлатҡанын да инҡар итмәй. Ҡайһы берәүҙәр был һүҙҙе "төрлө ҡәбиләләрҙең аристократияһы берекмәһе"- "Al" тип аңлата. "Al" - дәүләт ойошмаһы төрөксәнән халыҡты аңлата (А.Н.Борнштам).

Л.Н. Гумилев фекере буйынса: "Державаны һаҡлау ихтыяжы, яуға даими әҙер тороу илдәрҙе йәшәткән. Һуғышта еңелеү, дипломатик уңышһыҙлыҡ, хыянаттың бер генә осрағы һәм иң ябай һөжүм дә илде ҙур ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған. Тап шул сәбәптәр арҡаһында иртә урта быуат дәүерендә Урта Азиялағы сәйәси берләшмәләр оҙаҡ йәшәй алмаған", ти фән докторы Р.Ғ. Буканова. Күрәһең, ошо сәбәптәр арҡаһында илдәр тарихи аренанан юҡҡа сыҡҡандыр.

### ХАНЛЫҠТАР

### 1.Табын ханлығы

Монголдарға тиклем дәүерҙә Табын ханлығы иң ҙур ханлыҡтарҙың береһе булған. Табын ханлығының дәүләтселегә хаҡында иң тәүгеләрҙән булып XIX быуатта (1880 й.) М. Өмөтбаев яҙып сыҡҡан. Был теманы үҫтереп, Р.Ғ. Буканова Әл Иҙрисиҙең XI быуатта төҙөгән картаһын ентекле өйрәнә. Ул хеҙмәтендә Табын ханлығының дәүләт ҡоролошо булғанлығын нигеҙләй. Уның фекеренсә, башҡорттарҙың табын төркөмө XV-XVI быуаттарҙа көньяҡ Уралға Себерҙән күсенеп килгән. Улар Уралға XIII-XV быуаттарҙағы меңлеләр, ҡатайҙар һәм ҡыпсаҡтар менән бергә килгән. Табындарҙың тарихи ватаны булып Иртыш йылғаһы буйында ерҙәр һанала, унда табындарҙың атаҡлы ханы Майҡы бей ерләнгән. Майҡы бей башҡорт халҡының тарихына барлыҡ төрки донъяға киң билдәле булған күренекле сәйәси фигура булып ингән. Р.Ғ. Буканова яҙыуынса, Табын ханлығының үҙәге Иртыш йылғаһынан көнбайыштараҡ булғандыр. Көнсығыш традициялары буйынса ханлыҡ көнсығыш һәм көнбайыш ҡанатҡа бүленгән. Көнсығыш табын ерҙәре XVIII быуатта ла дөйөм Табын ханлығы ерҙәре булып иҫәпләнеп, көньяҡтағы Аҡъяр тауҙарынан алып төньяҡтағы Әйгә, көнбайышта Ағиҙелдән алып Иртышҡа тиклем һуҙылған. Көнбайыш табындар ерҙәре үҙәк Башҡортостан ерҙәрен үҙ эсенә алған, уның көнбайыш һәм көньяҡ сиктәре Ыҡ, Сәрмәсән, Туҡ, Кесе Уран, Ырғыҙ, Кәмәлек йылғаларына тиклем һуҙылған. Ханлыҡтың төньяҡ-көнбайышында ханлыҡ ерҙәре Сулманға (Камаға) тиклем барып еткән.

**(Дауамы бар).**

# КӨНИТМЕШ

## улар онотолған милли

**Редакциябыҙҙың бөгөнгө ҡунағы - 30 йәштәрҙәге ир-егет. Төп эшенән тыш, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә, сәйәхәт итеүҙе лә ғәҙәт иткән, республиканың йәмәғәт тормошонда ла ҡатнашырға өлгөрә. Сибай егете Денис ӨМӨТБАЕВ үҙенең әле эшләгән эштәре һәм күңелендә йөрөткән идеялары менән уртаҡлаша.**

**► Хәҙер башҡорттар элеккесә, ата-бабаларыбыҙса, ҡайһы ырыуҙанһың, тип таныша...**

- Бөрйән ырыуынанмын. Красноярск крайындағы Черненко тигән бәләкәй генә бер ҡалала тыуғанмын. Черненко минең тыуған урыным булһа ла, тыуған ерем түгел. Тыуған ерем, бәләкәй Ватаным тип мин Сибай ҡалаһын һанайым. Өс йәшем тулмаҫ элек ғаиләбеҙ Сибайға күсеп ҡайта. Ҡартатайым менән өләсәйемдең тик башҡортса ғына һөйләшеүен күреп, бала аҡылым менән (үҙем атай менән әсәйгә ғәҙәт буйынса русса ғына хәбәр ҡушыуым арҡаһындалыр), башҡорт теле - ҡарттар телелер, тип уйлауым хәтеремдә. Хәҙер башҡортса ла, русса ла, инглизсә лә иркен аралашам. Сибай ҡалаһының 13-сө башҡорт мәктәбендә (хәҙерге Р. Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейында) 8-се синыфты тамамлағас, уҡыуымды Өфөләге Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында дауам иттем. Мәктәптән һуң Троицк ҡалаһының Урал дәүләт ветеринария медицинаһы академияһының (хәҙерге Көньяҡ Урал дәүләт аграр университетының) Сибай филиалына уҡырға индем. Ул уҡыу йорто студенттарын сит илгә практикаға ебәреүе менән күптәрҙә ылыҡтыра ине. Академияла үҙемә яңы офоҡтар астым. Әйтәйек, Швецияла практика үткән сағыбыҙҙа ҙур ғына бер һөтсөлөк фермаһында булғайныҡ. Мине урындағы фермерҙарҙың хужалыҡ итеү оҫталығы хайран ҡалдырҙы. Башҡортостанға ҡайтҡас: "Нинә беҙҙең хужалыҡтар дөрләп эшләмәй, бөлөп барған хәлдә икән?" - тип аптыраным.

Уҡыуҙы тамамлағас, башта Өфөлә ветеринария дарыуҙары, һуңыраҡ ветеринария өлкәһенә кәрәкле медицина ҡорамалдары һатыу менән шөғөлләндем. Хәҙер инде лаборатория ҡорамалдары һатыу буйынса тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ талап иткән эшкә тотондом...

**► Беҙ һинең сит илдәргә сәйәхәт итергә яратыуың тураһында ла ишетеп беләбеҙ...**

- Бер урында оҙаҡ тора алмайым - яйы сығыу менән, сәйәхәткә сығып китеү яғын ғына эҙләйем. Донъяны бер урында ултырып ҡына өйрәнеп булмай бит. Хәрәкәт итергә кәрәк. Мосафирлыҡ та, йылҡысылыҡ кеүек, башҡорттоң ҡанындалыр, тип уйлайым. Студент сағымда Бөйөк Британияла, Швецияла практика үттек бит инде, ә аҡ дарамде кинәйтеп, тормошҡа бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарарға өйрәтте мине был илдәр. Европала тағы Финляндияла, Нидерландтарҙа, Польша, Чехияла, Австрияла, Германияла булдым. Элекке совет республикаларының барыһын да тиерлек йөрөп сыҡтым. Әзербайжан, Әрмәнстан, Грузия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан юлдарын да тапарға тура килде. "Салауат Юлаев һәйкәленән - Сыңғыҙхан һәйкәленә тиклем" тигән девиз менән Монголияла ла йөрөп ҡайттыҡ. Ике тапҡыр Һиндостанда булдым. Икенсе тапҡырҙа Һиндостанда бик оҙаҡ, ике ай ярым самаһы йөрөп ташланым.

Сәйәхәттәр күп мөмкинлектәр аса, төрлө асыштарға юлыҡтыра. Төрлө мәлдәрҙә төрлө хәлдәр, төрлө ауырлыҡтар килеп тыуырға мөмкин. Йөрөй-йөрөй, төрлө кәртәләр аша үтә-үтә, ауырлыҡтарҙы еңелерәк сисергә өйрәнәһең. Киң күләмдә, бөтөн Ер шары күҙлегенән ҡараһаң, һин ауырлыҡ тип һанағандар ябай ғына бер мәсьәлә булып күренә башлай. Сәйәхәт итеүҙең тап шул яғы ҡиммәт тә инде.

Мин үҙаллы сәйәхәт итәм. Агентлыҡтарҙан юллама һатып алып йөрөмәйем. Сөнки ул саҡта барыһы ла һинең өсөн алдан хәл ителгән була. Ҡайҙа барырыңды, ҡайҙа йоҡларыңды, нимә ашарыңды, кем менән аралашырыңды үҙең хәл итһәң, ҡыҙыҡлыраҡ. Шуға ла мин донъяла булған төрлө хәлдәрҙе, төрлө кешеләрҙе күреп, "Һәр кем үҙенсә хаҡлы" тигән ҡарарға килгәнмен. Мәҫәлән, элек ниндәйҙер бер мәсьәләгә ҡарашым бер яҡлы ғына булған булһа, бөгөн мин уға төрлө яҡлап, киң ҡараш менән баға алам.

Һәр кемдең бәхете үҙ ҡулында. Бәхет кешенең унайлы урында, вазифала ултырыу-ултырмауына ғына бәйле түгел. Кеше үҙен бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә итә ала. Һәр хәлдә, сәйәхәттәр мине бәхетлерәк итә.

**► Илдәр буйлап сәйәхәт иткән сағыңда һине аптыратҡан күренештәр ҙә булғандыр...**

-Эйе, һәр ил, һәр төбәк сәйәхәтсе күңеленә үҙенә генә хас биҙәген һала. Әйтәйек, Ҡырғыҙстан тураһында бик йылы хәтирәләр һаҡлайым. Ҡырғыҙҙар менән аралаша-аралаша, уларҙың башҡорт халҡына бик яҡын, туғандаш халыҡ икәненә инандым. Оҡшашлыҡ аш-һыуҙа ла, һөйләштә лә, тышҡы ҡиәфәттә лә, холоҡта ла ярылып ята. Был илдә һине туғанлыҡ тойғоһо ташламай.

Юлда йөрөгәндә ыңғай тәьҫораттар ҙа, кире тойғолар ҙа кисерелә. Ҡайһы саҡта үҙең өйрәнгән мөхитеңдән шул тиклем ныҡ айырылған мөхиткә барып инәһең. Оошондай айырмалыҡтарҙан сығып, Ер шарының ҙур, киң икәнен, халыҡтарҙың йәшәү урыны ни тиклем төрлө-төрлө булыуын аңлайһың. Монголияла беҙҙе игесиге булмаған сүллек, ҡырағай, ҡырыҫ мөхит уратып алғайны. Ауылдар араһында юлдар ҙа юҡ - йүнәлештәр генә төҫмөрләнә. Машинанда 200-300-әр саҡрым ара үтәһең - берәй автомобиль түгел, йәйәүле осраһа, шәп әле. 360 градусҡа әйләнеп ҡарайһың - кеше әҫәрен күрермен тимә. Беҙҙә, киреһенсә, кеше аяғы баҫмаған урындарға юлығыуы ситен, тип сағыштырып ҡуяһың. Башҡортостандың иң төпкөл урмандарында аҙашһаң да, берәй тау башына артылһаң да, киҫеп ташланған ағастарға, электр бағаналарына тап булаһың. Ә Монголияла - киңлек. Ғаләм киңлеге. Ә кеше был киңлектә ҡом бөртөгө генә, тигән аңлауға киләһең. Ҡайһы бер кешеләр үҙҙәрен ҙур итеп, "алпамыша" итеп хис итә. "Алпамыша"лыҡ кешенең үҙенә лә, тәбиғәткә лә, эргә-тирәһендәге кешеләргә лә зыян килтерә.

Кешенең иң ҙур хатаһы - үҙен тәбиғәттән өҫтөн һанауы бит. "Алпамышалыҡ" шунан килә. Тәбиғәт менән кеше мөнәсәбәте - әсә менән бала мөнәсәбәте кеүек. Тәбиғәттән өҫтөн булырға ярамай. Монголия ише ҡырыҫ тәбиғәтле урынға барыу аңды "тәҙәтеп" ебәрәләр, дөрөҫөрәк юлға баҫырға ярҙам итәләр, тип уйлайым. Ғөмүмән, рәнеп, ошо ҡартатайымды күреп-белеүсе ололар менән һөйләшә торғас, уның тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә эйә булдым. XIX быуаттың 2-се яртыһында тыуып, 1946 йылда 87 йәшендә донъя ҡуйған ҡарт ҡартатайым Ғаумулла ла йылҡысы булған. Уның хужалығында йөҙләп баш йылҡы иҫәпләнгән. Беренсе Бөтә донъя һуғышында ҡатнашҡан. 1937 йылдарҙа "кулак" мөһөрө һуғылып, мал-мөлкәте, шул иҫәптән йылҡылары, тартып алынған. Оло йәштә булыуы арҡаһында ғына һөргөнгә ебәрелмәй ҡалдырылған. Ғаумулланың улы, минең ҡартатай, атайымдың атаһы, ғүмер буйы Сибай карьерында эшләне. Уның үҙенең ҙур хужалығы юҡ ине. Әммә ул йәшәгән йорт ихатаһындағы арбалар, күсәрҙәр, тәгәрмәстәр ҡасандыр был ғаиләнең йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүе тураһында һөйләй ине...

...Ике йыл элек күңелдең иң төпкөлөндә ойоп, оҫҡон көтөп ятҡан булмышым уяндымы ни: ата-бабалар шөғөлөн дауам итергә булып киттем. Машинам менән Өфөнән Ирәндеккә сығам да китәм, сығам да китәм. Урман-тауҙарҙы бер итеп гиҙәм, утлап йөрөгән йылҡы өйөрҙәрен осраһа, уларҙы күҙәтеп, ләззәт алам... Йәй аҙағында бер ағайҙың 15 йәш бейәһен һатып алыуымды әлеге булмышымдың тышҡа бәреп сығыуы тип аңларға кәрәктер. Шуларҙы үстереп алып киләм бына. Ирәндектең көнсығыш битләүендә тибендә йөрөгән малдарымды Рәүеф исемле бик яуаплы бер ағай ҡарай. Йылҡыларҙы һарайға бикләмәйбеҙ - тибендә йөрөтөү уларҙың һаулығы өсөн яҡшы, тип иҫәпләйем. Башҡорт тоҡомло бит улар, сыҙамлы, аҙығы - аяҡ аҫтында. Бәлки, быйыл яҙға ҡолондар ҙа килтерә башларҙар. 2018 йылға иһә, малҡайҙарҙың бөтәһе лә ҡолонлар, тип көтәбеҙ. Ҡуртымға бер ферма алдым. Ялан кәртәһенә бесән килтереп ауҙарҙым. Һарайы ла бар...

***ДЕНИС ӨМӨТБАЕВ:***

*Беҙҙең алдыбыҙҙа мөмкинлектәр шул тиклем күп. Ул мөмкинлектәр үҙебеҙҙең булмышыбыҙ, онотолған кәсептәребеҙ менән бәйле. Ул йылҡысылыҡты ла, ҡымыҙ бешеүҙе лә, ат бәйгеләрен дә, беҙҙең милләткә, төрки донъяһына хас булған төрлө онотолған башҡа кәсеп-шөғөлдәрҙе лә үҙ эсенә ала.*



сәйәхәт ҡылыу менән бәйле уйҙарымдың иге-сиге юҡ...

**► Денис, һине йылҡысылыҡ менән дә шөғөлләнә, тинеләр. Һин - ҡала егете. Ҡала егеттәре ауыл хужалығы тармағына ҡыҙыҡһыныу белдереп бармай шикелле. Ә һине нимә этәрҙе икән был шөғөлгә?**

- Йылҡысылыҡты, беҙҙең ҡанға һеңгән шөғөл, тип әйтһәм, һис кенә лә арттырыу булмаҫтыр. Мине лә "ҡан тартыуы" әйҙәгәндер был шөғөлгә. Йылҡы малын бала саҡтан үҙ иттем. Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡартатайым, әсәйемдең атаһы, мине йыш ҡына бейәһенә атландырып йөрөтә, малдар тураһында төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләй торғайны. Үҙем дә мал-тыуар, кәртә-ҡура тирәһендә уралыуҙы әллә ни күрә инем. Ҡолондан тибелгән, ат өҫтөнән ҡолап төшкән, битем-башым күгәреп йөрөгән саҡтарым да булғылаһы. Был ваҡиғалар ҙа минең аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуымды һүрелдермәне.

Был ҡыҙыҡһыныуымды дөрләтеп ебәрергә тағы бер ваҡиға сәбәпсе булды. Атайым яғынан Ғаумулла исемле ҡарт ҡартатайым тураһында яҙма сығанаҡтарға, документтарға юлыҡтым бер саҡ. Уларҙы өй-

✓ *Ул бейә минең көтөүемдә йөрөй, тәрбиәләнә. Уның ике ҡолоно акцияла ҡатнашыусыға дивидент рәүешендә беркетелә. Бейәне ҡарау ҙа, ҡолондарҙы бер йәшкә тиклем аҫрау ҙа тулыһынса минең яуаплылыҡта була.*



# МӨМКИНЛЕКТӘРЕБЕҘ БИК КҮП,

## кәсептәребеҙ менән бәйле

Бала саҡта, Ғәҙелшаның бейек бер ҡаяһында йорт һалып, хозур тәбиғәт мөйөшөндә йәшәһәң ине, тип хыялландым. Бөгөн, нисек кенә сәйер тойолһа ла, шул хыялым тормошҡа ашыу сигенә яҡынлап килә шикелле. Өй һаласаҡмын, тип үк әйтмәһәм дә, йылҡыларым шул төбәктә йөрөгәс, унда берәй йәйләү төҙөргә кәрәк буласаҡ бит инде.

**▸ Йылҡысылыҡҡа бәйле башҡа проекттарың да бик ҡыҙыҡлы бит һинең, Денис. Мәҫәлән, 2016 йылда үткән "Өфөфорум" йәштәр мәғариф сараһында шуларҙың береһен тәҡдим иткәйнең…**

- Эйе, был форумдың "Умарта" тип аталған проекттар оҫтаханаһында үҙемдең "G-ребенок" (G-көс билдәһе, "көслө бала" мәғәнәһендә) тип аталған яңы проектымды тәҡдим иттем һәм баһалама комиссияһы ағзаларынан хуплау һүҙҙәре ишеттем. "G-ребенок" - балала һөйләп үтәйем. Интернет киңлектәрендә краудфандинг системаһына ҡоролған "Планета.ру" тигән сайт бар. Унда үҙеңдең проект-фекерҙәреңде урынлаштыраһың һәм уларҙы бергәләп атҡара торған кешеләрҙе эҙләп итәһең. Минең проектым "Башҡортостанда традицион йылҡысылыҡты тергеҙеү" тип атала. Бөгөн күп кеше атлы булырға хыяллана. Тик ул хыялын нисек тормошҡа ашырырға белмәй. Атты һатып алырға мөмкин ул, ләкин уны артабан ҡайҙа торғо? Ә мин атлы булырға хыялланыусының ошо теләген хәл итәм дә инде. Проектта ҡатнашыусы минең менән килешеү төҙөй һәм бер бейә һатып алыуға аҡса күсерә. Ул аҡсаға мин бейә һатып алам, уға номер һуғып, реестрға индерәм. Артабан ул бейә минең көтөүемдә йөрөй, тәрбиәләнә. Уның ике ҡолоно акцияла ҡатнашыусыға дивидент рәүешендә беркетелә. Бейәне ҡарау ҙа, ҡолондарҙы бер йәшкә тиклем төрлө онотолған башҡа кәсепшөғөлдәрҙе лә үҙ эсенә ала. Уларҙы тергеҙеп, яңы кимәлгә сығарып, донъяға күрһәтергә, тигән маҡсатыбыҙ бар. Һуңғы ваҡытта ошо йүнәлештә эшләйбеҙ. Мәғлүмәтте ишара итеп еткерәм. Ҡыҙыҡһыныусылар булыр, үҙ юлдарын эҙләр, табыр, тим...

**▸ Заман йәштәренә үҙ эшен тап милли кәсептәргә нигеҙләп башлау нимәһе менән отошло?**

- Уның яҡшы һөҙөмтәгә мотлаҡ килтерәсәк икәнен аңларға тейешбеҙ. Мин бөгөнгө көндә, мәҫәлән, башҡорт ҡорт балы етештереп унмаған бер кешене лә белмәйем. Умартасылыҡ менән бәйле бар кәсептәрҙе тергеҙергә кәрәк беҙгә. Ул - беҙҙең булмышта. Шулай уҡ йылҡысылыҡ, таш, ағас эше, балаҫ һуғыу менән шөғөлләнеүселәр араһында ла уңышлы кешеләр бар, тип әйтә алам. Кәсептәребеҙ бик күп. Ата-бабаларыбыҙ тире эшкәртеп, ҡәнәғәтһеҙлек менән уңҡынға батҡансы, ҡәнәғәтләнеү менән юғарыға артылыу кәрәк, тип уйлайым.

**▸ Һин әле рухи кимәлдә туғандаш, фекерҙәш кешеләр туплау ниәте менән янып йөрөйһөң. Ә үҙеңдең шәхси тормошоңда нисегерәк, йәнкәййәнәшеңде таптыңмы әле?**

- Өйләнгәнһеңме, юҡмы, тип һорауығыҙмы? Юҡ, өйләнмәгәнмен. Ул алдан планлаштыра торған эш түгел, ә үҙ ваҡыты менән була торған хәл, тип уйлайым.

**▸ Ә шулай ҙа һинең сикһеҙ хыялдарың араһында ғаилә ҡороу тураһындағыһы ла һәм уны үҙеңсә күҙаллауың да барҙыр?**

- Әлбиттә, мин үҙ милләтем эсендә булған никахтар яҡлымын. Тормош-көнкүрештә, йәки берлектәге эш-шөғөлдә кем менән булһа ла ҡороп булалыр. Әммә ғаилә ҡороуҙың нигеҙ-

- Башҡорттоң "Атың барҙа ер таны, атаң барҙа ир таны" тигән мәҡәле бар. Эйе, әсәй кеше балаға милли рух таныта, атай кеше уға ир таныта. Шунлыҡтан, атайҙары балаларына иң тәүҙә ир булып танылырға тейеш. Кем ул ир? Ул - ғаиләһен дә, нәҫелен дә, милләтен дә, илен дә ҡурсалаусы көслө зат. Ҡыҙ бала атаһы өлгөһө аша ирҙең ниндәй булырға тейешлеген дә таный. Күп ҡыҙҙар ғүмер буйы үҙенең яҙмышына яҙғанын эҙләй. Тик кемде эҙләүен аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмай. Атай ҡурсыуында үҫкән, атаһы ысын ир-егет өлгөһө күрһәткән ҡыҙҙарға иһә тормош юлдашын һайлауы ниндәйҙер кимәлдә енелләшә. Ә ир бала өсөн атай бөтөн яҡлап - кеше менән аралашыуҙан башлап, төрлө тормош мәсьәләрен хәл итеүгә тиклем - өлгө, остаз.

Шуға күрә балаларына биологик атай-әсәй булыу ғына етмәй, ә донъяла йәшәүгә яраҡлаша, бар нәмәне үҙ төҫөндә күрә белгән, алдына маҡсат

ларға әсә һөтөн алыштырырлыҡ бейә һөтө етештереү проекты. Бейә һөтөнөң составы әсә һөтөнөң составына оҡшаш икәне сер түгел. Минең проекттағы тәҡдим шундай: бейә һөтөн ҡымыҙ менән генә түгел, ә саф килеш, һаумал килеш балаларға эсереү уларҙы һаулыҡтырыуға булышлыҡ итәсәк. Һыйыр йә кәзә һөтөнән етештерелгән ризыҡтар күп осраҡта балала аллергия тыуҙыра. Ә бейә һөтө, составында казеин бик әҙ булғанлыҡтан, гипоаллерген һанала. Күп кенә Европа илдәрендә, әйтәйек, Австрияла, Францияла, Германияла һәм Нидерландтарҙа бейә һөтөн балалар аҙығы етештереүҙә лә, косметикала ла күптән ҡулланалар. Киләсәктә "G-ребенок" - Башҡортостан брендтарының береһе булып китергә тейеш, тип ышанам. Был бик еңел генә тормошҡа аша торған проект түгел - бәлки, уны атҡарыу бер нисә йылға ла һуҙылып китер. Һәр хәлдә, һөҙөмтәһе буласаҡ.

Йылҡысылыҡ менән бәйле тағы бер проектым тураһында аҫрау ҙа тулыһынса минең яуаплылыҡта була. Бер йәштән һуң хужаһы ҡолондарҙы алып китә, һата ала йәиһә миңә ҡуртым хаҡын түләй ҙә, ҡолондары көтөүҙә йөрөүҙә дауам итә. Был проект сентябрь аҙаҡтарында ғына барлыҡҡа килгәйне. Өс ай эсендә ҡырҡтан ашыу кеше ошо акцияға ҡушылды, йәғни төрлө күләмдә проектҡа үҙ өлөшөн индерҙе. Уларҙан алты кеше берәр бейә өсөн аҡса күсерҙе. Һәр хәлдә, был идея менән ҡыҙыҡһыныусылар табылды һәм мин, милләттәштәребеҙҙе берләштерер идея тәҡдим итеп, уларҙы тоҡандырып ебәрә алыуыма ҡыуанам.

Беҙҙең алдыбыҙҙа мөмкинлектәр шул тиклем күп. Ул мөмкинлектәр үҙебеҙҙең булмышыбыҙ, онотолған кәсептәребеҙ менән бәйле. Улар менән ҡыҙыҡһыныусы бер мин генә түгел. Беҙ, әүҙем йәштәр төркөмө, милли кәсептәрҙе тергеҙеү буйынса ҙур ғына проект әҙерләйбеҙ. Ул йылҡысылыҡты ла, ҡымыҙ бешеүҙе лә, ат бәйгеләрен дә, беҙҙең милләткә, төрки донъяһына хас булған көндән төрлө әйберҙәр теккән. Бөгөн берәү ҙә ошо шөғөлгә тотонмаған әле. Ғөмүмән, тиндәр араһында тиң булып йәшәү өсөн бороңғо кәсептәрҙе тергеҙеп, лайыҡлы көн итә алабыҙ икәнде аңларға ваҡыт етте беҙгә. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәҫ икәненә иманым камил.

Хәйер, матди һөҙөмтәһе булһын, тип кенә эшләргә ярамайҙыр был эштәрҙе. Мәҫәлән, кеше үҙ булмышына яҡын бер шөғөлдә бирелеп, яратып эшләнә, һөҙөмтәһе берәү генә булмаясаҡ. Төп һөҙөмтәһе - күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек. Икенсенән, табышы, килеме лә була әле уның. Уныһы - икенсе дәрәжәләге һөҙөмтә. Әгәр ҙә кеше табышына, килеменә икенсе дәрәжәләге һөҙөмтә итеп ҡараһа, башҡарғанының күңеленә ҡәнәғәтләнеү, рәхәтлек килтереүен үҙе өсөн өҫтөнөрәк ҡуйһа, яҡшыраҡтыр ҙа тип уйлайым. Кеше күпме генә эшләмәһен, һирәк осраҡта ғына матди яҡтан тулыһынса ҡәнәғәт була.



ендә икенсе ҙур маҡсат ята: милләтте һаҡлап ҡалыу һәм милләттең һанын арттырыу. Был маҡсатты, әлбиттә, үҙ милләтендәге кешеләр менән генә атҡарып була. Бөгөн рухлы йәштәр күп. Улар әлеге мәсьәләгә лә яуаплыраҡ ҡарайҙар. Мин дә шундайҙар рәтендәмен. Милли рух, туған тел балаларға күберәк ҡатын-ҡыҙҙан, әсәнән күсә, тип уйлайым. Шуны күҙәтергә тура килә: ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙә үҫкән балалар барыбер әсәйҙәре телен үҙ итеүсән. Мәҫәлән, башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнгән егеттәребеҙҙең балаларының башҡортса һөйләшеп йөрөгәне бик һирәк күренеш. Был аңлашыла ла. Әсә кеше күкрәк һөтө аша үҙенең генә түгел, ә әсәһенең, өләсәһенең, тотош милләтенең булмышын балаһына күндерә. Мәҫәлән, флешканы компьютерға ҡуйбыҙ - бөтөн булған мәғлүмәт флешкаға күсә. Йырҙар башҡортса икән, улар флешкаға нисек бар, шул килеш күсә. Икенсе төрләгә әйләнмәй. Бала менән әсәнең бәйләнеше лә шуның кеүек. Ҡатын-ҡыҙҙар - милли рухты, милләтте төп һаҡлаусылар, тигән һығымтаға киләм. Тимәк, балаларыңдың милләтендә дауам итеүселәр булыуын теләйһең икән, үҙ милләтең ҡыҙына өйләнергә тейешһең! Был һәр башҡорт егете өсөн үтәлергә тейешле мотлаҡ ҡағиҙә, ҡанун!

**▸ Башҡорт ғаиләһендә атай ҙа бик яуаплы, абруйлы урын биләй. Беҙ ул яуаплылыҡты күтәрергә лә әҙер булырға тейешбеҙҙер. Был турала ни уйлайһың?**

ҡуйып, шул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бар көсөн, һәләтен, тырышлығын һала алған шәхестәр тәрбиәләүсе атай һәм әсәй булыу мөһим. Күп кеше, баланы үҙем өсөн табам, тип уйлай, ә мин бындай фекер менән килешмәйем. Уйлауымса, беҙ балаларҙы бар донъя өсөн яралтабыҙ. Әгәр ҙә беҙгә тәбиғәт тарафынан шундай мөғжизә яралтыу мөмкинлеге бирелгән икән, бала табыуҙы үҙең өсөн генә эшләнә торған ғәмәл тип күҙ алдына килтереү мөмкинме?.. Бына шундай урыҡ-һурыҡ уйҙарым, фекерҙәрем ғаиләнең роле тураһында. Ғаилә ҡорғас, улар тағы ла нығыраҡ аныҡлана, асыҡлана, камиллашалыр, тип уйлайым...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Денис Өмөтбаевка: "Замандың уңышлы башҡортон һин нисек итеп күҙ алдына килтерәһең?" - тигән һорауҙы бирмәгәнмен икән. Әммә әңгәмәбеҙ барышында ул һорауға яуап алынды, буғай. Заман башҡорто, Денис һымаҡ, үҙ алдына маҡсат ҡуя белә, яңынан-яңы өлкәләр менән ҡыҙыҡһына, үҙ-үҙен камиллаштырыу өҫтөндә эшләй, донъя гиҙә, күргәндәрен сағыштырып, һығымталар яһай, эш-шөғөл юҡ, тип, ҡул ҡаушырып ултырмай, ата-бабаларҙың традицион шөғөлдәрен тергеҙеү менән янып йөрөй, ул шөғөлдәрҙе заман технологиялары, мөмкинлектәре менән яраштыра. Әлеге әңгәмәлә Денис аша заман башҡортоноң башҡа сифаттары ла һынлана, уларҙы тураһында үҙегеҙ уҡығыҙ һәм… матур өлгөгә эйәрегеҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ауылдағы күпселек кеше кеүек, Рифат та русса белмәй, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе генә аңлай, ә әрләү, оят һүҙҙәрҙе ирҙәрҙән, урамдағы үҫмер малайҙарҙан ғына ишетә (атаһы бер ҡасан да һүгенмәне).***

Март баштарында Миңзифаның хәле ҡырҡа насарланды. Хәҙер мейес башынан да төшә алмай, өшөнө. Тышта аҡман-тоҡман ҡоторҙо. Аҙашып ҡуйыр, тип Рифатты йылға арьяғына ҡоро-һары артынан сығарырға ҡурҡты.

- Кәртәне емер... Атайың ҡайтҡас, яңыны ҡуйыр әле...

Рифат кәртәне һүтте, кипкән ағастарҙы ҡырҡты. Тәүҙә ҙур мейескә, унан плитәгә яҡты. Өй эсе йылынды.

Хужалыҡтағы эштәрҙән бушаған сәғәттәрҙә Рифат ҡурайҙан йырға оҡшаған тауыштар сығарырға тырыша, күҙҙәренән йәштәре аҡҡансы өрә, әммә ҡурай уны һис тыңларға теләмәй. Кәңәш һорап, Шәйәхмәткә барырға оялды.

Бер көн әсәһе уны янына саҡырып алды ла, ауыр тын алып, былай тине:

- Улым, Камиләгә барып кил әле, миңә һикегә төшөргә ярҙам итһен.

Йомошон әйткәс, Камилә:

- Мейес башында үлеп ята алмай инде, - тине.

- Юҡ, үлмәй ул! - тип ҡысҡырҙы Рифат.

- Үлмәй, үлмәй! Тик һөрәнләмә.

Камила менән икәүләп Миңзифаны яйлап ҡына төшөрөп, таҙа түшәккә һалдылар. Камилә картуф бешерҙе лә ҡайтып китте. Кисенә Рифат әсәһенең урынына ятты. Бәләкәй сағында ошо мейес башына менергә һәм торба артына йәшенергә атлығып тора торғайны. Ул саҡта ла бында тараҡандар йәшәне. Һуғыш алдынан атаһы уларҙы ағыулап бөтөрҙө, хәҙер яңынан әйләнеп ҡайттылар. Рифат улар менән татыу, улар зыянһыҙ, ҡандала һымаҡ тешләмәйҙәр. Көндөҙҙәрен торбаны уратып һырып йоҡлайҙар, төнөн ашарға эҙләп таралышалар.

Миңзифа тамам хәлһеҙләнде, хәжәтенә лә көскә стенаға йәбешеп кенә йөрөй. Ул улының йөҙөнә оҙаҡ текәлеп ҡарай.

- Мин һине өйләндерермен, ейән-ейәнсәрҙәр булыр, уларҙы ҡарашырмын, тип уйлай торғайным, - әсәһе тынды. - Рифат, бына ошо йырҙы хәтереңдә ҡалдыр. Атайың менән ошо йырҙы яраттыҡ. Күкрәк ауыртҡас, элекке тауыш юҡ инде. - Һәм әсәһе хәлһеҙ тауыш менән һағышлы оҙон көйҙө йырланы.

Кеше уларға бик һирәк инә. Хатта Камилә лә уларҙы онотҡан һымаҡ. Тик Азаттың әсәһе, өй аша ғына күрше Кәримә апай хәл белеп сыға. Азат шулай уҡ атайһыҙ - унан бына нисә йыл инде бер ниндәй ҙә хәбәр юҡ.

- Ауылда Миңзифаның әллә күпме туған-тыумасаһы йәшәй, шуларҙың берәйһе әсәйеңде йыуышырға ярҙамға керһәсе, - тип аптырап һөйләнә Кәримә. - Бер үҙем йыуындыра алмайым шул, мин дә аслыҡтан саҡ һөйрәлеп йөрөйөм. Аллаһы Тәғәләне оноттолар.

Рифат осраҡлы ғына ололарҙың һөйләгәнен ишетте: улар әсәһенән чахотка йоҡтороуҙан ҡурҡа. Марганец руднигынан килгән фельдшерҙың "Өйөгөҙҙө таҙа тотоғоҙ, балалар менән бер ҡашығаяҡтан ашамағыҙ, үпкә ауырыуы хатта ишек тотҡаһы аша ла йоғоуы ихтимал, ауырыу янына килгәндә ҡулдарығыҙҙы мотлаҡ йыуығыҙ", - тип әйткәненән һуң бигерәк тә ҡурҡа башланылар.

Нисектер бер ваҡыт Рифат әсәһенән һораны:

- Әсәй, һин бер йырыңда ниндәйҙер Шәншәриф ҡалаһы тураһында йырланың. Ул ҡала ҡайҙа ул?

- Белмәйем, улым. Ул йырҙы мин өләсәйеңдән ишеткәйнем. Унда ҡыш булмай, тигәйне. Мин икенсе ҡаланы, Сәмәрҡәндте беләм. Атайың һөйләне. Унда ла ҡыш булмай, алмалар, хөрмә үҫә.

- Ә ул ҡала беҙҙең ауылдан йыраҡмы?

- Йыраҡ, тине атайың, көньяҡта.

- Ә көньяҡ ҡайҙа?




Әсәһе йүткерә башланы, сепрәгенә төкөрҙө лә көс-хәл менән:

- Мин йүткергәндә эргәмә килмә, - тине.

Бер ваҡыт ҡурайға башы ауыртҡансы өрә торғас, көйгә оҡшаш тауыш сығарҙы. Быға аптыраны ла, ҡыуанды ла. Тауышты иҫендә ҡалдырҙы һәм бармаҡтары менән алмаш-тилмәш баҫа-баҫа, яңынан ҡабатланы. Баҡһаң, берсә юғары, берсә түбән тауыш сығарыу һәләтенә эйә икән был музыка ҡоралы. Хәл киске яҡҡа, мейес башында булды, шатлығынан көтмәгәндә үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡлап киткән. Иртән уяныу менән маҡтанырға ниәтләнеп, әсәһенә һөрәнләне:

- Әсәй, тауыш сыҡты, ҡурай уйнай!

Әммә әсәһе яуап бирмәне. Икенсе әйткәндә лә өндәшмәне. Өй эсендә һис булмағанса ғәжәп тынлыҡ ине.

Рифат мейестән төштө, һике янына килде: әсәһе йоҡлай, күҙҙәре йомоҡ, тын алғаны һиҙелмәй. Рифат унын йөҙөнә ҡағылды - һалҡын ине. Кистән мейескә яҡҡайны, иртәнсәккә өй һыуынған. "Әсәйем туңған", - тип уйланы ла Камиләгә йүгерҙе.

Камилә апаһы әсәһе, Тәслимә исемле ҡыҙы менән Пожар тауы итәгендәге күрше аймаҡта йәшәй.

- Әсәйем туңған! - тип ҡысҡырҙы Рифат тупһанан уҡ.

- Ниңә ҡысҡыраһың? Нисек туңған? Кистән мейесеңә яҡмағайныңмы ни?

- Яҡтым. Йөҙө һыуыҡ. Йүткермәй ҙә.

Камилә бер мәлгә тораташтай ҡатып ҡалды, әйтерһең дә, ҡапыл ғына бер ере ауыртты, шунан ыңғырашҡан өн сығарҙы, ҡабаланып йөрөргә тотондо.

- А-а-й, а-а-й, ҡалайтып ҡына күмермен икән? Туң ерҙе кем ҡаҙыр? Нимә тораһың, бар ҡайт! Мейесеңә яҡ, һыу йылытырға ҡуй, Ғәйшә әбейгә кер, әсәйем үлде, тиң...

Һуңына Рифат аймаҡтың кендек әбейе Ғәйшәнең, күршеһе Кәримәнең әсәһен һикенән эскәмйәгә күсереп һалып йыуғандарын, унан аҡ кәфенгә төрөп, кире һикегә һалғандарын иҫләмәй ҙә тиерлек. Йоҡларға Кәримәләргә китте. Ғәйшә әбей мәйет янында яңғыҙ ҡалып, йыназа уҡыны.

Иртәгәһенә ҡәбер ҡаҙырға кәрәк ине. Ер ике метр ярымға тиклем туңғайны, июнь еткәс кенә ирейәсәк...

- Бригадирға бар. Әсәйеңде ерләһен, - тине Кәримә иртәнсәк.

Рифат бригадирҙы ҡапҡаһы төбөндә, төнөн һалған көрттө көрәп, юл ярған ерендә тап итте.

- Шәрифулла бабай, әсәйем үҙен күмергә ҡушты.

Әсәһе үлгәнгә шаңҡыған, зиһене тарҡалған Рифат бутала ине. Быға тиклем йәшәгән донъяһы емерелде лә ике донъя хасил булды һымаҡ ине уға. Хәҙер ул үҙенә бөтөнләй ят яҫылыҡта йәшәй башланы төҫлө. Әсәһе менән Камиләнең тауыштары бер-береһенә бик оҡшаш, бригадирға бар, тип, моғайын, әсәһе әйткәндер. Аңы менән аңлай: әсәһе юҡ. Нисек инде ул юҡ? Кисә генә бар ине, бөгөн юҡмы? Артабан унһыҙ нишләр? Ул аҡ кәфенгә төрөнөп, һикелә ята...

- Нимә, нимә? - бригадир аптырап, ниндәйҙер ят ҡараш менән Рифатҡа текәлде.

- Әсәйем үлде, - тине Рифат. - Күмергә кәрәк.

Ҡарт өндәшә алмай торҙо, шунан асыуланғандай өндәште:

- Нисек? Бына һин миңә әйт, нисек? Мин үҙем ул туң ерҙе ҡаҙа алмайым. Әбей-һәбейҙе, ҡатын-ҡыҙҙы, малайҙарҙы ҡушайыммы? Бөтәһе лә ауырыу, ас. Оҙаҡламай үҙем үләм, мине кем ерләр икән? - ул көрәген ихатаһына индерҙе лә кире сыҡты һәм тынысыраҡ тауыш менән: - Әйҙә! - тине.

Өйҙәренә Камилә менән күршеләре Кәримә килгәйне. Бригадир һике янына атланы, берауыҡ башын эйеп, өндәшмәй торҙо, ҡул һырты менән күҙен һөрттө.

- Ниндәй ҡатын ине! Ниндәй ғаилә ине! Барыһы ла көнләшә торғайны, - тине лә тышҡа сыҡты.

Ярты сәғәттән өйҙәре тапҡырына егеүле ат килеп туҡтаны. Ингәс, бригадир тыныс ҡына тейешле күрһәтмәләр бирә башланы. Кәримә менән мәйетте иҫке балаҫҡа уранылар ҙа, сығарып, санаға һалдылар. Рифат сана ситенә сүгәләне. Камилә менән Кәримә өйҙә ҡалды. Урамдан барғанда уларҙы бер кем дә оҙатманы, ҡапҡаларҙан бер кем дә ҡараманы, тәҙрәләрҙән бойоҡ йөҙҙәр генә шәйләнде...

Ҡапҡа бағаналары ҡыйшайған зыяратҡа ингәс, ҡар өҫтөнән сығып ятҡан ҙур таш янында туҡтанылар.

- Бына ошонда ята һинең олатайҙарың, - тине бригадир. - Әйҙә, ярҙамлаш.

Әсәһенең кәүҙәһе еңел генә ине. Уны таш янына һалдылар ҙа ҡапҡаға йүнәлделәр.

- Ҡасан күмәләр һуң? - тип һораны Рифат.

- Күмерҙәр. Бер мәйет тә ер өҫтөндә ҡалмай.

Рифаттың әсәһен ҡалдырып, зыяраттан һис сығаһы килмәй ине унын. Үҙен белә-белгәндән бирле бергә булдылар. Ҡайтһа - өйөндә юҡ. Бынан ары бер ҡасан да булмаясаҡ.

- Мин атлап ҡына ҡайтам, - тине ул һәм сананан төшөп ҡалды. Яңынан зыяратҡа инәйем тигәйне лә, үҙен саҡ тыйып, ауыл яғына өҫтөрәлде.

Камилә:

- Беҙҙә йәшәрһең, - тине.

Рифаттың өйҙән бер ҡайҙа ла бараһы килмәй ине, шулай ҙа өндәшмәне. Һыйырҙы апаһы үҙенә алып ҡайтып китте. Баҙҙа әҙерәк картуф бар ине. Уныһын да алыр, моғайын.

- Яҙға картуф сәсерһең, орлоғоң бар, - тине апаһы һәм одеалды, яҫтыҡты алды. Әсәһе ятып үлгән матрасты ихата артына сығарҙы ла, яндырҙы.

Хәҙер землянка кеүек бәләкәй генә өйҙә улар дүртәү булып китте. Һике әллә ни киң түгел. Өләсәһе яҫтыҡтар, одеалдар өйөлгән һандыҡ эргәһенән ятты. Беренсе төндә Рифатты һикегә һалманылар. Рифаттан өс йәшкә олораҡ өс туған апаһы Тәслимә:

- Минең менән ятмаһын, беттәре күсә, - тине.

- Иртәгә мин уның кейемдәрен мунсала бешерәм, үҙен дә йыуындырам, - тине Камилә апаһы һәм Рифатҡа урынды стена менән өҫтәл араһында торған эскәмйәгә йәйҙе.

Икмәктәре юҡ ине. Әрсемәй генә картуф ашанылар, мәтрүшкә сәйе йәки ҡара көлсә менән ҡатыҡ эстеләр.

- Бына ниндәй икмәк ашайбыҙ, - тине Камилә апаһы. - Картуф менән кәбәк тә алабута. Алабутанан тәнең тартышасаҡ. Ҡурҡма. Башланыу менән аяҡ-ҡулдарыңды ҡуҙғатырға, һелкетергә тотон.

Бәләкәй өй күп утын да талап итмәне. Бер ҡосаҡ ҡайын ярҡалары өйҙө мунса кеүек йылыта ине. Ә ҡайындар ауылдан ярты саҡрым самаһында ғына. Һуғышҡа тиклем был ҡайындарға тейергә ҡәтғи тыйыла ине, хәҙер ауыл тирәһендәге бөтә ҡайындарҙы ла йығалар.

Камилә бригадирҙан ат һорап алып, Рифат менән урманға барҙы. Ағасты ул үҙе йыҡты, Рифат ботап торҙо. Был утын бер айға етәрлек ине. Мунса яҡтылар. Апаһында йәшәй башлағас, Рифат уның элек уйлағанса уҡ һәйбәт булмағанын күрҙе. Әүәле апаһы уны ярата һымаҡ ине, тауышы ла, ҡарашы ла, мөнәсәбәте лә икенсе булды. Хәҙер асыулана башлаһа, тауышы ҡурҡыныс, дорфа, тупаҫҡа әйләнә. Етмәһә, ҡурайын яратмай. Ә Рифат бер сама тауыш сығара ғына башлағайны.

- Иртәнән кискә тиклем шул һыҙғыртҡысҡа өрәһең... Урам тиҙәккә батҡан. Ҡурайыңды һындырам да утҡа яғам, - тип ҡурҡытты апаһы. - Атайың да йырлап ҡына йөрөнө, ә йортоғоҙға солан эшләп ҡуя белмәне.

Ҡурайын ситкә ҡуйып, Рифат ихатаны тиҙәктән таҙартырға тотондо. Әсәһе бер ваҡытта ла былай тауыш күтәрмәне, тиҙәк өсөн уны бер ҙә битәрләмәй торғайны.

Бер ваҡыт утын бысалар ине. Кәкере, етмәһә ботаҡлы ҡайын козлала йүнләп ятмай, әйләнә-борола, тештәре күптән үткерләнмәгән бысҡы йә туҡтай, йә һикереп, өҫкә ҡалҡа. Хәле булмағанлыҡтан, Рифат уны йүнләп тарта ла алмай.

- Үҙеңә тарт, миңә этмә! - тип асыулана апаһы, ят, уҫал тауыш менән. - Һин ир кешеме, әллә юҡмы? Инәнде!

Ауылдағы күпселек кеше кеүек, Рифат та русса белмәй, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе генә аңлай, ә әрләү, оят һүҙҙәрҙе ирҙәрҙән, урамдағы үҫмер малайҙарҙан ғына ишетә (атаһы бер ҡасан да һүгенмәне). Шуға ла ул тамам аптыраны, кәмһенде, бысҡыны ташланы ла өйгә инеп китте. Өйҙә өләсәһе генә, Тәслимә мәктәптән ҡайтмаған. Өләсәһе, һәр ваҡыттағыса, һикелә ултыра, тиҫбеләрен тарта. Ул насар күрә.

- Нишләп улай иртә ҡайттың? - кереүсене ул Тәслимә тип уйланы, ахыры.

- Өләсәй, был мин, - тине Рифат. - Өләсәй, апайым мине оятһыҙ урыҫ һүҙҙәре менән әрләне.

Өләсәһе берауыҡ өндәшмәй торҙо, шунан һәр һүҙҙе һуҙып:

- Улым, етемдәрҙе яратмайҙар инде ул. Кил әле яныма. - Өләсәһе һөйәкле бармаҡтары менән уның йөҙөн һыйпаны ла һораны. - Әсәйең итле аш ашатмаймы әллә?

- Әсәйем үлде бит! - тине Рифат.

- Бөтә кеше лә үлә. Беҙгә күптән ингәне юҡ. Әйт, инһен, уға әйтәһе һүҙҙәрем бар.

- Әсәйем үлде! - тине Рифат. Был юлы ҡысҡырып уҡ ҡабатланы.

Шунан әсәһенең иҫке пальтоһынан бәләкәйләтеп тегелгән пальтоһын, һарыҡ тиреһенән тегелгән атаһының бүреген кейҙе, ҡурайын алды ла өйөнә ҡайтып китте.

**Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 1-се һанда).**

✓ *Рәсәй каскадерҙар ассоциацияһы ағзаһымын. Әлеге мәлгә 40-тан ашыу картинала төштөм. Уларҙың иң аҙаҡҡыларының береһе режиссер Андрей Кравчуктың "Викинг" нәфис фильмы әле генә экрандарға сыҡты.*



*ИЖАДХАНА*

# ХЫЯЛЫҢ ТОРМОШҠА АШҺЫН, ТИҺӘҢ...

## тәүҙә үҙ-үҙеңде еңергә кәрәк



**Башҡорт милли театры тарихында Уильям Шекспирҙың Ромеоһын беренселәрҙән булып БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Илшат Йомағолов уйнай. Үткән быуаттың 70-се йылдарында Шәүрә Муса ҡыҙы Мортазина ҡуя сәхнәгә был мөхәббәт трагедияһын. Бөгөнгө геройыбыҙ хәҙерге башҡорт театры Ромеоһы. Шулай уҡ кино актеры ла ул, каскадер ҙа, уҡытыусы ла. Ни өсөн башҡорт театры актеры ижад итеү өсөн Мәскәүҙе һайлаған? Һөнәрҙәре араһында ҡайһыны күңеленә яҡыныраҡ? Рәсәй театр сәнғәте институты - ГИТИС һәм Бөтөн Рәсәй дәүләт кинематография университеты - ВГИК-тың пластик дисциплиналар уҡытыусыһы Роберт ЙЫЛҠЫБАЕВ менән әңгәмәбеҙ ошолар хаҡында.**

### Ныҡышмаллыҡ та бәхет

Беренсе тапҡыр сәхнәгә бейергә сыҡҡайным, тыуған районым Ейәнсурала төрлө смотрҙарҙа ла ҡатнашып йөрөнөм. Һуңынан Абзанда музыка мәктәбе асылды ла, мин унда баянда уйнарға өйрәнә башланым, тик уҡытыусыбыҙ оҙаҡ тотҡарланманы, әммә ноталар өйрәтеп китте. Етенсе класта уҡығанда мәктәпкә ҡурайҙа һыҙғырта белгән бер егет уҡырға килде. Унан ҡурай һыҙғыртырға өйрәндем дә, нота белгәс, уҙаллы уйнай башланым. Артист булыу теләге бар ине, бер ваҡыт Өфө хореография колледжына имтихан биреп, хатта Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүселәр йыйғанда ла бәхетемде һынап ҡараным - алманылар. 9-сы класты тамамлап, Өфө сәнғәт училищеһына ҡурай буйынса уҡырға инеп маташтым, тағы үтә алманым. Ошонан һуң сәнғәткә тартылыу бөттө, мин спорт менән шөғөлләнә башланым.









Журналист булам, тип йөрөгәндә ҡайҙандыр Милли йәштәр театры өсөн студенттар йыйылар тип ишеттем дә, Өфө дәүләт сәнғәт институтына киттем. Думбыра сиртергә өйрәнгәйнем, думбыра, ҡумыҙ аҫып, билбауыма ҡурай ҡыҫтырып алдым, бейеп күрһәттем - шулай уҡырға инеп киттем, Таңсулпан Бабичева курсында уҡыным. Бик баҫалҡы егет инем, был уҡыу йорто минең һәләттәремде лә, үҙемде лә асты. Ярай әле, актер булам тигән хыялыма ҡул һелтәп ҡуймағанмын, тип ҡыуанам хәҙер. Аҙаҡ М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында эшләп йөрөгәндә институтта уҡытып та йөрөнөм.

Әсәйем, атайым, апайым менән ағайым да - уҡытыусылар. Һөнләм әлегә уҡып йөрөй. Атай-әсәйемә рәхмәтлемен, мәктәптә - уҡытыусы, өйҙә атай менән әсәй була белделәр. Улар менән яҡшы дуҫтарбыҙ, көн һайын шылтыратышып торабыҙ. Кәләшем Лилиә Өфө ҡыҙы, Мәскәү дәүләт консерваторияһын тамамланы. Ҡыҙыбыҙ үсеп килә.

### Мәскәүгә! Мәскәүгә!

Мәскәүгә уҡырға барырға теләк күптән бар ине. Теләк - бер, уны тормошҡа ашырыуҙы нимәнәндер башларға кәрәк шулай ҙа. Бер көн институтҡа дәрес үткәрергә килһәм, Земфира Хәмзә ҡыҙы Хөсәйенова: "Нимә, Чеховтың персонаждары кеүек, "Мәскәүгә! Мәскәүгә!" тип йөрөйһөң? БДПУ-ға барып, аспирантураға уҡырға инеү өсөн минимумдар тапшыра башла", - тине. Чеховтың апалы-һеңлеле өсәүе Мәскәүгә сығып китеү өсөн ихтыяр көсө тапмай, мин был хыялымды тормошҡа ашырҙым. Өйрәнгән, иң мөһиме, яратҡан һөнәреңде ҡалдырыу һәр кемгә ауыр бирелә. Театрҙа эшләп, сәхнәнең тәмен тойоп өлгөргән актерға былдай ҡарар ҡабул итеү икеләтә ҡыйыныраҡ. Студент саҡта Зөлфәр Наил улы Әхмәтов фехтованиенан уҡытты һәм был сәнғәт төрөнә һөйөү уяна алғайны. Театрға килгәс тә төрлө сәхнә хәрәкәттәрен спектаклдәрҙә әүҙем ҡуллана инек. Ошо йүнәлештә һайлап, ГИТИС-тың сәхнә оҫталығы кафедраһына аспирантураға индем. Етәксем - Өфө егете, Айҙар Заһит улы Закиров. Кафедрала тағы бер башҡорт бар, ул - Мәләүез егете, актер, каскадер Рөстәм Минлебаев. Рөстәм дә минең кеүек ГИТИС-та ла, ВГИК-та ла уҡыта. Шулай уҡ Эстрада-цирк училищеһында эшләйем, үткән уҡыу йылында 160-тан ашыу студентым булды.

### Хәүефле, әммә ҡыҙыҡлы

2012 йылдан алып актер-каскадер булараҡ киноға төшә башланым. Рәсәй каскадерҙар ассоциацияһы ағзаһымын. Әлеге мәлгә 40-тан ашыу картинала төштөм. Уларҙың иң аҙаҡҡыларының береһе режиссер Андрей Кравчуктың "Викинг" нәфис фильмы әле генә экрандарға сыҡты. Данила Козловский, Светлана Ходченкова, Игорь Петренко кеүек актерҙар менән эшләргә тура килде. Бынан тыш, был фильмға мин фехтование белгесе булараҡ саҡырылғайным.

Каскадер эше ҡыҙыҡлы ла, хәүефле лә. Һәр хәрәкәтеңде иҫәпләргә, кәүҙәң менән идара итә алырға тейешһең. Хәйер, быны һәр артист белергә тейеш инде, сәхнә хәрәкәте дәрестәрендә ауыр трюктар менән булышмаһаҡ та, студенттарҙы өҫтәлдән, ултырғыстан, бер-береһе менән алышҡанда ҡоларға өйрәтәбеҙ. Өлкәнерәк курстарҙа шпага, ҡылыс менән фехтование дәрестәре инә. Физик әҙерлек тә мөһим каскадерға. Шуға ла күп кенә спортсылар килә был һөнәргә, шулай ҙа актер каскадер булһа, яҡшыраҡтыр, сөнки һуғышҡанда ысынлап һуҡмайһың, унда уйнарға кәрәк. Минең актер һөнәрем бында миңә ныҡ ярҙам итә.

Был донъяла һәр ваҡыт көрәш бара. Кемдер эргә-тирәһендәгеләр менән көрәшеп, көсөн юҡҡа сарыф итә, мин иһә үҙ-үҙем менән көрәшәм. Сөнки үҙеңде үҙгәртеп кенә донъяны үҙгәртеп була. Каскадерлыҡҡа килеүемде лә үҙемде һынап ҡарау, үҙемде еңеү, үҙ-үҙемә нимәлер иҫбат итеү, тип ҡабул итәм.

### Бар юлдар театрға илтә

Мин театрҙан бөтөнләйгә китмәгәнмен, уҡытыу эшем дә, фехтование ла актерлыҡты тулыландыра ғына. Сәхнә һағындыра, унан һуң Өфө дәүләт сәнғәт институтында театр актеры мәктәбе бик көслө. Таңсулпан Бабичева, Рима Харисовалар уҡытты беҙҙең курсты, улар биргән белемде Мәскәү уҡыу йорттары ла бирә алмай, тип иҫәпләйем. Был уҡыу йортонда етешмәгән белемде Мәскәүҙә алдым. Шуға ла үҙемде театрҙа уйнамаҫлыҡ актер, тип әйтмәҫ инем. Әлегә театрҙа үҙемде һынамай торам, сөнки миңә уҡытыу эшен ышанып тапшырған уҡытыусымдың өмөттәрен аҡларға тырышам. Киләсәктә иһә уҡытыу менән бергә кино һәм театр актеры һөнәрен берҙәй алып барырмын, тип уйлайым. Әле Мәскәү дәүләт академия оперетта театрында "Фанфан-Тюльпан" оперетта-мюзиклында бер ролем бар.

Милли йәштәр театрында уйнап киткәс, Мәскәүҙә миңә тәүҙә кино ҡыҙыҡыраҡ ине. Кино майҙансығына барып инһәң, күңелдә рәхәтлек тойғолары уяна һәм бына был минең яратҡан шөғөлөм тигән уйҙар тыуа. Театрҙа иһә кинолағы кеүек бер нисә дубль эшләү мөмкинлеге юҡ, шуға ла унда ҡаушау ҙа, ҡәнәғәтлек тә, адреналин да күберәк. Бөгөн шулай уҡ театрҙарҙа спектаклдәрҙә сәхнә һуғышы ҡуйыу буйынса махсуслаша башланым. Стәрлетамаҡ рус драма театрына Шекспирҙың "Макбет"ын ҡуйырға саҡырҙылар былтыр. Коми Милли музыкаль-драма театрында эшләп ҡайттым. Шулай уҡ фехтование, сәхнә хәрәкәте буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә үткәрәм. Республиканың театрҙары спектаклдәр ҡуйырға саҡырһа, шулай уҡ ҙур теләк менән ҡайтып эшләп китер инем. ГИТИС-та Америка, Англия студенттарын да уҡытам, уларҙы һуңынан сит ил кинолардарында күреп ҡалам, шуныһы менән дә ҡыҙыҡлы эшем. Студенттар минең милләтем менән дә гел ҡыҙыҡһына һәм башҡорт икәнемде бөтәһе лә белә.

### Өфөлә лә үҙ кеше

Өфө менән һаман да йылы ижади мөнәсәбәттә булыуыма шатмын. Ул мине үҫтерҙе, һәләттәремде асты. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына, уның етәкселәренә, режиссер Илнур Муллабаевҡа рәхмәтлемен, Шекспирҙың "Ромео һәм Джульетта" спектаклендә уйнарға саҡырып торалар, минең ролемә бер артисты ла тәғәйенләмәнеләр. Мин хәҙер 5 йыл инде саҡырыу булған һайын Өфөгә Ромеоны уйнарға килеп етәм. Рус театры менән сағыштырғанда, башҡорт театры хистәргә бай, темпераментлы уйыны менән айырылып тора, шуныһы менән яҡын ул миңә. Мәскәүҙә лә, Өфөлә лә үҙ кеше мин, Аллаһы Тәғәләгә мең рәхмәтлемен.

Үҙемде әлегә актер булараҡ өлгөргәнмен, тип тә әйтә алмайым. Бының өсөн актер юлын үтергә кәрәк, ә мин уны үҙләштереү өҫтөндәмен. Әлбиттә, Ромео минең өсөн ҙур роль, үҙемде күп яҡтан астым уның менән. Студент саҡта уйнаған ролдәр ҙә файҙа килтерҙе, М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса "Донъяның ярҙары икәү"ҙә - Кендек, А. Чеховтың "Безотцовщина"һында - Платонов, шулай уҡ "Йәләлетдин атай"ҙа (М. Кәрим), "Робин Гуд"та (А. Ганичев), "Ғилмияза"ла (Т. Ғарипова) ролдәр булды, бөтәһе 7-8 роль эшләп киткәйнем. Былтыр йәй Өфөгә ҡайтып, Булат Йосоповтың "Бабич" фильмында төшөргә лә насип булды. Унда мин 1-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, ротмистр Әмир Ҡарамышевты уйнайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Теләгең ихлас булһа, хыялдарыңды тормошҡа ашырыу өсөн бер ҡаршылыҡ та юҡ, ти Роберт. Иң мөһиме, үҙ-үҙеңә ышаныс һәм ныҡышмалылыҡ ҡына кәрәк. Уҡыш гәли йәнәптәре бары тик шундайҙарҙы ихтирам итә һәм ярата. Ысынлап та, әлеге мәлдә актер-каскадер, фехтование буйынса тәжрибәле белгес булараҡ емешле ижади осор кисергән башҡорт егете күптәргә өлгө була алыр ине. Нимә менән генә шөғөлләнмәһен, ул һәр ваҡыт ҡасандыр үҙе һайлап алған яҙмышы - сәнғәткә һәм башҡорт халҡына тоғро.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Ул тыумыштан һуҡыр булғанлыҡтан, гелән таяҡҡа таянып йөрөгән. Был таяҡ Фәниә апайҙан зикер ҙә әйттерә, доғаларҙы ҡысҡыртып уҡыта, сәждәгә һалып ҡуя, баш осонда әйләнеп дауалай ҙа...*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТУҠЛАНЫУЫҢА ИҒТИБАР ИТ

■ Оҙаҡ йәшәргә һәм йәш күренергә теләһәгеҙ, селенға бай ризыҡтар менән туҡланығыҙ. Немец ғалимдағы иҫбатлауынса, тап ошо микроэлементтың аҙ булыуы яман шеш үҫеше хәүефен барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ организмда ҡартайыу процестары тиҙләнә. Берлин клиникаһының эксперименталь эндокринология институты ғалимдары менән Брауншвейгтағы Техник университет белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡандағы селенопротеин аҡһымы башҡа аҡһымдар бүленеүҙә ҙур роль уйнай. Һуңғылары организмды ирекле радикалдарҙан һаҡлай, шуға ла селенопротеиндың түбәнәйеүе шунда уҡ насар эҙемтәләргә килтерә. Шулай уҡ ирекле радикалдарҙан һаҡланмаған организм тиҙ ҡартая. Бөгөнгө көнгә селен сығанағы булып аҙыҡ-түлек тора, уларға йомортҡа һарыһы, спаржа, бәшмәк, кукуруз, бразиль сәтләүектәре инә.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

■ Салат, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа төрлө йәшел тәмләткестәр ябығырға ярҙам итә, ти Италия ғалимдары. Рационды бындай йәшелсәләр менән тулыландырыу организмды кәрәкле күҙәнәклек менән байыта, аппетитты көйләргә ярҙам итә. Сөнки уларҙың составындағы фолий кислотаһы һәм К витамины инсулин бүленеп сығыуҙы яйға һала. Клетчатка иһә эсәктәр өсөн "щетка", токсиндарҙы сығара, аш һеңдеререүҙе тиҙләтә.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емеш-еләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның эҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти Австралияның Аделаида университеты ғалимдары.

■ Тәм-том яратыу насар ғәҙәт. Артыҡ килограмдарҙан тыш, ул тышҡы ҡиәфәттә сағылыш табасаҡ. Шәкәр молекулалары протеин һәм майҙарҙы үҙенә тарта. Был процесс тиренең тәбиғи ялтырауын, тонусын юғалтыуға, шулай уҡ һырҙарға алып килә. Матур булып ҡалырға теләүселәр шәкәрҙе йәшелсә-емеш, бал менән алыштырырға тейеш. Шәкәр шулай уҡ иммунитетты ла ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# УНЫҢ ДАУАҺЫ - БӘЙҒӘМБӘР ДАУАҺЫ

**Эш көнө тамамланып барғанда, телефон шылтыраны. Танышым: "Апайыма дауаланырға килгәйнем, килеп сыҡ, күрешеп-һөйләшеп ултырырбыҙ", - тигәс, эштән һуң яҙып алған адрес буйынса йүнәлдем. Бөрйән районынан килгән Көнһылыу апай Ҡотлобаева менән гәп һатҡан арала уның апаһы Фәниә ханым да ҡайтып инде.**



Фәниә Ибәтуллина халыҡ медицинаһына, үҙе әйтмешләй, һуң ғына килдем, тиһә лә, Аллаһы Тәғәләнең үҙ ҡануны һәм ул һәр нәмәне иртә лә, һуң да түгел, ваҡыты еткәс бирә. Моғайын, шуғалыр ҙа, уңышлы эшҡыуар ханым ҡапыл донъя артынан ҡыуыуын ташлай ҙа, дауалау эшенә тотоноп китә. Уның халыҡ медицинаһына килеү юлы оҙон да, мөғжизәле лә. Бер ваҡыт төшөндә уға әсәһе яғынан дүртенсе быуын олатаһының ҡәберен табып, уның рухына ҡорбан салырға ҡушалар. Ошо ваҡиғанан һуң ул 8 йыл буйына олатаһының ҡәберен эҙләй, быға тиклем осрашмаған туғандары менән табыша. Һәм, ниһайәт, былтыр Бөрйән районының Ғәлиәкбәр ауылында олатаһының ҡәберен барып табып, ҡорбан салдырып, аят уҡыта.

"Олатайым суфый булған, совет заманында уның шундай дәрәжәгә күтәрелеүен аңламағандар ҙа инде. Ул тыумыштан һуҡыр булғанлыҡтан, гелән таяҡҡа таянып йөрөгән. Вафатынан һуң да таяғын ташламағандар, иҫтәлек итеп, түрҙә һаҡлағандар. Ул таяҡтың ябай булмауын, ысын мәғәнәһендә суфый таяғы булыуын уны Фәниә апай ҡулына алғас ҡына аңланым", - ти Көнһылыу апай. Был таяҡ Фәниә апайҙан зикер ҙә әйттерә, доғаларҙы ҡысҡыртып уҡыта, сәждәгә һалып ҡуя, баш осонда әйләнеп дауалай ҙа...

Һуңғы йылдарҙа Фәниә ханым халыҡ медицинаһы алымдарын ныҡлы үҙләштерә, ләкин кешеләрҙе дауаларға ашыҡмай, башҡорттоң баҙнатһыҙлығымы - бары тик туғандарына ғына ярҙам итә. Дауаһының шифалы булыуы халыҡ араһында тиҙ тарала һәм уға дауаланырға килә башлайҙар. Учалы районында булғанында "Бәйғәмбәр медицинаһы" тигән китап ҡулына килеп эләгә һәм Фәниә апай шундағы ысулдарҙың береһе булған хижама - ҡан ағыҙыу менән ҡыҙыҡһынып, ошо һөнәргә уҡып, махсус сертификат ала. "Дауалағанда доғалар уҡыйым, - ти диндар ханым. - Доғалар, Бәйғәмбәребеҙ дауалаған ысулдар бик күп ауырыуҙарға ярҙам итә. Хижаманан тыш, ҡот ҡоям, һөлөк һалам, массаж эшләйем. Хатта халыҡ дауаларына скептик ҡараштағы булған кешеләр ҙә дауаланғандан һуң ҡарашын үҙгәртә".

Быға бер миҫал килтереү ҙә етә. Уның тураһында ишетеп ҡалған табип-дерматолог, профессор дауаға бармаған сирлеләрен дауалау өсөн Фәниә апайҙы саҡыртып ала. Оҙаҡ йылдар шул клиникала дауаланып та псориаз сиренән ҡотола алмаған бер полковник ышаныр-ышанмаҫ ҡына дауаланып ҡарарға була. Фәниә апай уға хижама тәғәйенләй. Бер ни тиклем сеанстан һуң, полковниктың аяғындағы псориаз ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға. Полковник, рәхмәт йөҙөнән, Фәниә апайға Менделеев урамында офис аса.

Фәниә апай үҙенең һәр саҡ олатаһының һаҡлауында икәнен тоя. Хатта бер ваҡыт, фатирына ҡараҡтар ингәс, уяныуп китә лә, тәүҙә шым ғына тыңлап ята, һуңынан тороп, ут ҡабыҙа. Ҡараҡ тәүҙә уға ҡарап ҡатып ҡала, һуңынан йән көсөнә ҡысҡырып, тоғон йөкмәп сығып ҡаса. Йыраҡ китеп өлгөрмәй ул, ярты сәғәттән ҡулға алына. Фәниә апайҙы был ҡараҡтың урлашыуы түгел, ә ни өсөн йән көсөнә ҡысҡырыуы ҡыҙыҡһындыра, шуның серен белгеһе килә. Ошо хаҡта полиция хеҙмәткәрҙәренә әйткәс, улар уғры менән һөйләшә һәм шундай яуап еткерә: "Ул ҡатындың артында бер ир кеше баҫып тора ине, шунан ҡурҡтым". "Ошо ваҡиғанан һуң олатайымдың мине һәр саҡ яҡлап, һаҡлап йөрөгәненә ныҡлы инандым, - ти Фәниә апай. - Нәҫелебеҙҙә уның үҙен көслө дауалаусы итеп иҫләйҙәр, ләкин уның был һәләте тик малайҙар яғына ғына тапшырыла килгән. Бәлки, ниндәйҙер урында быуындар сылбыры өҙөлөп, оҙайлы ваҡыттан, урау юлдарҙан һуң ғына миңә килеп еткәндер был һәләт..."

Был көндө миңә Фәниә Оморҙаҡ ҡыҙы эшләгән хижама сеансын күҙәтергә һәм хатта уны үҙемдә һынап ҡарарға насип булды. Хижама ғәрәп теленән "һурып алыу" тип тәржемә ителә. Йәғни ул капиллярҙарҙан ҡанды һурып ала. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе үк был ысулдың бик файҙалы булыуын, күп ауырыуҙарға шифа биреүен, ләкин билдәле нөктәләрҙе белеп кенә эшләргә кәрәклеген әйткән.

Элегерәк, иҫегеҙҙә булһа, өләсәйҙәр ҙә ҡан ағыҙыу ысулын ҡуллана торғайны (төньяҡ-көнсығышта уны мөгөҙ ҡуйыу тигәндәрен иҫләйем). Бөгөн төрлө тәжрибәләр үткәреп ҡарап, ғалимдар уның һөҙөмтәлелегенә хайран ҡалған. Ул ҡан баҫымын нормаллаштергән, лейкоциттар интерферонды (вируслы инфекциялар, рак күҙәнәктәре, хатта СПИД менән актив көрәшеүсе протеин) тиҫтәләрсә тапҡырға күберәк эшләп сығарған, ҡандағы тимер һәм эритроциттар һаны нормаға килгән һ.б.

Ҡан ағыҙыуҙан һуң шештәр, яман шештәр бөткән, эндокрин системаһы эшмәкәрлеге тергеҙелгән, тамырҙарҙың варикоз киңәйеүе бөткән. Был процедураны бөтөн тәнгә эшләргә мөмкин. Сүриә, Франция, Америка медиктары хижаманың иммунитетты нығытыуын һәм дауаланыуҙың ысынлап та дөрөҫ ысул икәнен белдерә. Был иһә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең: "Дауа - өс нәмәлә: бал эсеүҙә (борон бал ҡортоноң балын кәсәләп эскәндәр), хижамала һәм көйҙөрөп дауалауҙа", - тигәнен раҫлай. Ә инде арабыҙҙағы башҡаларҙан әллә ни айырылмаған, әммә Фәниә апай кеүек быуындан-быуынға тапшырылып килгән һәләткә эйә кешеләр, уны камиллаштырыусылар йәшәгәндә, башҡорттоң сирле булырға йәки киләсәккә көсһөҙ генофонд ҡалдырырға хаҡы бармы?

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# ҺАУЛЫҠ ХАҠЫН АҢЛАР ӨСӨН...



**Аллаһы Тәғәлә кешегә башҡа йән эйәләренән айырмалы аҡыл, уйлау һәләте биргән. Әммә бик йыш ошо оло бүләкте һанға һуғып бармайбыҙ бит. Бәлки, ошо тыңлауһыҙлығыбыҙ арҡаһында ул беҙгә тағы ла сағыштырып баһалауҙы ла өҫтәгәндер. Сөнки сағыштырып ҡарап ҡына беҙ нимәнеңдер ҡәҙерен белә, уның әһәмиәтен аңлай башлайбыҙ.**

Мин дә һау-сәләмәт сағымда һаулығыма артыҡ иғтибар бирмәй, организмыма артыҡ ҡолаҡ һалмай торғайным. Йәш ваҡытта бигерәк тә, ҡайҙа инде ул табиптарҙы тыңлау, хатта ата-әсәнең тылҡығаны ла бер ҡолаҡтан инә - икенсеһенән сыға. Шулай йәш ҡоралайҙай һикерәнләй-саба йөрөгән студент йылдарында тайып йығылып, ҡулымды һындырҙым. Һынды тип тә уйламайым, йә ҡаймыҡҡан, йә яңғыраған ғыналыр, тип үҙемде йыуатам. Тик травмпунктта, һынған, тинеләр һәм шунда уҡ гипс һалып ҡайтарҙылар. Йәш организм, тиҙ төҙәлә ул, тип үҙемде тынысландырһам да, нимәгә генә барып тотонһаң да ҡул кәрәк. Һыңар ҡул менән генә әллә ни ҡыйратып булмай икән. Хатта йоҡлағанда ла ҡулды баш аҫтына һалып ҡына, тәмләп йоҡлағы килә - юҡ, булмай. Бүлмәләш ҡыҙҙарҙың ҡулдарын баш аҫтына һалып йоҡлағанына көнләшеп ҡарай башланым хатта. Шуға ла: "Ҡыҙҙар, сәләмәтлегегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ, уның булғанда ғына ҡәҙере юҡ икән, булмағанда иһә, их, тип терһәкте тешләрҙәйһең", - ти башланым.

Был ваҡиғаға инде күп йылдар үтте, әммә ул миңә ғүмерлеккә һабаҡ бирҙе - барҙың ғына ҡәҙере юҡ икән. Шунан һуң үҙемдең һаулығыма иғтибарлы була башланым, организмдың һәр сигналын тыңлайым, уның талаптары буйынса йәшәргә тырышам. Һәм ул да үҙе хаҡында хәстәрлек күргәнемде тойоп, миңә рәхмәтле, күрәһең, хәҙер әллә ни борсомай, һин дә мин эшләй.

**Флүрә СӘЙЕТОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ВАҠЫТ ҠӘҘЕРЕН БЕЛЕҮ -

## шулай уҡ иңгә һалынған бурыс

**Ғүмер кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәле бер ваҡытҡа ғына бирелгән иң ҡиммәтле капитал. Ҡөрьәндең күп аяттарының мәғәнәһе кешеләргә, үҙ ваҡытын аҡыл менән файҙаланыуынан, файҙалы эштәр менән шөғөлләнеү-шөғөлләнмәүенән сығып, "килем ала" йә "зыян күрә" икәне тураһында иҫкәртеү ул.**

Мосолман үҙ ваҡытын Ислам ҡушҡан тәртипкә һала. Көн эсендә ул биш тапҡыр намаҙ уҡый. Көндәре лә, төндәре лә доғалар уҡыуға арнала. Бәйғәмбәребеҙ тормошо үҙе үк мосолманға эшен һәм ял ваҡытын ойоштороу өлгөһө ул. Ул аҙналыҡ эше тураһында көнләп һәм сәғәтләп план төҙөгән, айырым көндәргә айырым эштәр тәғәйенләп ҡуйған. Ә килеп тыуған проблемаларҙы мөмкинлеккә ҡарап башҡарған. Һәр бер эште үтәү өсөн уның айырым ваҡыты һәм мөҙҙәте булған.

Ваҡытты дөрөҫ һәм файҙалы итеп бүлеү - ул үҙе бер сәнғәт, тормошта уңыш ялауҙың бер шарты. Ошо талантҡа эйә булыу Исламда хуплана. Бәйғәмбәребеҙ: "Кеше ике нәмәне ваҡытында баһалай белмәй - ул һаулыҡ һәм буш ваҡыт",- тигән.

Көндәлек тормошта ваҡыт шулай бүленергә тейеш: бер өлөшө - Хоҙайға хеҙмәт итер өсөн, икенсеһе - лайыҡлы тормош нигеҙҙәрен тәьмин итер, хәләл ризыҡ менән туҡланыр өсөн, ә өсөнсө өлөшө уйланыр, фекер йөрөтөр өсөн.

Ауыр хеҙмәт көнөнән һуң кеше ял итергә, физик һәм рухи көсөн тергеҙергә теләй. Ял итеү - ул хәл алыу, юлды артабан дауам итеү, тормошондо яңынан күҙҙән үткәреү, анализлау өсөн ниндәйҙер бер туҡталыш һымаҡ. Ял ваҡыты эш ваҡыты һымаҡ уҡ мөһим, шуға ла сифатлы ял өсөн бөтөн шарттар тыуҙырырға кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр ял итеүҙе күңел асыуға тиңләй, ләкин улар икеһе ике нәмә. Буш ваҡыт шөғөлһеҙ ултырып, йөкләмәләрҙән, намыҫтан, ояттан азат булыу, тигәнде аңлатмай.

Иң яҡшы ял - ул шөғөлдәрҙе алыштырып тороу. Ауыр шөғөл еңеле менән алыштырыла. Ял мәлендә сәләмәт йоҡо ла кәңәш ителә. Изге Ҡөрьәндә, кеше өсөн иң файҙалы ял - ул йоҡо, тиелә. Ислам шулай уҡ спорт менән шөғөлләнеүҙе лә хуплай.

Аҡыл эйәләре: "Үткән ваҡыт - юғалған ваҡыт, киләсәк - билдәһеҙ, шулай булғас, беҙгә хәҙерге заман ҡала, һәм уны лайыҡлы йәшәп үткәрергә кәрәк", - ти.

Йәштәргә вәғәз һөйләгәндә бер ғалим: "Был донъя үҙгәреп тора. Уның менән бәйләмәгеҙ үҙегеҙҙе. Әммә уның ҡиммәте тап ошонда ла инде", - ти. Йәштәр: "Үҙегеҙ, был донъя үҙгәреп тора, тиһегеҙ, үҙегеҙ ошонда ла инде уның ҡиммәте, тиһегеҙ. Быны нисек аңларға?"- тип һораған. Яуап урынына ошо һүҙҙәр яңғыраған: "Был донъялағы тормош өс-биш көн йәшәгәнгә тиң. Ошо сәбәпле ул үҙгәреп тороусан. Ә бына киләсәк тормоштоң уңайлыҡтары үҙгәрешһеҙ һәм мәңгелек. Әммә был сикһеҙ ожмах уңайлыҡтары беҙҙең был донъялағы ҡылыҡтарыбыҙ менән бәйләнгән. Ошо сәбәпле, был донъяның ҡиммәте ҙур һәм кеше тормошо уның өсөн ҙур капитал һалыуҙарға тиң. Шуның өсөн ерҙә матур ҡылыҡтар ҡылһағыҙ, киләсәктә мәңгелек бәхеткә өлгәшерһегеҙ. Ә инде яуызлыҡ ҡылһағыҙ, был сикһеҙ ғазаптарға килтерер".

Бер саҡ бер дин әһеленә шундай һорау биргәндәр: "Кем һуң ул намыҫлы мосолман?" "Намыҫлы мосолман был тормоштоң ҡиммәтен белә һәм уны кәрәкмәгән нәмәләргә тотонмай, - тигән дин әһеле. - Ваҡыттың ҡәҙерен белә. Диндә тәрән өйрәнә һәм үҙе белгәндәргә таянып эш итә. Ул ялғанламай һәм ғәйбәт һатмай. Мосолман туғанының етешһеҙлектәрен йәшерә һәм уның хаталарын ғәфү итә. Бар кешене лә йәлләй. Сит кешеләр ғүмеренә, мөлкәтенә ҡул һуҙмай һәм абруйына, намыҫына йоғонмай. Ул тик үҙе менән генә була". "Нисек инде, үҙе менән генә була?" - тигән һорау яңғыраған артабан. "Эйе, мосолман үҙенең хаталары һәм гонаһтары тураһында уйлап, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенә. Изге мосолман берәүгә лә йөк булырға теләмәй, башҡаларҙың ауырлығын күтәрешә. Ысын мосолман башҡа кешеләрҙең һүҙендә лә, ҡылыҡтарында ла етешһеҙлек шәйләмәй. Үҙенең һәм башҡаларҙың ваҡытын ҡәҙерләй".

ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘЕБЕҘСӘ ТУҠЛАНАЙЫҠ!

# ЭСЕГЕҘ БУҘА -

## белмәҫһегеҙ ыҙа!



**Тарихтан билдәле булыуынса, башҡорттар үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас, йөннәткә тиң ерҙәребеҙҙә күпләп араҡы-шарап заводтары төҙөлә. Буҙаһы, һитә балы, ҡымыҙы, айраны менән көн күргән халыҡты ят эсемлектәргә күндереү төрлө саралар аша нисек тә тормошҡа ашырыла. "Тышы - быяла, эсе диуана, биленә бәйләгән алъяпҡыс - кеше нәфсеһен алдатҡыс" ағыуҙың зыяны тураһында иҫкәртеүҙәрен аңлылар: "Килде, ултырҙы, шуға йәнем ҡоторҙо", "Бер һауыттың эсенә бөтә әшәкелек һыйған" тигән йомаҡтарға бикләгән. Сөнки араҡыға ҡаршы асыҡтан-асыҡ ҡаршылашыуҙар аяуһыҙ баҫтырыла торған.**

Бәхеткә күрә, был замандар артта ҡалды. Хәҙер ыу менән хәләл ризыҡты айырыу-айырмау һәр кемдең үҙ намыҫында, үҙ иркендә. Алдыңғы ҡарашлы зыялыларыбыҙҙың тырышлығы менән халыҡ араһында һаҡланып ҡалған тәбиғи милли эсемлектәребеҙҙе әҙерләү серҙәре, йолалары тергеҙелде. Уларҙың ни тиклем шифалы, файҙалы икәнлеге тураһында мәғлүмәт тә етерлек. Үҙемә ҡалһа, "Йөйен айранһыҙ булма, ҡышын юрғанһыҙ булма", тигән ҡанундарға ярашлы заманда үҫеп ҡалдыҡ. Әлеге заман балаларын тыумыштан әүрәткән төрлө һуттар, лимонад, тархун, пепси, кока-кола һ.б. шыйыҡлыҡтарын эсеп ағыуланмаһыҡ. Ауыл ҡаймағына, ҡуйы ҡатыҡҡа үҙебеҙ йыйған еләкте болғап, тәмле иттереп тороп ашағанда, уны "йогурт" тип тә торманыҡ. "Милли аш-һыу", "милли эсемлек" тигән төшөнсәләр көн ҡаҙағына ҡалҡып сыҡҡас, өй шарттарында әҙерләү өсөн һис ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған буҙа тураһындағы мәғлүмәт туған телдәге баҫмаларҙа күренә башлау менән, уларҙы йыя барҙым. Әммә "йөҙ тапҡыр ишеткәндән бер тапҡыр күргән яҡшы", тиҙәр бит. Буҙаның һыйын иң тәүҙә мин Мәрйәм апай Бураҡаеваның өйөндә татыным, серҙәрен ентекләп һорашыу ғына түгел, әҙерләү тәртибен, ҡарап тороп, унан өйрәндем. Хәҙер инде биш йыл мин уны үҙем әҙерләйем, ғаиләм, яҡындарым, дуҫ-иштәрем, яҡташтарым менән уртаҡлашам, хатта һатыуға әҙерләйем. Белмәгәндәргә рецебын яҙып бирәм. "Буҙа эште боҙа", тип кәмселек күргәндәргә лә яуабым әҙер:

*Кемдәр эсмәй буҙа, шулар эште боҙа,*
*Ғүмере зая уҙа, тәне иртә туҙа.*
*Ә кем эсә буҙа, ҡаны уның ҡыҙа,*
*Һис тә белмәй ыҙа, бар эштә лә уҙа!*
*Ниәте лә таҙа, урап үтә ҡаза!*
*Әйҙә, эсәйек буҙа! Шундай шәп ул буҙа!*

Үҙендең изге ниәттәрең ҡушып әҙерләнгән яҡшы, сифатлы ризыҡ менән һыйлауҙан башлана бит ул кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү ҙә. Бушҡамы ни, халҡыбыҙҙа: "Килеп инде ҡоҙа, ултырттым мин буҙа"- тигән һамаҡлау бар. Минералдарға, аҡһымдарға бай һоло ононан, йә ярмаһынан әҙерләнгән был эсемлек, ысынлап та, иғтибарға һәм ихтирамға лайыҡлы! Туҡлыҡлы, шифалы, арзан буҙа өҫтәлебеҙҙән йәйен-ҡышын әҙәлмәһен ине! Уны бәләкәстән эсеп, күнегеп үҫкәндәр ситтән килгән ят эсемлектәргә ымһынмаҫ! Буҙа ҡалаларҙа йәшәүселәр өсөн бигерәк кәрәк тип уйлайым, магазиндан ҡатыҡ-кефир алғансы, буҙаның әсеһе яҡшыраҡ - ул үҫемлектән бит. Ә үҫемлектәрҙән барлыҡҡа килгән ризыктар организм өсөн файҙалы. Ҡыҙыҡһыныусылар өсөн иң ябай рецепт ошо:

6 литрлыҡ эмалле кәстрүлдә һыу ҡайнап сыҡҡас, 400 г һоло ярмаһы һалып, тағы ҡайнатаһың. Шунан һуң иң һүрән утта 40-45 минут болғата-болғата бешереп алғас та, эре тимер иләк аша иҙеп-һөҙөп сығараһың (алдан блендер менән иҙеп алһаң, еңелерәк була). Ҡуйыраҡ тойолһа, ҡайнар һыу менән самалап шыйыҡлап алаһың. Йылымыс хәленә ҡалғансы һыуытҡас, 1 стакан шәкәр, шунынса буҙа әсеткеһе өҫтәп, йылы менән ҡаплап, әсетергә ҡуяһың. Кис ҡуйһаң, иртәнгә әсеп, күпереп сыға. 1-2 көндә әсеп бөтөрөргә күҙ уңында тотһаң, бер нindәй ҙә май ҡушыу мотлаҡ түгел. Пластик бутылкаларға һалып, һыуытҡыста тотоу ҡулайлы. Мин үҙем буҙа эшләргә теләүселәргә һәр саҡ әсетке биреп ебәрәм, ә әсетке булмағанда 0,5 литр ҡымыҙ ҡушырға кәрәк.

**Рәшиҙә ҒИЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Ыңғай коммуникациялар

Бик йыш: "Беҙ бер нисек тә уртаҡ фекергә килә алмайбыҙ", - тигәнде ишетергә тура килә. Күпселек осраҡта кешеләр коммуникацияны яҙма йәки телдән әйтелгән һүҙ менән бәйләй икән, улар бер-береһе менән уртаҡ тел таба алмайбыҙ, тип уйлай. Ғәмәлдә, хәл-торош бөтөнләй икенсе. Беҙ даими рәүештә аралашабыҙ. Коммуникация процесы тел, мимика, ым, үҙ-үҙеңде тотоу, хатта өндәшмәү аша башҡарыла. Аралашыу һәләте нимәләр әйткән сағыбыҙҙа ғына түгел, хатта өндәшмәгәндә лә сағылыш таба. Көнбайыш мәҙәниәтенә ҡараусылар вербаль (телдән) булмаған аралашыуҙы үҫтерергә өйрәнмәгән. Ә икенсе мәҙәниәттәрҙә быға өҫтөнлөк бирелеүе мөмкин. Япондарҙа бының өсөн махсус һүҙ ҡулланыла - harrigay. Ул ике һүҙҙән тора - harri (ашҡаҙан) һәм gay (сәнғәт). Harrigay, тимәк, икенсе кешенең күңеленә инеү, уны, минималь күләмдә һүҙ ҡулланып, аңларға тырышыу тигәнде аңлата. Кеше үҙенең әйткән һүҙҙәре өсөн генә түгел, ә икенсе кешенең уның ымдары, манераһы, мимикаһы, тән хәрәкәте аша нимә әйтергә теләүен аңлауы өсөн дә яуаплы. Әгәр аралашыу буйынса ҡатмарлыҡтарығыҙ килеп тыуһа, бер хәҡиҡәтте үҙләштерергә бурыслыһығыҙ: тирә-яҡтағылар һеҙҙе аңламаған өсөн тап һеҙ яуаплы. Сәбәп фекерендә әйтеп биреү ысулында һәм вербаль булмаған коммуникацияларҙа. Барлыҡ проблемалар - ғаиләләге, эштәге, шәхестәр араһындағы аңлашмаусылыҡтар, хатта һуғыштар һеҙҙең икенсе кешенең фекерен аңлай алмауығыҙға барып тоташа. Башта шуны танығыҙ - башҡаларҙы үҙгәртә алмаһаҡ та, үҙебеҙҙең уларға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртергә һәләтлебеҙ. Аралашыу - ул мөнәсәбәттәрҙе күрһәтеү ысулы. Һүҙ - фекерҙәрҙең тышҡа сығыуы. "Аҡыллы кеше менән бер ултырып һөйләшеү тиҫтә йылдар китаптарҙы энәһенән-ебенә тиклем уҡыуға ҡарағанда ҡиммәтлерәк" тигән Лонгфелло. Партнерҙар бер-береһе менән уртаҡ тел таба алмаһа, никахҡа хәүеф янай. Бизнестағы күпселек проблемалар бизнес көрсөгө түгел, ә кеше менән аралашыу көрсөгө булып тора. Кешеләр бары тик тейешенсә мөнәсәбәттәр көйләй алмай. Барлыҡ тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, хеҙмәткәрҙәр аралаша белгән етәксене яҡшы етәксе тип һанай.

Һәр беребеҙ үҙенә күрә етәксе. Һеҙ ғаилә, бизнес, эш, мәғариф, дуҫлыҡ менән идара итәһегеҙ. Был өлкәләрҙәге уңыштың һәр береһе ыңғай коммуникация талап итә. Һеҙгә һөҙөмтәлерәк булыу өсөн бер нисә кәңәш.

Тыңлағыҙ! Аралашыуҙа тыңлауҙан да мөһимерәк бер нәмә лә юҡ. Тыңлай белеү аҡылығыҙ тураһында һөйләй. Барыбыҙ ҙа, яҡшы һәм иғтибарлы тыңлаусы яҡшы дуҫ та буласаҡ, тип уйлай. Беҙҙең заманда тыңлай белеү онотолған сәнғәткә әүерелгән. Әңгәмә барышында ҡайһы берәүҙәр һүҙен әйтеп ҡалыр өсөн пауза еткәнен көтөп ала алмай. Улар үҙҙәренең нимә әйтәсәген уйлап, әстән генә репетиция яһап, һеҙҙе бөтөнләй тыңламай ҙа.

Экстрасенсор ҡабул итеүҙе өйрәнеү шундай һығымтаға этәрә: әгәр һеҙ ниндәйҙер фекер ебәрһәгеҙ һәм уны ҡабул итеп алырҙай кеше булмаһа, был уй бөтөнләй юҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, уйҙы ебәреүсе һәм ҡабул итеүсе булырға тейеш. Был аралашыуға ла ҡағыла. Әгәр кемдер һеҙгә нимәлер һөйләй, ә һеҙ тыңламайһығыҙ икән, был һөйләшеү бөтөнләй булмаған.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ИҪКӘРТЕҮ



# КИҘЕҮҘӘН ҺАҠЛАН!

**Башҡортостанда киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм грипп эпидемияһы башланды.**

"Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөнгө көнгә республикала киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән 24 меңдән ашыу кеше ауырый, уларҙың һигеҙ мең самаһы өфөләр. Әлегә эпидемик тупһа өлкәндәр араһында күтәрелгән, әммә балалар араһында ла сирләүселәр һаны көндән-көн арта.

Өфөнөң Ашығыс медицина ярҙамы станцияһында мөрәжәғәттәр һәм шылтыратыуҙар һанының артыуын билдәләйҙәр. Әгәр былтырғы йылдың тәүге аҙнаһында киҫкен респиратор вирус инфекцияһы симптомдары менән тәүлегенә 100-ләгән кеше мөрәжәғәт итһә, 2017 йылда уларҙың һаны тәүлегенә 600-гә тиклем артҡан.

Эпидемия осоронда иҫкәртеү саралары бөтәһенә лә билдәле: күмәк кеше булған урында әҙерәк булыу, битлектәр менән ҡулланыу, саф һауала йөрөү, бүлмәләрҙе елләтеү. Һыуыҡ тейҙереүҙән һәм гриптан иң яҡшы һаҡланыу сараһы - һабынлап ҡулдарҙы йыш йыуыу һәм танау ҡыуышлығын сайҡатыу, айырыуса урамдан ингәс һәм йәмәғәт транспортында йөрөгәндән һуң. Ғаиләлә йәки хеҙмәт коллективында грипп менән ауырығандар булһа, иҫкәртеү маҡсатында вирусҡа ҡаршы дарыуҙар эсергә кәрәк.

Башҡортостанда Гонконг киҙеүе (H3N2), шулай уҡ РС-вирустар, парагрипп һәм аденовирустар лаборатор раҫланған. Бөтәһе киҙеүҙең 128 лаборатор раҫланған осрағы теркәлгән. Республика буйынса "Роспотребнадзор"-ҙың Башҡортостан буйынса идаралығында ошондай мәғлүмәттәр килтерелде. А штаммына (H3N2) түбәндәге билдәләр хас: ҡалтырата, баш, күкрәк тирәһе ауырта, аппетит юғала. Ҡайһы берҙә тымау барлыҡҡа килә. Бынан тыш, һалҡын тейеү билдәләре үҫешә.

Әйткәндәй, мәктәп уҡыусылары араһында киҫкен респиратор вируслы балалар өсөн пландан тыш ял кәрәк. Өфө ҡала округы хакимиәте грипп һәм киҫкен респиратор вируслы инфекцияның ныҡлап таралыуына юл ҡуймау маҡсатында мәктәп уҡыусылары өсөн профилактик каникулдарҙы 21 ғинуарға тиклем оҙайтыу тураһында ҡарар ҡабул итте.

Баш ҡала мэрияһында аңлатыуҙарынса, һуңғы көндәрҙә тотош ил буйлап миҙгел сирҙәре - грипп һәм киҫкен респиратор вируслы инфекцияһының эпидемик күтәрелеше теркәлә. Был ауырыуҙарҙы йоҡтормау ысулы - сирле кешеләр менән аралашмау, улар менән бер бүлмәлә булмау, бер үк һауа һуламау. Тап шуға күрә был ауырыуҙарҙың таралыу хәүефе осоронда мәктәптәрҙә уҡытыу процесын туҡтатыу сараһы күрелә. Ҡаланың дөйөм белем биреү учреждениеларында дистанцион уҡытыу алып барыласаҡ, тип билдәләнеләр Өфө ҡала округы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ГЕРОЙҘАРЫ




**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**15 ғинуар "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
**18 ғинуар "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+
**19 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+
**20 ғинуар "Ә мин ғашиҡ тағы..."** Илһөйәр Ғизетдинованың юбилей кисәһе 0+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 ғинуар "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+
**19 ғинуар "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу 12+
**20 ғинуар "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 ғинуар "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+
**15 ғинуар "Приключения" с огнем"** (Н. Шор), әкиәт. Башлана 12.00 0+
**19 ғинуар "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма 12+

**51-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Икмәк. Юлдашев. Сыйырсыҡ. Ғариза. Илаһи. Хыял. Зәрҡүм. Бәлә. Яугилде. Олуғ. Уҡыу. Алма. Лаяҡыл. Витте. Таһыл. Ваба. Алыш. Абаға. Ауыл. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Ильясова. Сталагмит. Иҙелбаев. Юлсы. Азамат. Рухи. Кодекс. Атаға. Бау. Бала. Ҡәлғә. Һуҡа. Клерк. Ғарҡ. Ғиззәтуллина. Опята. Илаҡ. Аламағолош.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (18) дүшәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:50 | 17:20 | 18:50 |
| 17 (19) шишәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 18 (20) шаршамбы | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 19 (21) кесе йома | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |
| 20 (22) йома | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:57 | 17:27 | 18:57 |
| 21 (23) шәмбе | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:59 | 17:29 | 18:59 |
| 22 (24) йәкшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:01 | 18:31 | 19:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *"Сыңрау торна" - өс бүлектән торған тәүге башҡорт балеты (1941). Фәйзи Ғәскәровтың либреттоһы "Сыңрау торна" башҡорт халыҡ риүәйәте нигеҙендә яҙылған. Музыканың авторҙары - Лев Степанов һәм Заһир Исмәғилев.*



СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ...

## "ҠЫРАҒАЙ" ФИЛЬМЫ



**Рәсәй киноһы йылы тамамланыр алдынан Өфөнөң "Родина" кинотеатрында "Ҡырағай" ҡыҫҡа метражлы уйын фильмының презентацияһы үтте.**

25 минутлыҡ фильмды "Башҡортостан" киностудияһы менән берлектә сценарий авторы һәм режиссер Фәрзәнә Утарбаева төшөргән. Яңы драма әсә менән ул мөнәсәбәттәренә арнала. Фильмдың төп тезисы "Әсә күңеле - балала, бала күңеле - далала" тигән башҡорт мәҡәленә тап килә. Төп ролдәрҙе Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары - СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова менән Артур Кәбиров башҡара.

Презентацияла картина авторы Фәрзәнә Утарбаева, ҡуйыусы оператор Тимур Ғәниев, Башҡортостан Республикаһы Кинематографсылар берлеге рәйесе Фәрит Ғәбитов, йырсы Айҙар Ғәлимов, Кинематографсылар берлегенең Йәштәр үҙәге етәксеһе Айнур Аҫҡаров, фильмдың бағыусылары һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре ҡатнашты. "Фильм беҙҙең ысынбарлыҡ тураһында. Был беҙҙең һыҙланыуыбыҙ, ул фильмдың башынан аҙағына тиклем тамакта төйөн булып торҙо", - тип фекере менән уртаҡлашты фильмды ҡарағандан һуң Айҙар Ғәлимов.

Фәрзәнә Утарбаева фильмдың идеяһын хуплаусы һәм уны төшөрөргә ярҙам итеүселәрҙең барыһын да билдәләп үтте. Фильмдың креатив продюсеры - Айнур Аҫҡаров, ҡуйыусы рәссамы - Айгөл Байрамғолова. Музыканы йәш композитор Айҙар Хәмзин яҙа, аэросъемкаларҙы Владимир Жилко башҡара. "Ҡырағай" фильмын Шишмә районында һәм Өфөнөң 21-се дауаханаһында төшөрәләр. Башҡорт телендәге фильм русса субтитрҙар менән тәьмин ителгән.

## УҢЫШТАР МЕНӘН УРТАҠЛАШЫП...



**Быйыл Өфөлә "Театр яҙы" республика фестивале һәм "Туғанлыҡ" халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивале үткәрелә.**

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе ярҙамсыһы Зилә Сәғәҙиева хәбәр итеүенсә, 20-26 апрелдә тәбәктәге бөтә театр вәкилдәре баш ҡалаға йыйыла. Әле театрҙарҙан ниндәй спектакль тәҡдим итеүҙәре тураһында мәғлүмәт йыйыла. Опера һәм балет театры менән Өфө Ҡурсаҡ театры сарала тәүгә ҡатнаша.

Фестиваль милли драматургияға арналған. Тамашасылар менән бергә спектаклдәрҙе Валентина Фёдорова етәкселегендәге баһалама ағзалары һәм театр тәнҡитселәре ҡараясаҡ. Сара барышында оҫталыҡ дәрестәре, актер клубтары, сәхнә әҫәрҙәрен тикшереү ойоштороласаҡ.

"Туғанлыҡ" халыҡ-ара төрки халыҡтары театрҙары фестивале иһә киләһе театр миҙгеленә, 9-16 сентябргә, билдәләнгән. Бынан алдағы фестиваль Өфөлә 2012 йылдың сентябрендә уҙғарылғайны. Ул саҡта баш ҡалаға 13 төрки телле илдәрҙән иң яҡшы театр коллективтары йыйылғайны.

## "ҮТКӘНДӘРҺЕҘ КИЛӘСӘК ЮҠ"




**Мәскәүҙә башҡорт актерҙары ҡатнашлығында "Юғалған васыят" тигән театрлаштырылған тамаша ойоштороласаҡ. Ҙур сара Crocus City Hall концерт залында 29 ғинуарға билдәләнгән. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тыуған көнөнә арнала. Сараны ойоштороусылар - Рәсәй Мөфтөйҙәр советы, Мәскәү мосолмандарының Диниә назараты.**

Тамашаға алты меңдән ашыу кешенең килеүе көтөлә. Төп ролдәрҙе билдәле театр һәм кино актерҙары: Татарстандың атҡаҙанған артисы, Рәсәйҙең дәүләт премияһы лауреаты Марат Бәшәров, театр һәм кино актеры Шамил Хаматов, актриса Бибигөл Аҡтан Суюншалина башҡара. Сарала М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт академия театры, И. Базоркин исемендәге Ингуш дәүләт драма театры, Ғ. Цадас исемендәге Авар музыкаль-драма театры, А. Салауатов исемендәге Дағстан музыкаль-драма театры актерҙары ҡатнаша. "3D элементтары менән театрлаштырылған тамаша тамашасыларҙы тарихҡа алып ҡайтасаҡ. Улар Ибн Фаҙлан һәм Салауат Юлаев, Мөхлисә Буби һәм Муса Бигиев эҙҙәренән ваҡыт буйлап сәйәхәт итәсәк. Мәҙәни сараның девизы - "Үткәндәрһеҙ киләсәк юҡ", - тип хәбәр итте ойоштороусылар.

## "СЫҢРАУ ТОРНА" ҠАЙТА...



**Өфөлә үтәсәк киләһе Нуриев фестивалендә "Сыңрау торна" милли балеты ҡуйыласаҡ.**

Спектаклдә сәхнә биҙәлешен яңыртасаҡтар, унын рәссам-ҡуйыусыһы Рифҡәт Арыҫланов буласаҡ, тип хәбәр итә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры директоры Илмар Әлмөхәмәтов. Рудольф Нуриев исемендәге Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивален майҙа үткәреү планлаштырыла.

"Сыңрау торна" - өс бүлектән торған тәүге башҡорт балеты (1941). Фәйзи Ғәскәровтың либреттоһы "Сыңрау торна" башҡорт халыҡ риүәйәте нигеҙендә яҙылған. Музыканың авторҙары - композиторҙар Лев Степанов һәм Заһир Исмәғилев. Премьераһы 1944 йылда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә үтә.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

## ТАҒЫ ЛА АБДРАЗАҠОВ!

**Танылған опера басы, Беренсе каналдағы "Голоса на миллион" фильмында төп геройҙарҙың береһен уйнаусы яҡташыбыҙ Илдар Абдразаҡов Рәсәй "Casta Diva" опера премияһы лауреаттарының береһе итеп танылды.**

Был хаҡта "Classical Music News" порталы хәбәр итә. "Йыл йырсыһы" номинацияһында жюри ағзалары уның өс эшен билдәләй: Зальцбург фестивалендә Шарль Гуноның "Фауст" операһында Мефистофель, Джузеппе Вердиҙың "Дон Карлос" әҫәрендә Филипп Икенсе (Рәсәйҙең Ҙур театрында дебют), Станиславский һәм Немирович-Данченко исемендәге музыкаль театрҙа Жак Оффенбахтың "Гофман әкиәттәре" операһында Линдорф, Коппелиус, Дапертутто, Миракль. Шулай уҡ "Casta Diva" премияһы лауреаты исеменә билдәле опера йырсылары Наталья Мурадымова, Дмитрий Ульянов, Татьяна Сержан лайыҡ булды. Рәсәйҙең Ҙур театрында Георг Генделдең "Роделинда" һәм Пермь опера һәм балет театрында Джузеппе Вердиҙың "Травиата" спектаклдәре билдәләнде. Дмитрий Хворостовский Опера кавалеры тип табылды.

## БЕҘҘЕҢ РАДИК БИТ УЛ!

**Популяр йырсы, Элвин Грей псевдонимы аҫтында сығыш яһаусы Өфө егете Радик Юлъяҡшин Татарстандың мәҙәниәт өлкәһендә "Йыл кешеһе" тип иғлан ителде.**

"Бизнес Online" фекере буйынса, был исемде ул Татарстан Республикаһының Дәүләт симфоник оркестры художество етәксеһе, дирижеры Александр Сладковский менән уртаҡлаша. Ике мәҙәниәт эшмәкәре лә 2,5 мең уҡыусы ҡатнашҡан тауыш биреүҙә башҡаларҙан ныҡ алға китеп, еңеү яулай.

Баҫма хәбәр итеүенсә, "башҡорт Джастин Биберы" тип йөрөтөлгән поп-башҡарыусы 2016 йылда Ҡаҙанда 14 концерт биргән. Элвин Грей былтыр "Татар йыры" фестивалендә лә, шулай уҡ Өфөлә, республиканың башҡа ҡалалары һәм районДарында ла уңышлы сығыш яһағайны.

Радик Юлъяҡшин бер нисә йыл дауамында Башҡортостанда "Йыл йырсыһы" номинацияһында еңеү яулай, "Башҡортостанда йыл хиты-2012" номинацияһында Гран-при яулай һәм башҡа наградаларға, исемдәргә лайыҡ була.

## ҒӘСКӘРОВСЫЛАР МӘСКӘҮГӘ ЙЫЙЫНА

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Мәскәүҙә сығыш яһарға әҙерләнә. Концерт 16 февралдә Чайковский исемендәге Концерт залында уҙасаҡ.**

Мәскәүҙә коллективтың иң яҡшы бейеүҙәрен үҙ эсенә алған "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" исемле программа тәҡдим ителәсәк. Ансамблдең художество етәксеһе Филүз Ҡаҙаҡбаев хәбәр итеүенсә, яңы ҡуйылған ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, ҡытай, мари бейеүҙәре күрһәтеләсәк, яңы "Тархандар", "Ете ырыу" башҡорт бейеүҙәренең премьераһы уҙасаҡ.

Данлыҡлы коллектив өсөн Чайковский исемендәге Концерт залында сығыш яһау хәҙер инде йолаға әйерелгән. Баш ҡала сәхнәһендә ижади отчет һәр ваҡыттағыса тамашасыла ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Гастролдәр сиктәрендә концерттар шулай уҡ Татарстан Республикаһында - Ҡаҙанда һәм Аҙнаҡайҙа уҙасаҡ. Ансамблдә билдәләүҙәренсә, өс концертҡа ла билеттар ноябрҙә үк һатылып бөткән.

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮҘӘР КӨТӘБЕҘ

**Ағымдағы йылдың тәүге айы "Салауат Юлаев" хоккей клубы өсөн көсөргәнешле булды. 3 ғинуарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклем юлаевсылар йәмғеһе 5 матч уҙғарып, ике осрашыуҙы үҙ файҙаһына тамамлаһа, ҡалған өсәүһендә еңеү яулай алманы.**

Яңы йылдағы беренсе уйында юлаевсылар күрше Татарстандың "Нефтехимик" командаһы менән көс һынашты. Матчтың төп уйын ваҡыты ла, өҫтәмә минуттар ҙа еңеүсене асыҡламаны, ә буллиттар буйынса хужалар көслөрәк булып сыҡты. Уйын һөҙөмтәһе 0:1.

Ә шул уҡ төбәктең икенсе командаһы - "Аҡ барс" - Өфө командаһын ҡыйрата алманы. Алыш ҡыҙыу барһа ла, ике команда ла бер-береһенә юл бирмәне. Һөҙөмтәлә, матч еңеүсеһе әлеге лә баяғы буллит ярҙамында билдәләнде. Осрашыу, юлаевсылар файҙаһына 1:2 иҫәбе менән тамамланды.

Тольяттиҙағы уйындың тәүге минуттарында уҡ Игорь Захаркин командаһына хужалар ике гол индерҙе. Беренсе тәнәфескә тиклем юлаевсылар бер гол менән яуап бирҙе. Икенсе осорҙа ла командалар берәр гол менән "алмашты". Ә өсөнсө осорҙа иһә "Лада" үҙ иҫәбенә тағы бер гол яҙып, матчтың еңеүсеһе исемен яуланы. Шулай итеп, иҫәп 4:2.

"Өфө-Арена"лағы "Спартак" менән уйын да тәүге минуттарҙа ҡунаҡтар файҙаһына бороолдо. Беренсе осорҙа "Спартак"тың 2 голына ҡаршы юлаевсылар яуап бирә алманы. Уның ҡарауы, икенсе осор тулыһынса хужалар ҡулында булды - Өфө командаһы көрәштәше ҡапҡаһына бер-бер артлы 4 шайба индереп, иҫәпте үҙ файҙаһына борҙо. Өсөнсө осорҙа ла командалар уяулыҡ һәм отҡорлоҡ күрһәтеп, берәр шайбаға хужа булдылар. Матч тамамланғанда, табло хужалар файҙаһына 5:3 иҫәбен күрһәтә ине.

Түбәнге Новгородтың "Торпедо"һы менән уйын "Салауат Юлаев" хоккей командаһы көйәрмәндәренең танауын бөтөнләй төшөрҙө, тип әйтергә була. Юлаевсылар ҡунаҡтар ҡапҡаһына беренсе осорҙа тик бер генә гол индерә алды. Ә "Торпедо" хужаларҙы 6 гол менән "һыйланы". Шулай итеп, осрашыу 1:6 иҫәбе менән тамамланды.

Шулай ҙа артабанғы осрашыуҙарҙа "Салауат Юлаев" һөҙөмтәле уйындар күрһәтеп, беҙҙе шатландырыр һәм үҙ көйәрмәндәренә байрам минуттары бүләк итер, тип ышанабыҙ. Барыһы ла егеттәрҙең үҙ ҡулында.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*✔ Өс ай ваҡыт үтер ҙә китер, ҡышҡы буранлы, борма юлдар буйлап тағы баш ҡалаға йыйылырбыҙ. Тик яҙыусылар ҡорон буш һүҙ һөйләп һәм тыңлап, ярым йоҡоло хәлдә үткәрергә хаҡыбыҙ юҡ.*



ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

# ЯҘЫУСЫ ВАЗИФАҺЫ -

## ул рух һағындағы яугир




**1993 йылда Мәскәүҙә "Русский язык" нәшриәтендә донья күргән "Башҡорт теленең һүҙлеге"н ҡарап ултырам. Яңы ғына тупһабыҙ аша аяҡ баҫҡан йылыбыҙ - әтәстеке. Йылыбыҙға исем биргән йән эйәһенә һүҙлек бына ниндәй ҡылыҡһырлама бирә: "Тауыҡтар ғаиләһенә ингән оҙон дуға ҡойроҡло, ҙур ҡыҙыл кикерекле, типке тырнаҡлы ата енесле ҡош; тауыҡтың ата енеслеһе". Көндәлек һөйләштә киң ҡулланылған, мәғәнәһен күпселек яҡшы аңлаған "Көҙгө әтәс" лаҡабын да ҡарайым. Һүҙлек буйынса был лаҡап "көс-ғәйрәтен күрһәтеп, шәп булып ҡыланған" кешегә ҡарата әйтелә.**

Төптән уйлап ҡарағанда, был лаҡап ерҙә йәшәгән ете миллиардтан ашыу кешенең һәр береһенә лә ҡағыла. Әммә мин, теманы тарайтып, һүҙемде Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә йүнәлтмәксемен. Сөнки 1994 йылдан ошо абруйлы йәмәғәт ойошмаһының ағзаһы булараҡ, һуңғы йылдарҙа унда барған тарҡалыу процесы күңелде ҡыра, зиһенде ҡайната.

Былтыр 25 декабрҙә баш ҡаланың Актерҙар йортонда үткән йыйылышта ойошма етәксеһе драматург Наил Ғәйетбайҙың, секция етәкселәренең отчеттарын тыңланыҡ. Сығыш яһаусылар йылдан-йыл ҡабатланған исем-шәрифтәрҙе телгә алыу, әҙәби процесты байҡау һәм баһа биреү менән генә сикләнде. Артабан Яҙыусылар берлеген 2 йылдан ашыу етәкләгән Наил Ғәитбай үҙ теләге менән эштән китеүе тураһында белдерҙе. "Һаулыҡ ҡаҡшаны" тигән классик сәбәп менән... Йыйылышта яңғыраған тағы бер хәбәр мөһимерәк, әлбиттә, сөнки ул киләсәккә, Башҡортостан яҙыусыларының иртәгәһенә ҡағыла: идара ағзаларының ҡарары менән 2017 йылдың мартынан да ҡалмай Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең сираттан тыш ҡоро уҙғарыласаҡ. Ҡорға әҙерлек эштәрен, уставҡа үҙгәрештәр индереүҙе рәйес вазифаһын башҡарыусы итеп альтернатив һайланған (дәғүәсеһе Айҙар Хөсәйенов) Зәки Әлибаев атҡарасаҡ.

Мин йыш ҡына бик ауыр, хәл иткес йылдарҙа Яҙыусылар берлеген етәкләгән Динис Бүләковты ихтирам менән иҫкә алам. 1995 йылдың майында әхирәткә күскән Динис Мөҙәрис улы, ҡыйыу "әтәстәрсә" алышып, ойошманың берҙәмлеген, абруйын һаҡлап ҡалды, матди хәлен яҡшыртты. Ул замандарҙа яҙыусы һүҙе ифрат ауыр тартты, уҡыусы күңелен генә түгел, ҙур-ҙур ишектәрҙе лә еңел асты. Шуға ла Яҙыусылар ойошмаһын Динис Бүләковтан һуң етәкләгән халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа был вазифаны атҡарыу сағыштырмаса еңелерәккә тура килде, ул БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты итеп тә һайланды.

Һуңғы 20 йыл кешелекте технологик үҫеш менән матди бейеклектәргә күтәрһә, интернет ярҙамында мәғлүмәт һаҙлығына батырҙы. Йәғни, интернеттағы мәғлүмәттең, иң-иң матур, аҡыллы һүҙҙәрҙең бик йыш һабын ҡыуығы булыуы, шуға өҫтәп, күпселек сәйәсмәндәрҙең дә күрәләтә күҙ буяуы хәҡиҡәти һүҙҙең, шулай уҡ яҙыусы һүҙенең дә бәҫен төшөрҙө.

Был бәлә, әлбиттә, кешелек цивилизацияһыныҡы. Әммә ул, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, кешелектең рухи таянысы булған яҙыусыларҙы, шулай уҡ Башҡортостан яҙыусыларын да урап үтмәне. Был хаҡта, бәлки, кемдер анығыраҡ фекер йөрөтөр, хәлде анализлар, ә минең әйтәһе һүҙем икенсерәк юҫыҡта. Һанаулы ғына өс ай ваҡыт үтер ҙә китер, ҡышҡы буранлы, борма юлдар буйлап тағы баш ҡалаға йыйылырбыҙ. Тик яҙыусылар ҡорон буш һүҙ һөйләп һәм тыңлап, ярым йоҡоло хәлдә үткәрергә хаҡыбыҙ юҡ. Минең төҫмөрләүемсә, үтә лә мөһим мәсьәлә булып түбәндәгеләр тора:

- Яҙыусылар берлеге власть өсөн көрәшә торған урын түгел. Яңғырауыҡлы булһа ла, ҡабатлайыҡ - яҙыусы рух һағында торған яугир. Тәрән борсолоу менән күпме яҙыусыларҙың сәйәси ҡорбан булғанын беләбеҙ. Был исемлеккә түрәлек өсөн көрәш ҡорбандары инмәй, әлбиттә.

- Яҙыусылар берлегенең, уның ағзаларының мөһим бурысы - власть менән халыҡ араһын яҡынайтыу. Түрәләргә ҡаршы тороп, уларҙы тик тәнҡитләп кенә халҡына хеҙмәт итеп булмай. Вертикаль милли идея - ул бөгөнгө көн талабы. Яҙыусы, түрә, халыҡты өс кимәлдәге ҡатлам итеп ҡабул итеү - хата. Беҙ берҙәм булырға тейешбеҙ.

- Яҙыусы - һүҙ оҫтаһы, шуға ла һүҙ менән үтә лә һаҡ эш итергә бурыслы. Яҙыусылар берлегенең һәр ағзаһы, һүҙ менән һаҡ эш иткән кеүек, бер-береһен дә һаҡларға һәм яҡларға бурыслы. Беҙҙең көс - берҙәмлектә.

- Яҙыусыларҙың сираттағы етәксеһе итеп XXI быуат телен һәм холҡон, уның үҙенсәлеген, шулай уҡ милли менталитетты аңлаған һәм һаҡлаған шәхесте һайларға кәрәк. Беҙгә "көҙгө әтәстәр" кәрәкмәй.

Шулай итеп, бына шундай фекерҙәремде еткерергә булдым ҡәләмдәштәргә. "Киске Өфө" баҫмаһы майҙан бирә икән, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең яҙыусы шөғөлө, вазифаһы, фиғеле тураһында, ойошмабыҙ эшен йәнләндереү, уны халҡыбыҙҙың рухи таянысына әйләндереү хаҡында фекер алышайыҡ.

**Тимер НИӘТШИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЗАМАНЫҢ НИСЕК БУЛҺА...

## бүркеңде шулай кей

Дошманды танырға өйрән - дуҫ кейемендә булмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Барыһын да аңларға тырышма - бер ни ҙә аңламаясаҡһың.

**(Судзуки).**

Мин үҙ яҙмышымдың хужаһымын, йәнемдең капитанымын.

**(Уильям Хенли).**

Ниҙелер танып белер өсөн дә, ниндәйҙер байлыҡҡа эйә булыр өсөн дә ғазапланырға кәрәк.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Ерҙә тамуҡ бар, тиһәләр, ул меланхоликтың йөрәгендә булыр.

**(Ричард Бартон).**

Тормош театрҙағы спектакль кеүек: уның күпме дауам итеүе түгел, ә яҡшы уйналыуы мөһим.

**(Луций Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бик үк йәш булмаған бер сауҙәгәр сит яҡтарҙан һылыу бер йәш кәләш алып ҡайта. Уларҙың баллы айы бер йылға һуҙыла. Бына сауҙагәргә тауар артынан йыраҡ илгә сәфәр сығырға ваҡыт етә. Әлбиттә, уға йәш кәләшен ҡалдырып китеүе еңел бирелмәй, уны төрлө икеләнеүҙәр, көнсөллөк тойғоһо солғап ала. Шулай ҙа сәфәр сыҡмай сараһы булмай сауҙагәрҙең һәм ул китер алдынан өйҙәге өлкән генә хеҙмәтсеһенә кәләшен күҙәтеп, ҡарап торорға бойороҡ бирә.**

**Өс айҙан һуң бик күп тауар һәм йәш ҡатынына бүләктәр тейәп, өйөнә ҡайтып төшә сауҙагәр. Уны өй тупһаһында баяғы хеҙмәтсеһе илай-илай ҡаршы ала. Ул хужабикәнең бүлмәһендәге ҙур һандыҡта уның һөйәркәһе йәшеренгәнлеге тураһында хәбәр итә. Икеләнеүҙәренең дөрөҫкә сыҡҡанын ишеткән сауҙагәр тәрән ҡайғыға бата. Ишек тупһаһына ултырып, ни эшләргә икән, тип уйлана башлай. "Әгәр хәҙер шаһиттар саҡырып, ҡатынымдың бүлмәһенә инеп, һандыҡты асһам, ә унда уның һөйәркәһе булмай сыҡһа, ҡатынымды бик ныҡ рәнйетәсәкмен һәм ул минән китәсәк, ә мин унһыҙ йәшәй алмайым. Әгәр мин һандыҡты асһам һәм унда ысынлап та сит ир бикләнгән булһа, шәриғәт буйынса ҡатынымды хыянаты өсөн таяҡ менән туҡмаясаҡтар һәм илдән ҡыуасаҡтар. Ә мин уны яратам һәм унһыҙ йәшәй алмайым..." Өйөнөң тупһаһында шулай уйланып, икеләнеп бер аҙ ултырғас, сауҙагәр үҙенең хеҙмәтсеһенә... теге һандыҡты асып ҡарамайынса, баҡсаға сығарып, ергә күмеп ҡуйырға бойора..."**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән тәҡдимдәр, ниһайәт, күбәйә башланы. Тиҙ арала һәр быуын башҡорто уҡырға тейешле китап/әҫәрҙәр исемлеген гәзит уҡыусылар, һеҙҙең ярҙам менән теүәлләп, билдәләп бөтөрбөҙ, моғайын.**

32. **Рәми Ғарипов "Алырымҡош менән Бирмәмҡош"**, йыйынтыҡ. "Был шағир кеүек Башҡортостанына, үҙ халҡына, туған теленә, халҡының зар-моңона булған һөйөүен бүтән бер нәфис һүҙ оҫтаһы ла йөрәк түренә инерлек итеп яҙа алмағандыр, минеңсә", - тип яҙа Баймаҡ районынан Гөлдәр Әлибаева.

33. **Рәсимә Ураҡсина "Башҡортостаным - йәннәтем"** шиғырҙар йыйынтығы.

"Рәсимә Ураҡсинаның был китабы балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла һоҡландырыр, уйландырыр, башҡорт теленә ҡарата һөйөү уятыр һәм иғтибар арттырыр", - тип тәҡдим итә Баймаҡ районынан Гөлдәр Әлибаева.

34. **Иҙрис Ноғоманов "Әсәйгә бүләк"** хикәйәләр йыйынтығы. "2008 йылда З. Биишева исемендәге Китап нәшриәтендә донъя күргән матур йыйынтыҡта онотолмаҫ бала саҡ хәтирәләре, үҫмерҙәр өсөн хикәйәләр тупланған. Ябай ғына күренештәр ҙә төрлө хис-тойғолар уятып, тормош маҡсаты, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланырға мәжбүр итә", - тип яҙа Ләйлә Ноғәмәнова.

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 55/01